ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-1 апрель - май (алағарай - һабанай) 2015

№ 17 (643)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тәбиғәт ғәрәсәттәренә кем ғәйепле,** йәки Ниңә юрауҙар "ҡартая"? 3



**Үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булмаһаҡ...** унда ситтәр хужа булыр бит 8-9

**Ысын ҡурайсылар...** бармаҡ менән һанарлыҡ 11



**Юғалып ҡалмайыҡ берүк...** 12



**ТВ-программа** 14

*Башҡорттар - абстракт фекерләүгә һәләтле, зирәк аҡыллы, һөйкөмлө халыҡ, улар сиктән тыш тәьҫирләнеүсән, хыялға бирелеүсән, ҡыҙыу, ләкин тиҙ һүрелеүсән, киң күңелле һәм ҡунаҡсыл халыҡ, уларҙы тик ялҡау ғына таламай һәм иҙмәй.*

*Ф. Д. Нефедов.*

## ИҒТИБАР!

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: республика ҡалалары һәм районарының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Әле 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы тураһында алдан хәстәрләп, "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына - 539 һум 76 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) 569 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

**Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Мартта гәзитебеҙҙе яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Рәшит Назаровтың **"Ер һәм йыһан йыры"** йыйынтығын, Шәүрә Шәкүрованың **"Өфө вокзалы"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Шәмбе өмәләренә ҡарата һуңғы йылдарҙа төрлө мөнәсәбәт белдерелә. Был күмәк хеҙмәт өлгөһө сағылышы булған сара тураһында ни әйтерһегеҙ?

***Тамара МӨХӘМӘҘИЕВА, БДУ студенты:*** Коллектив менән бергәләп үҙең уҡыған, эшләгән биләмәне шәмбе өмәһенә сығып йыйыштырыуға бәйле ниндәй кире мөнәсәбәт булыуы мөмкин инде: әлбиттә, йыуып-йышып, һепереп-түгеп, тирә-йүнеңде "гөлт" иттереп таҙартып ҡуйыу - үҙе бер байрам һымаҡ беҙгә. Тик кәйефте ҡырғаны шул: һуңғы ваҡыт хатта студент халҡы ла йөрөмәҫ булды бындай өмәләргә. Йыл да бер үк өс-дүрт кеше сыға была сараға төркөмөбөҙҙән. Сыҡмай ятып ҡалғандарға бер ниндәй шелтә лә, башҡа төрлө административ яза ла ҡулланылмай. Быны нисек аңларға һуң? Шуны ғына әйтергә теләйем: яҡшы, изге был эште үҙ ағышына ҡуйып, уның әһәмиәтен юҡҡа сығарырға күп кәрәкмәй, ә бары уны ирекле тип иғлан итеү ҙә етә. Ә был иһә һәр кемдең выждан сафлығына ҡағыла, әйткәндәй. Әлеге беҙҙең йәмғиәттә аңлылыҡ һәм намыҫ төшөнсәһенең юғары кимәленә иҫәп тотоп булмаған заманда кешеләрҙе ҡала һәм ауыл урамдарын, эргә-тирә биләмәләрҙе таҙартыу эшенә мәжбүри рәүештә йәлеп итеп алыуҙан бер зыян да булмаҫ ине. Ошо көндәрҙә генә "Бизнес FM" радиоканалынан шундай һандар яңғыраны: һорау алыуҙа ҡатнашҡан кешеләрҙең яртыһынан күберәге шәмбе өмәһенә сыҡмауы хаҡында белдерһә, респонденттарҙың ни бары 20 проценты ғына унда ҡатнаша, ә 18 процент кеше "сығыр инем, тик өмәләрҙең ҡайҙа һәм кем тарафынан ойошторолоуы хаҡында белмәйем", тип яуаплай. Күренеүенсә, күп нәмә был сараны аҡыллы итеп ойоштора белеүгә, уға байрам төҫө биреүгә лә бәйле. Ә инде дөйөм халыҡ эшенән ҡасып ҡалыусыларға ҡарата ниндәйҙер аныҡ саралар күрелһен, мәҫәлән, коллективтарҙа был хаҡта стена гәзиттәре сығарыу, шунда ялҡауҙарҙың исем-шәрифтәрен атап китеү ҡайһы берәүҙәрҙе оялтыр ине, бәлки. Мин хатта ниндәйҙер штраф санкциялары булдырыуҙы ла хуплар инем. Кеше хоҡуҡтары хаҡында фәлсәфә һатыусылар күп ул хәҙер, ләкин беҙҙең дә таҙа йәшәргә хоҡуҡты бер кем дә юҡҡа сығармаған. Таҙа йәшәргә теләһәк, уның өсөн көрәштә бөтөн саралар ҙа үҙен аҡлаясаҡ!

(Дауамы 2-се биттә).

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ОЛО ЕҢЕҮ КЕСКӘЙ ЙӨРӘКТӘРҘӘ...

**Илһөйәрлек - ул тыуған илеңде хозур тәбиғәте, ата йорто шунда булған, туғандарың шул ерҙә йәшәгән өсөн генә яратыу түгел. Илһөйәрлек - ул илеңдең тарихын белеү, халҡың кисерғәндәргә ихтирам менән ҡарау, ата-бабаң телендә һөйләшеү һәм улар йырлаған йырҙы йырлау, бейегән бейеүҙе бейеү, бер һүҙ менән әйткәндә - асылыңды белеү. Ә кеше үҙ асылын тик үҙенең милли мөхитендә тәрбиәләнгән осраҡта ғына таба ала, тимәк, милләтенең рухи байлығын кескәй сағынан уҡ күңеленә һеңдереп үҫкәндә генә ул илһөйәр буласаҡ. Ә бының өсөн нимә эшләргә кәрәк һуң? Ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткән "Тамыр" балалар телеканалының "Оло Еңеү кескәй йөрәктәрҙә" тип аталған сираттағы байрамына килеүсе тамашасылар был һорауға яуап тапты кеүек.**

(Дауамы 5-се биттә).




Игорь Киняпин фотоһы.

12+

✔ ***Иҫ китмәле һан: кешелек ер йөҙөнә йыл һайын 60 миллионлап сүп-сар түгә! Нисек түҙә быға Ер-әсә... Кешенең аңында юҡ икән таҙалыҡҡа ынтылыш, ҡаты административ саралар күреүҙән һис тә тартынырға кәрәкмәй.***



ПОЗИТИВ

# КЕМДЕ ЙӘЛЛӘРГӘ?

**Иртән телефон шылтыраны. "Уф, әйҙә әле, осрашайыҡ!" - тине таныш бер ҡатын. Ғәләмәт ҡыҙыҡ кеше ул, үҙенә кәрәкһә, ете ҡат ер аҫтынан табыр. Йомошо төшмәһә, оҙаҡ ҡына юғалып та торорға мөмкин. Уға минән кәңәш тә, өгөт-нәсихәт тә, ярҙам да кәрәкмәй, бары эсенә йыйылған**



**аһ-зарын түкмәй-сәсмәй һөйләгәндә минең шым ғына, арлы-бирле башымды һелкеп тыңлап ултырыуым ғына кәрәк.**

Бына әле лә унын шылтыратыуын нимәгә юрарға ла белмәй, аптырап ҡалдым. Бер яҡтан, иҫ киткес арыйым уның менән булған осрашыуҙан һуң, икенсе яҡтан, мин тыңламаһам, уны кем тыңлай, тип тә уйлайым. Бына әле лә иҫәнләшеп тә тормайынса һүҙ башланы:

- Мине бер кем дә аңламай!

- Нинә улай тиһең әле?

- Һуң, үҙең уйлап ҡара. Өйҙә иргә бер һүҙ әйтеп булмай, үсегергә генә тора. Эштә бисәләрҙән унманым. Бер яңы кейем кейеп килер хәл юҡ, көнө буйы арттан сәйнәйҙәр. Бөгөн тағы етәксем менән һүҙгә килдем. Яратмай ул мине. Ене кеүек күрә. Шәп иттем әле үҙен, эштән китәм, тип, ғариза һалып киттем алдына. Барыбер ебәрмәҫен беләм бит инде. Уф... Хатта сер булешер яҡын әхирәтем дә юҡ бит. - Минең аптырап ҡарап ҡуйыуыма: "Һинән башҡа", - тип өҫтәне.

Шунан ул ҡапыл һөйләшеү темаһын үҙгәртте: "Ҡара әле, һине бөтәһе лә яраталыр ул, шулаймы?"- тип һораны. "Иллегә - илле", - тинем мут йылмайып. "Кит әле, юҡты һөйләмә. Нисек инде улай?" - тип аптырап, тәү күргәндәй һынап ҡарауына рәхәтләнеп көлдөм.

- Ысынында иһә, минең эргәмдәге мине яратҡан һәм, Аллаға шөкөр, яратмаған кешеләрем бер сама. Гел генә маҡталып йөрөү алама вирус һымаҡ бит ул. Йәшәү көсөн кәметә, ялҡауландыра, вайымһыҙға әйләндерә. Шуның өсөн дә һине яратмаған кешеләргә рәхмәт уҡырға кәрәк. Улар бит ауырлыҡтарҙы еңергә, проблемалар алдында ҡаушап ҡалмаҫҡа өйрәтә. Шуға ла мин үҙемде яратмаған кешеләрҙе икеләтә яратам. Һәр саҡ этәргес булғандары өсөн, - тип һөйләп алып киттем.

- Һы... Сәйер кеше һин. Мин һине бөтөнләй аңламайым. Йә, һинә ваҡытымды әрәм итеп ултырмайым әле. Пока! Киттем мин!..

Ҡапыл тороп сығып киткән танышымдың артынан иларға ла, көлөргә лә белмәй ултырып ҡалдым. Кемде йәлләргә? Һәр ваҡыт кемдәндер ғәйеп эҙләгән унымы? Әллә кешеләргә сәйер күренгән үҙемдеме?..

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Шәмбе өмәләренә ҡарата һуңғы йылдарҙа төрлө мөнәсәбәт белдерелә. Был күмәк хеҙмәт өлгөһө сағылышы булған сара тураһында ни әйтерһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Хәбирйән ТАҺИРОВ, мәғариф һәм журналистика ветераны, Ҡыйғы районы:*** Йомош-юл менән Өфөгә йыш йөрөргә тура килә. Әлеге килеүем шулай бысраҡ ваҡытҡа тап булдымы - баш ҡалабыҙҙың төпкөл урамдары күләүек тә батҡаҡ. Быны йәкшәмбе өмәләренә сығып ҡына бөтөрөп булмайҙыр инде ул. Һеҙҙең редакция, ярай ҙа, Революцион урамдың ҡалҡыу яғында урынлашҡан, ә бына ошо үк урамдың йоп рәтендәге күләгәле урындар үтеп сыҡҡыһыҙ батҡаҡ. "Башҡортостан энциклопедияһы" редакцияһы тирәһендә лә булырға тура килде: шул уҡ хәл. Тәҙәләш, торлаҡ йорттар янында арҡыс-торҡос гараждар ҡунаҡлаған. Өфөлә хәҙер йәйәүлегә йөрөр юл да ҡалмаған, бөтөн тротуарҙы машиналар биләп алған. Уларҙы тап йәйәүле йөрөй торған тигеҙ, ҡоро (почетлы) урындарға мендереп ултыртып ҡуйғандар, ә ҡарт-ҡороға, инвалидтарға, коляска һөйрәгән балалы әсәләргә теләһә ҡайҙан юл табып, урап үтергә тура килә - ошо тәртипһеҙлек айырыуса күҙгә ташлана. Бәлки, ошо шәмбе өмәләренән һуң күркәмләнер Өфө. Әле өмәләрҙең башы ғына бит әле. Үҙен ҡаланың патриоты итеп тойған, тәрбиәле кеше, беренсенән, сүпләмәй; икенсенән, шәмбе өмәһенә лә тап ана шундай аңлы кешеләр генә сығып йыйыштыра, башҡалар ҡыйлағанды таҙарта... Ә кем урамда үҙен өйөндәге кеүек тота, ундайҙарҙы шәмбе өмәләренә сығырға мәжбүр итеп кенә тәртипкә күндереп булмаясаҡ.

***Фәтих МУЛЛАҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Яҙҙы - тәбиғәттең уҙайлы ҡышҡы йоҡонан уяныуын һәр кем көтөп алалыр. Тик ошо илаһи миҙгелде йәмһеҙләгән бер күренеш бар: тирә-йүнебеҙ тулы сүп-сар араһынан килеп "уянабыҙ". Был айырыуса ҡала ерҙәренә хас, тип әйтер инем, сөнки ауылдарҙағы яҙғы батҡаҡ ҡалаларҙағы сүп-сар баҫҡан урамдарҙан күпкә таҙараҡ. Бөйөк шағир Пушкин да күбеһенсә ана шул бысраҡлыҡ өсөн яратмағандыр, тием, яҙ миҙгелен. Улай тиһәң, бында Яҙһылыуҙың бер ғәйебе лә юҡ, кешеләр үҙҙәре тыуҙыра бындай бысраҡлыҡ һәм тәртипһеҙлекте. Бәс, шулай булғас, кешеләр үҙҙәре таҙартырға тейеш булып сыға түгелме һуң үҙҙәре артынан? Тәгәйен мин үҙем урамда хатта автобус билетын ташлап китергә лә намыҫым етмәй, ә шулай ҙа үҙ ғүмеремдә шәмбе өмәһенән ялтарғаным булманы, шөкөр. Ә бына эргәбеҙҙә генә йәшәп ятҡан бәғзе бер "философтар" сығыҙғамы, юҡмы өмәгә, кәрәкме ул беҙгә, юҡмы, тип аҡыл һата, юҡ ерҙән бәхәс ҡуҙғата. Эйе, бер яҡтан ҡарағанда, улар үҙҙәренсә хаҡлы ла һымаҡ: ҡалабыҙ таҙа, тәҙәк булһын өсөн һалым түләйбеҙ, тимәк, ҡалғаны ҡала властары ҡулында, таҙалыҡты улар ҡайғыртһын, тип бара улар. Ысынлап та, эш урынында оклад тәғәйенләнгән йыйыштырыусы-техничка була тороп, бушлай тәҙрәләр йыуырға, "Зеленхоз" урынына газон-сквер тырматып, ағас ултыртырға, урам һепереүсе урынына кәрәкһепертке тотоп, сүп-сар таҙартырға тура килә. М. Булгаковтың "Эт йөрәге" повесындағы профессор Преображенский әйтмешләй, һәр кем үҙ эшен башҡарырға тейеш түгелме ни: табип - дауаларға, уҡытыусы - уҡытырға, ер һепереүсе - сүп-сар йыйыштырырға? Шулайһын-шулай, ләкин йылына бер тапҡыр кәрәк-һепертке тотоп һелкенеп алыуҙан бер кемдең дә "уҡаһы ҡойолғаны" юҡ бит әле. Уның ҡарауы, шәмбе өмәһенән һуң йәмләнеп, балҡып киткән ҡала урамынан хужаларса атлап үтеүе ни тора! Кеше таҙалыҡтың ҡәҙерен үҙ елкәһендә "татып" аңлай, шуныһы мөһим. Тик шул тойғоно балалар, йәштәр аңына һеңдереү кәрәк. Иғтибар итһәгеҙ, урамда үҙҙәрен иң тәртипһеҙ тотҡаны, иң күп ҡыйлаусы тап ана шулар бит! Урта, өлкән быуын вәкилдәрендә бындай ҡылыҡлылар һирәк осрай. Уйлап ҡараһаң, иҫ китмәле һан: кешелек ер йөҙөнә йыл һайын 60 миллионлап сүп-сар түгә! Нисек түҙә быға Ер-әсә... Кешенең аңында юҡ икән таҙалыҡҡа ынтылыш, ҡаты административ саралар күреүҙән һис тә тартынырға кәрәкмәй, минеңсә. Шәмбе өмәһен ҡайһы берәүҙәр совет заманынан, Ленин шәмбеһенән ҡалған "коммунистик гәҙәт" тип бик яңылыша. Был традиция беҙҙең илдә генә түгел, күпселек Европа һәм Азия илдәрендә: Германия, Бөйөк Британия, Норвегия, Финляндия, Яңы Зеландия, Индонезия, Малайзия һәм башҡа илдәрҙә киң таралған. Әйткәндәй, уларҙың күбеһендә, ергә сүп-сар ырғытҡан, хатта тәкөргән кешеләргә ҡаршы ҙур штраф ярҙамында аяуһыҙ көрәш алып барыла. Сингапурҙа, мәҫәлән, ай һайын 300-гә яҡын таҙалыҡ боҙоусы тотола һәм урындағы 1000 доллар күләмендәге штрафтан тыш, ике аҙнаға файҙалы йәмғәт эштәренә мәжбүр ителә. Шәмбе өмәләренән боҫоп ҡалыу ҙа беҙҙәге кеүек шыма ғына үтеп китмәй, улар йәмәғәтселек хөкөмөнә дусар була. Әйткәндәй, ҡалабыҙҙа әҙәпкә, таҙалыҡ һаҡлауға өндәгән саҡырыуҙар, социаль рекламалар күберәк булһын ине. Әсә һөтө менән инмәгәнгә - инмәһә лә, өсөйҙәң берәүһе ҡарап һабаҡ алһа ла - файҙа.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**



*Башҡорт йәштәре Салауат Юлаев һәйкәле майҙанын сүп-сарҙан таҙартты.*

*Э. Дилмөхәмәтов фотоһы.*

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Хөкүмәте бойороғо буйынса 27 апрелдән 27 майға тиклем республикала дөйөм ҡулланылыштағы юлдарҙа һәм ундағы яһалма ҡоролмаларҙа, шулай уҡ юл буйҙарында тәҙәкләндереү, санитар-техник хәлдә яҡшыртыу, тәртип урынлаштырыу буйынса айлыҡ үткәрелә. Урындағы үҙидаралыҡ органдарына Һамар-Өфө-Силәбе автомобиль магистрале идаралығы һәм "Башкиравтодор" предприятиеһы менән берлектә айлыҡҡа әҙерлек буйынса штабтар булдырырға, ремонт бригадаларын ойоштороуҙы тәьмин итергә, асфальт-бетон япмаларҙы, автомобиль юлдарының ташҡын һөҙөмтәһендә емерелгән участкаларын ремонтларға тәҡдим ителде.

✔Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов РФ һәм БР дәүләт наградалары тапшырҙы. Орден, маҡтаулы исемдәр, маҡтау грамоталарына төҙөлөш, сәнәғәт, энергетика, социаль өлкә, муниципаль идаралыҡ, транспорт, фән, матбуғат өлкәһендә эшләгән 31 хеҙмәткәр лайыҡ булды.

✔"Башҡортостан" киностудияһы режиссеры Рим Шәрәфетдинов "Икар" Беренсе Милли анимация премияһы еңеүселәренең береһе тип танылды. Ул "Аниматор" номинацияһында "Ни пуха, ни пера" фильмы өсөн наградаға лайыҡ булды, тип хәбәр итте Башҡортостан Кинематографистар союзының матбуғат секретары Зөһрә Бураҡаева.

✔9 майҙа Өфөлә Еңеү парады буласаҡ. Тантаналы йөрөш иртәнге сәғәт 10-дан 11-гә тиклем дауам итәсәк. Еңеү парадында 1349 кеше ҡатнаша. Йәнғи сарға Оборона, Мәғариф министрлыҡтары, Федераль суд приставтары хеҙмәте, Федераль яза башҡарыу хеҙмәте идаралығы, Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге һәм башҡа ведомство вәкилдәре йәлеп ителәсәк. Быйылғы парадта хәрби техника ҡатнашмаясаҡ.

✔Башҡортостан инвалид балалар өсөн белем биреү учреждениелары асыуға федераль субсидиялар бүлеләсәк субъекттар иҫәбенә инде. Ошо маҡсатта республикаға 152 миллион 652 мең һум бүленәсәк. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған. Федераль түләү алыусылар исемлегендә - 82 төбәк, субсидияларҙың дөйөм суммаһы - 3 миллиард һумдан ашыу. Был аҡсалар 3150 дөйөм белем биреү мәктәптәре асыу өсөн тотонолорға тейеш, тип күҙаллана.

*✓ Ер полюсы ла, Ер һәм космос бәйләнеше үҙгәреүе һөҙөмтәһендә, Ерҙең күсәре 7 градусҡа ауышҡан, тип белдерәләр. Киләсәктә Уралда ла әфлисун үҫтереү ғәҙәти күренешкә әүереләсәк, тигәндәренә лә ышанмай булмаҫ.*



*ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ*

**Радио, телевидениенан яңғыраған "Һауа торошо" мәғлүмәттәрен көтөп алабыҙ. Ошо ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәттән сығып, бөгөн урамда ниндәй кейем кейеп йөрөү яҡшыраҡ икәненән башлап, иртәгә һаулығыңа, хәл-торошоңа тәьҫир итерлек ниндәй атмосфера баҫымы, дымлылыҡ көтөлөүенә тиклем мәғлүмәт алырға була. Әммә был мәғлүмәт бер көн өсөн генә. Тейешле хеҙмәттәргә көндөң нисек килерен билдәләү ҙур көс һәм тырышлыҡ талап итһә лә, тәбиғәттә бынан да ҡатмарлыраҡ хәл-ваҡиғалар бихисап. Шуғалыр, метеорологтар, синоптиктар, фенологтар көндәр, айҙар, йылдар буйы эш өҫтөндә. Ә халыҡ көн, тәбиғәт торошона ниндәй мөнәсәбәттә? Миңә ҡалһа, көн торошо менән бөтә кеше лә ҡыҙыҡһынып та бармайҙыр. Кеше уның менән ҡыҙыҡһынып китһен өсөн берәй этәргес көс, етди генә сәбәп кәрәк.**

# ТӘБИҒӘТ ҒӘРӘСӘТТӘРЕНӘ КЕМ ҒӘЙЕПЛЕ,

## йәки Ниңә юрауҙар "ҡартая"?



Мин, мәҫәлән, бала саҡтан ололарҙың "ай башы", "числа (число) башы", "ай араһы", "әүҙәким", "питрау", "әҡрап", "ҡышҡы сеәлә", "йәйге сеәлә" тип һөйләгәндәрен, яңы ай тулғанын көтөп алып, ҡарап, төҫөн билдәләп, ай урағының оҙонлоғон, яҫылығын, уның яҙыҡ, кәкес булыуын һәм торошон (салҡан ята, текә тора) билдәләп, фараздар килтереп, доға ҡылғандарын ишетә-күрә йөрөнөм.

Шул халыҡ һынамыштары аша улар йылдың, айҙың, көндөң нисек килерен алдан әйтер булды. Улар нисек тормошҡа ашҡандыр - белмәйем. Шулай ҙа, һынамыштар тура килмәһә, ололар: йола "ҡартая", тиҙәр ине. Һынамыштар бер бөгөн генә аҡланмағандыр, күрәһең - элек тә тормошҡа ашмаған саҡтар булғандыр. Үҫә төшкәс, ололар әйткәндәрҙе дәфтәргә теркәй барҙым. Ул саҡта үлсәү приборҙарын (термо-, баро-, гидрометр) белеү түгел, ел йүнәлешен билдәләрлек белемем дә юҡ ине. Был хәлдән һуң инде 65 йылдан артыҡ ваҡыт та үтеп киткән. Иҫке яҙмаларымды һаҡламағанмын. Ә аҙмы-күпме белемгә эйә булғас, төрлө приборҙар ҙа туплағас, күҙәтеүҙәрҙе үҙем дә алып бара башланым. Шулай итеп, инде 40 йыл күҙәтеү алып барам.

Яҙҙырған, осратҡан гәзит-журналдарҙан папка-папка тупланмалар, төрлө китаптар йыйҙым. Был, билдәле, тик ҡыҙыҡһыныуым һөҙөмтәһе. Тупланған мәғлүмәттән, китап-белешмәләрҙән сығып, фәнни яҡтан нигеҙләп, китап та әҙерләрмен һымаҡ ине. Билдәле ки: йәшәү рәүеше үҙгәрҙе, хыялдар һүрелде. Шулай ҙа күҙәтеүҙәремде ташламаным.

Ваҡытында алдырған "Наука и жизнь" журналында бер-нисә йыл рәттән "Рокот забытых бурь" тигән исем аҫтында төрлө тәбиғәт катаклизмдары тураһында мәғлүмәттәр баҫылды. Был мәҡәләләрҙә беҙҙең эранан алдағы йылдарҙан беҙҙең көндәргәсә һәм киләсәккә күҙаллауҙар бар ине. Уларҙы бер урынға туплап, төпләп алмаҡ булдым. Ләкин бер һанын (№ 10, 1981 й.) таба алманым. Өфөләге бер китапханала эшләгән йәш ауылдашым Әмир Ҡотләхмәтовтан шул һанды табырға ярҙамлашыуын һораным. Өфө китапханаларында ул журналдар бар, ә миңә кәрәкле биттәре береһендә лә юҡ - йыртып алынған. Әмир Мәскәүгә заказ биреп, ксерокопия алдыртып, миңә ебәрҙе. Үтә лә ҡыҙыҡ һәм һәм әһәмиәтле мәғлүмәттәрҙе шулай таптым...

Элекке күҙәтеүҙәр көн, йыл килерен дини ваҡиға, шәхестәр менән бәйләп алып барылған. Мәҫәлән, "Времена года. Православный народный календарь" китабы ошоға асыҡ миҫал. Күрәһең, дин - йәшәү рәүешең, көнитмешең, тигәндәрҙер. Шул уҡ хәл В. Грошевтың "Календарь российского земледельца" китабында, йәки, "Российский календарь знаменательных дат" айлыҡтарында асыҡ күренә (бөтәһен һанап бөтөп тә булмай).

Йылдың, миҙгелдең нисек килерен элек дөрөҫ фаразлап та булғандыр. Ләкин һуңғы йылдарҙа һауа торошо беҙҙең фараздарға, теләктәргә һис кенә лә "бойһонмай". Сөнки, Ер полюсы ла, Ер һәм космос бәйләнеше үҙгәреүе һөҙөмтәһендә, Ерҙең күсәре 7 градусҡа ауышҡан, тип белдерәләр. Киләсәктә Уралда ла әфлисун үҫтереү ғәҙәти күренешкә әүереләсәк, тигәндәренә лә ышанмай булмаҫ.

Йылдың нисек килерен мөсәл йылдары менән дә бәйләйҙәр. Мәҫәлән, "Барыс йылы - барын сәс, һис булмаһа, тары сәс", тиҙәр. Мин һәр йылдың нисек килеүен ҡыҫҡаса яҙып барам. Барыс йылы 1986 йылда үткән. "Ҡар күп, йылы, яҙ - яуым-төшөмһөҙ, йәй - һәйбәт. Бесән күп, икмәк мул, ныҡ шәп йыл", тип яҙғанмын. 1998 йылдағы барыс йылын: "Йылы, бәҫле ғинуар, февралдә - һыуыҡ, буран. Март - яҙ һуң килде. Эҫе, ҡоро йәй. Ямғыр һирәк. Бесән, иген насар. Йылы, ҡоро көҙ. Ҡар һуң яуҙы. Һыуыҡ ноябрь, йылы, болотло декабрь", тип ҡылыҡһырлағанмын. 2010 йылдағыһын иһә: "Ҡар - уртаса, һирәк-һая бураны булды. Яҙ ныҡ һуң, һыуыҡ килде, ел. Майҙа - эҫе. Эҫе, ҡоро йәй. Бесән аҙ. Икмәк юҡ. Оҙон көҙ. Декабрҙә ҡапыл һыуытты", тип теркәгәнмен. Минең күҙәтеүҙәрҙән шул күренә: халыҡ юрауы, ышанысы аҡланмай.

Ерҙә лә, йыһанда ла циклдар бар. Уларҙы төрлө арауыҡтар: 30, 60, 120... йылдар менән билдәләйҙәр. Шулайҙыр. Ундай күҙәтеүҙәр белгестәргә, ғалимдарға билдәле. Ә беҙгә, синоптик, фенолог "вазифа"ларын башҡарыусыларға, уларҙың һүҙенә ышанырға, дөрөҫлөгөнә өмөт итергә генә ҡала. Шуға, моғайын, ерҙең, йыһандың циклдарын иҫәпкә алғанда, мөсәлдәрҙең бер-береһенә тап килмәүе ул тиклем үк ҡурҡыныс та түгелдер.

Быйыл йылдың нисек килере менән ҡыҙыҡһыныусылар күбәйә төштө. Был, әлбиттә, насар түгел. Был ынтылыш беҙҙе тәбиғәт менән бәйләй, уға яҡынайта, иғтибарыбыҙҙы йүнәлтә. Сөнки, йәшәгән мөхитебеҙ тарая, ярлылана бара. Шлезвиг-гольштейн вәкиле О. Адам 1639 йыл тирәһендә: "Вся Россия - бездна всякой лесной дичи, птиц и зверей", - тип яҙған. ("Человек и природа", №6, 1981 г.). Эйе, беҙ бала саҡта яҙын төрлө яҡта уйнаған ҡор тауыштарынан ҡолаҡ тонор ине. Уларҙы хатта тоҙаҡҡа эләктерер булдыҡ. Бөгөн улар үтә һирәк. Йәшәү сығанағы булған тәбиғәтте һаҡлай белмәйбеҙ. Хәҙер килеп, уның үҙгәреүенә аптырарға ла түгел, тим мин.

Быйыл ҡыш ҡарһыҙ булды, йылы-һыуыҡ алмашлап килде. Яҙ булған ҡарҙың март башында уҡ иреүенән башланды. Әле лә ҡар ята. Апрель башында ямғыр яуҙы. Йәйе лә ошолай бола булыр һымаҡ.

Ҡар һыуының ергә һеңгәнен боронғолар оҡшатмаған. Үткән йылда ла, быйыл да ҡар һыуы миңә бер ҙә оҡшаманы. Урыҫтарҙың "вербное воскресенье"һы үтте. Ошо көнгәсә тал көсөгө күренмәй, ниңәлер. Урыҫтар: "Апрель с водою - май с травою", - ти. Әле апрель ҡояшы менән ҡыуандырмай. Әллә майҙы көтәйекме? "Май холодный - год хлебородный", - тиҙәр бит.

Күптән түгел "Юлдаш" каналы бер тапшырыуында "Һеҙгә ниндәй тәбиғәт ғәрәсәттәрен кисерергә тура килде?" тигән һорау ҡуйғайны. "Юлдаш"тың үтенесен ҡәнәғәтләндереп, үҙ ғүмеремдә шаһит булған тәбиғәт ғәрәсәттәре тураһындағы яҙмаларымдан өҙөктәр килтермәксемен.

"1943 йылда ҡар ҙурайғас, ҡапыл һыуытты. 1944 йылдан аҙаҡ йылдар ҡоро килде. Тик 1952 йылдар ғына матур булды. Бер-нисә йыл инде беҙҙә оҙайлы ҡоролоҡ тора. 1949 йылдың ғинуары ямғырлы, йылы килде. Ә көҙө ҡоро, оҙайлы ҡоро һыуыҡлы булды. 1968 йыл июнь баштарында атҡа бесән сапмалы ине. Ә бишенә ҡараған төндә 30-35 см ҡалынлығында ҡар яуып һалды. 2000 йылдың май-июне шул тиклем ямғырлы булды, хатта һыу һеңмәй, яҙғы ташҡын һымаҡ аҡты..."

"1947, 1965 йылдарҙың йәйҙәре лә көслө ямғырлы булды. Һаҡмар йылғаһы яҙғы ташҡындай һыуға тулышты. 1958 йылдың сентябрь башы матур көн ине. Ямғыр башланды. Комбайнда эшләйем. Бына 19-ы көнө 15-20 см ҡалынлығында ҡар яуҙы. Ирене. Октябрь аяҙ, йылы килде. 1991 йыл (4 июль) Юлдыбай аша үткән борсаҡ боҙо 63 мм. ине..."

Бындай күренештәр урыны менән булғылай. Үткән йәй беҙҙең тирәлә 2-3 тапҡыр ғына уртаса ямғыр үтһә, Иҙел башында артыҡ һыуҙан картуф серегәнен, Инйәр һыуының таҙарып та өлгөрмәгәнлеген беләбеҙ.

Республиканың көнбайыш районлары үткән йылдың йәйе ҡоро килә, тип ҡурҡҡан саҡта, көҙ мул уңыш алыуҙарынан ниндәй шатлыҡ кисереүҙәрен аңлайым. БСТ-ла "Базы" хужалығы етәксеһе, арпа гектарынан 60 центнер уңыш бирә, тигәнен ишетеп, ҡоларҙай булдым. Фермерыбыҙ сәскән иген йыйып алырлыҡ та үҫмәгәйне шул.

Ошо урында нәшриәт хеҙмәткәрҙәренә үпкәмде белдерәм. Селлә башланыуын яңылыш күрһәтәләр. Ул хата "Башҡорт теле һүҙлеге"ндә лә бар. Быйылғы "Башҡортостан календары"ның 6-сы битендә лә ул ҡабатлана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Селлә башланыу ваҡиға менән бәйле. Ҡыш Раштыуанан (7.01) һуң (шуға ла, "начало крещенских морозов" ти урыҫ), ә йәй - питрауҙан (08.07) һуң башлана ла, 40 көн дауам итә. Мин юрый селләне өлкәндәрҙән генә түгел, йәштәрҙән дә белешәм. Улар дөрөҫ яуап бирә. Бирелгән көндәр иҫкесә календарҙан. Эйе, католик, протестанттарҙа Раштыуа - 25 декабрь. Ә насраниҙар 26-һынан башлап, Раштыуаға хәтле 12 көн киләһе айҙар килешен билдәләй. Әммә юрау һис тә тап килмәй. Мин ҡайһы саҡта "тикшергеләйем". Тәбиғәт үҙенсә йәшәй. Ҡайһы осраҡта уға йәшәргә ирек тә бирмәйбеҙ, уның беҙгә хеҙмәт иткәнен онотабыҙ. Йәл.**

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Нефтекаманың "Торос" хоккей клубы Юғары хоккей лигаһында чемпион титулын яуланы. Хоккейсылар финал уйындарында Ижевсктың "Ижсталь" командаһын еңде һәм һуңғы 4 миҙгел эсендә өсөнсө тапҡыр Юғары хоккей лигаһының төп трофейы - Братина Кубогына эйә булды.

✓30 апрелдә физик шәхестәрҙең килеменә һалым буйынса декларациялар тапшырыу ваҡыты тамамлана. Был көндәрҙә һалым инспекциялары һалым түләүселәргә ярҙам итеү йәһәтенән "Асыҡ ишектәр көнө" акцияһы уҙғара. Уның барышында белгестәр декларация тултырғанда ярҙам күрһәтәсәк.

✓Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Сергей Михалев юл-транспорт фажиғәһендә һәләк булды. Сергей Михалев 70-се йылдарҙан алып башҡорт клубы составында уйнай. Карьераһы тамамланғас, тренер булып эшләй, "Салауат Юлаев"тың баш тренеры (1979-1990) була. 2005 йылда баш тренер вазифаһына Өфө клубына кире ҡайта, уның етәкселегендә юлаевсылар 2007-2008 йылдар миҙгелендә Рәсәй чемпионатында алтын миҙал яулай. 2015 йылдың февраленән Сергей Михалев клубта спорт мәсьәләләре буйынса генераль менеджер вазифаһын биләне.

✓27 апрелдә Өфө дәүләт авиация техник университетында уҡыу йортоноң ректорын һайлау буйынса фәнни-педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең конференцияһы була. Комиссия рәйесе Игорь Александров хәбәр итеүенсә, ректор вазифаһына кандидаттар исемлеге Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығының Аттестация комиссияһы менән килешелгән. Исемлектә иҡтисад фәндәре докторы Александр Дегтярев, техник фәндәр докторы, профессор Николай Криони, техник фәндәр докторы Рөстәм Монасипов бар.

✓Сибай ҡала Советы депутаттары уҡыу йорттарында ҡаланың юбилейына һәм ҡала округы Советының 10 йыллығына арналған асыҡ дәрестәр үткәрә. Акция Урындағы үҙидара көнө алдынан уҙғарыла. Асыҡ дәрестәргә почетлы граждандар - тәүге төҙөүселәр, таусылар һәм сәнәғәтселәр саҡырылған, улар уҡыусыларға ҡаланың барлыҡҡа килеү тарихы хаҡында бәйән итә, тип хәбәр иттеләр муниципалитеттан.

**"Башинформ"дан.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# МАССАЖ ЭШЛӘП...
## аҡса һуғам

**Замана талабы шундай бөгөн - һәр кем төп эш урынан тыш, ниндәй ҙә булһа өҫтәмә килем алыу юлын эҙләй. Кемдер икенсе, өсөнсө, хатта дүртенсе эшкә урынлашып, көнө буйы ат ымаҡ саба, икенселәр яраткан шөғөлөнән килем алыу юлын таба. Мине лә был мәсьәлә урап үтмәне, эш хаҡым айҙан-айға көндө көнгә ялғап йәшәргә етһә лә, бер ҡасан да артыҡ аҡсам булманы. Һатыусы булып эшләгәс, бер-нисә урында эшләү минең өсөн түгел, сөнки иртә тандан ҡара кискә тиклем прилавка артында тороп, эт кеүек арып ҡайтып йығылам. Аҡса килтерерлек шөғөлдәрем дә юҡ бит, исмаһам, тип, үҙемә йәнем дә көйөп китә ине ҡайһы саҡта. Ләкин юлын таптым барыбер - ял ваҡытында йүгереп йөрөп массаж эшләйем. Гәзит уҡыусыларҙы ла минең сафымды тулыландырырға саҡырам.**

Бөгөнгө көндә массаж - ҙур һорау менән файҙаланған хеҙмәт. Берәүҙәр массаж эшләүсегә ниндәйҙер етди ауырыу һөҙөмтәһендә мөрәжәғәт итһә, икенселәр ауыр эштән һуң тәндәрен яҙыу өсөн йәки һаулыҡтарын хәстәрләп, ошо хеҙмәт менән файҙалана. Ләкин шуныһы факт: һәйбәт белгес клиентһыҙ тормай. Һәм иң мөһиме - массаж серҙәренә теләгән һәр кем өйрәнә ала. Бының өсөн төрлө курстар бихисап, уҡырға йөрөргә ваҡытың булһын да, түләргә аҡсаң ғына табылһын. Мин дә аҡсаны ҡыҫып-һығып түләп, махсус курста уҡып сыҡтым. Ләкин был ғына аҙ, артабан тәжрибә туплау мөһим. Бының өсөн мин өйҙәгеләргә "тотондом" - һәр кис алмашлап йә иремдә, йә улымда өйрәнгән алымдарҙы камиллаштырҙым. Тәүҙәрәк "ҡулың ҡаты", "дөрөҫ эшләмәйһең", "тәнде күгәртәһең" тип мыжыған иптәштәр тора-бара үҙҙәре үк массаж эшләүемде һорай башланы. Уларҙың артымдан ҡалмай йөрөүе хеҙмәтемде киң массаға сығарыу ваҡыты еткәнлегенә ишара булды. Тәүҙә һөнәремде бергә эшләгән хеҙмәттәштәремә тәҡдим иттем - барыһы ла ҡәнәғәт ҡалды. Унан инде сират һеңле һәм ҡустыларға етте. Артабан "сарафан" радиоһы үҙенекен эшләне - клиенттар үҙҙәре шылтырата башланы. Һәр кемгә иғтибарлы булыуым һәм эшемә илке-һалҡы ҡарамауым уларҙың һаның көндән-көн арттыра.

Ҡайһы бер ауырыуҙар өсөн массаж зарарлы, шуға күрә бик һаҡ булырға кәрәк. Ғөмүмән, дауалаусы массаж бик нескә өлкә һәм махсус медицина белеме булмаған кешегә массажға килеүсенең һаулығын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу хәйерле. Мин, мәҫәлән, медицина белемем булмау сәбәпле, дауалау массажы эшләмәйем, ә бөтөн тәнгә һәм арҡаға ғына эшләнгән классик массажға өҫтөнлөк бирәм. Тәүгеһендә бер сәғәтлек курс өсөн 600 һум, ә икенсеһендә 400 һум алам. Ҡалала быңдай хеҙмәт күрһәтеүсе махсус салондар ҙа, айырым кешеләр ҙа бихисап, шуға күрә конкурентлыҡ һаҙлығында батып ҡалмаҫ өсөн хаҡты арзанырак ҡуям. Аҙнаһына кәмендә өс-дүрт сеанс эшләйем һәм алған килемем миңә етә - артығы кәрәкмәй.Ә шул уҡ ваҡытта сығымдар юҡ, тиһәң дә була - аҡса юлға һәм белемде камиллаштырыу өсөн һатып алынған махсус әҙәбиәт өсөн генә кәрәк.

Шулай итеп, ҡулымдан файҙа күрәм. Әлбиттә, өйрәнеп киткәнсе, ауыр булды - ҡулдар ҙа тиҙ арыны, дөйөм хәл дә бөтә ине. Хәҙер иһә бер ҡыйынлыҡты да күрмәйем - был шөғөлөм миңә төрлө кеше менән аралашыу мөмкинлеге лә бирә, кеҫәмде лә ҡалынайта.

**Гөлшат ИСКӘНДӘРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЗАМАН ТАЛАБЫНА ЯРАШЛЫ

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһының генераль директоры Олег Добродеев, компанияның генераль директоры урынбаҫарҙары Рифат Сабитов, Станислав Хаустов, Алексей Земский, "Башҡортостан" ДТРК-һы директоры Азамат Сәлихов һәм башҡа рәсми кешеләр менән бергә "Башкортостан" ДТРК-ның яңы аппарат-студия комплексын сафҡа индереүҙә ҡатнашты.**

Яңы комплекс составына "Dalet" автоматлаштырылған яңылыҡтар системаһы, серверҙар, биш студия камераһы инә. Бөгөнгө көндә быңдай техника донъялағы алдынғы телекомпанияларҙа файҙаланыла. Комплекс телевизион тапшырыуҙарҙы һанлы форматта күрһәтергә мөмкинлек бирә. Өфөлә уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС саммиттары барышында "Башҡортостан" ДТРК-һы Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһы каналдарында тура бәйләнеш булдырыу өсөн төп майҙансыҡ буласаҡ.

Аппарат-студия комплексын ҡарағандан һуң, Рөстәм Хәмитов һәм Олег Добродеев "Хәбәрҙәр-Башҡортостан" программаһының тура эфирында сығыш яһаны.

- Яҡшы тәьҫораттар алдыҡ. Ресурстар табып, Өфөләге филиалды тәүгеләрҙән булып йыһазландырыуҙары өсөн Олег Борисовичҡа рәхмәт белдерәм. Студия яңы форматҡа күсте. Һис шикһеҙ, телевидениела эш сифаты күпкә яҡшырасаҡ, - тип билдәләне республика Башлығы Рөстәм Хәмитов. - Беҙ, республика властары һәм Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһы, берберебеҙгә ярҙам итеп эшләйбеҙ, сөнки халыҡҡа мәғлүмәт еткереү бик мөһим. Бының өсөн ресурстарҙы йәлләргә ярамай.

- Башҡортостан - һанлы форматҡа тулыһынса әҙер булған тәүге төбәктәрҙең береһе. 2016 йылға тиклем күсеп өлгөрмәгән компаниялар тейешле стандарттарға тап килмәйәсәк, - тине Олег Добродеев. - Өфөлә был айырыуса мөһим, сөнки ошо комплексты ШОС һәм БРИКС саммиттары алдынан асабыҙ. Быға Башҡортостан Республикаһы, шулай уҡ Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһы етәкселеге ҙур өлөш индерҙе, тип иҫәпләйем.

# ҠЫТАЙ ТЕЛЕН ӨЙРӘНӘБЕҘ

**Өфө ҡала округы хакимиәте менән Ҡытай Халыҡ Республикаһының Хэйлунцзян провинцияһының Цицикара ҡалаһы Хөкүмәте араһындағы Дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ярашлы, баш ҡалала Сит илдәр һәм эмиграция эштәре начальнигы Лю Хайчжун етәкселегендәге рәсми делегация булып китте.**

Визит сиктәрендә муниципалитетта бер нисә осрашыу үтте. Делегация ағзалары ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов менән осрашып, мәғариф, спорт, мәҙәниәт һәм спорт, социаль өлкәһе мәсьәләләре буйынса һөйләшеүҙәр алып барҙы. Атап әйткәндә, яҡтар йәйге лагерҙар нигеҙендә телде һәм мәҙәниәтте өйрәнеү буйынса уҡыусылар менән алмашыу мөмкинлеген ҡараны. Шулай уҡ рус һәм ҡытай телдәрен сифатлы өйрәнеү маҡсатында уҡытыусылар менән алмашыу ҙа ҡаралды. Цицикара вәкилдәре спорт өлкәһендәге хеҙмәттәшлекте үҫтереү һәм Ҡытай спортсыларын хоккей уйнарға өйрәтеү өсөн Өфө хоккей командаһы тренерҙарын оҙайлы ваҡытҡа үҙҙәренә саҡырыу ниәтен дә белдерҙе. Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһенә килгәндә, "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле Цицикарала сығыш яһаясаҡ, шулай уҡ ике ҡаланың да байрам саралары ыйында ижади коллективтарҙың берлектәге сығыштарын ойоштороу планлаштырыла.

Инвестициялар бүлеге начальнигы Марс Әминев менән осрашыуҙа 2015 йылдың 12 июнендә баш ҡалаға Цицикара ҡалаһы мэрының визиты мәсьәләләре тикшерелде, дуҫтарса мөнәсәбәттәр булдырыу тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыу буйынса фекер алышынды. Быңан тыш, Ҡытай делегацияһы Өфөлә Цицикараның символын - торналар скульптураһын урынлаштырыу проектын тәҡдим итте.

Ауыл хужалығы өлкәһендәге, шул иҫәптән Өфөлә йәшелсә-емеш үҫтереү, эшкәртеү, һаҡлау мәсьәләләре лә иғтибар үҙәгендә булды. Ҡытайҙарға берлектә йәшелсә-емеш үҫтереү буйынса предприятие һәм продукцияны һаҡлау буйынса объекттар төҙөү мөмкинлеген ҡарау тәҡдим ителде. Ошо маҡсаттан делегация бер фермер хужалығы эше менән танышты һәм тәҡдимде үҙ эшҡыуарҙарына еткереү әҙерлеген белдерҙе.

"Өфө-Арена" универсаль спорт комплексында ҡунаҡтар балаларҙың фигуралы шыуыу һәм спорт гимнастикаһы күнекмәләрен ҡараны. Уларҙы бигерәк тә боҙ майҙанының ҙурлығы һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубының кеүәте һоҡландырҙы.

Эш һуңында делегация башҡорт кухняһы эше менән танышты һәм Цицикара мэрының визиты ваҡытында уға ла кулинармаркетты күрһәтеү тураһында килешелде.

# ЕҢЕҮ КӨНӨНӘ - СӘСКӘЛӘР!

**Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына баш ҡала төрлө төҫтәге сәскәләргә күмеләсәк. Әлеге ваҡытта барлыҡ парктарҙа, скверҙарҙа, клумбаларҙа, шулай уҡ төп урам булып һаналған Октябрь проспектында һәм "Өфө - Аэропорт" юлында уларҙы ултыртырға урындар әҙерләнә. Оло байрамға барлығы 400 мең самаһы ләлә һәм 150 мең башҡа төрлө бер йыллыҡ сәскәләр ултыртыласаҡ.**

Шулай уҡ Еңеү паркында ла төҙөкләндереү эштәре дауам итә. Советтар Союзы Геройҙары Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов) менән Минлегәле Ғөбәйҙуллинға ҡуйылған һәйкәл алдындағы Мәңгелек утты ремонтлау эштәре атҡарыла. Парк үҙе лә яңыртыла. Унда булған техникаға тағы ла дүрт пушка өҫтәлгән. Былтыр шулай уҡ Беренсе Май урамындағы аллея төҙөкләнделеп, уға "Еңеү аллеяһы" тигән атама бирелгән.

2013 йылдан алып Сергиев зыяратында Совет армияһы яугирҙарына ҡуйылған мемориаль комплексты, венгр хәрби әсирҙәре ерләнгән ҡәберҙәрҙе һәм туғандар ҡәберлеген төҙөкләндереү эштәре алып барыла.

Быңан тыш, баш ҡалала Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар йәшәгән йорт фасадтарында урынлаштырылған мемориаль таҡтаташтар ремонтланған. Йәштәр һарайы артындағы Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙа ла ремонт эштәре үткәреләсәк. Бында юлдарға асфальт түшәләсәк, төргәкле газон һалынасаҡ, үлән сәселәсәк, сәскә түтәлдәре яһаласаҡ һәм ҙур ағастар ултыртыласаҡ, һәйкәлдәр ремонтланасаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Һылыуҡай - 2015" республика гүзәллек бәйгеһендә Гран-приға Йылайыр районынан Илнара Үтәшева лайыҡ булды. Әлеге ваҡытта ул Санкт-Петербург дәүләт аграр университетында белем ала. Беренсе урынды һәм вице-мисс исемен Күгәрсен районынан Зәлиә Яппарова алды, икенсе урынды Салауат районынан Гөлшат Манапова менән Магнитогорскиҙан Светлана Кожаринова бүлеште, өсөнсөлә - Ишембайҙан Гөлназ Ильясова, Баймаҡтан Илнара Рахманғолова һәм Өфөнән Диана Мөхәмәтйәнова. Быйылғы "Һылыуҡай" бәйгеһе 23-сө тапҡыр үткәрелде. Ошо йылдар эсендә унда 200-ҙән ашыу башҡорт һылыуҙары ҡатнашты.

✓Белореттың Яныбай Хамматов исемендәге башҡорт гимназияһында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәрҙең беренсе төбәк бәйгеһе үтте. Бәйгенең төбәк этабында Бөрйән, Архангел, Әбйәлил, Ғафури, Учалы һәм Белорет райондарынан 30 уҡыусы һәм фольклор коллективтары ҡатнашты. Командалар араһында Учалы, Белорет һәм Әбйәлил райондары еңеүсе тип танылды. Уларға ағымдағы йылдың июлендә Бөрйән районында үтәсәк "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәрҙең республика конкурсында сығыш яһау хоҡуғы бирелде.

✓Өфөләге Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә сираттағы вакансиялар йәрминкәһе үтте. Күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары, ресторандар һәм ҡунаҡханалар эш эҙләүсе граждандарға вакансиялар тәҡдим итте. Йәрминкәгә 456 кеше килде, уларға 25 предприятиелары 300 эш урыны хаҡында мәғлүмәт бирелде. Эш биреүселәр менән әңгәмәләшеүҙән һуң 109 кандидат эшкә саҡырылды.

✓28 апрель З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте Бөйөк Еңеүҙең 70-йыллығына арналған китаптарҙың исем туйын үҙғара. Унда йыйынтыҡтарҙың автор-төҙөүселәре Суфиян Поварисов, Фәрит Вәхитов, Рәфкәт Вәлишин, Сабир Шәрипов, Зәһрә Ҡотлогилдина, Рәшиҙә Бик һәм башҡалар ҡатнаша. Сара республиканың Дан музейында, Комарова, 7 адресы буйынса үтәсәк. Башлана 16.00.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ОЛО ЕҢЕҮ КЕСКӘЙ ЙӨРӘКТӘРҘӘ...



(Башы 1-се биттә).

Һуңғы йылдарҙа күптәр урынлыға ла, урынһыҙға ла йәш быуынды, бигерәк тә балаларҙы, илебеҙҙең тарихи үткәндәрен насар белеүҙә, бөйөк шәхестәргә ҡарата ихтирам кәмеүендә ғәйепләргә күнегеп китте. Әммә патриотик тәрбиә балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә башланмай, уға нигеҙ ғаиләлә һалына икәнен күптәр онотоп китә. Ә бына "Тамыр" балалар телеканалы тамашаһына килеүсе йәш ата-әсәләр, өләсәйҙәр был хәҡиҡәткә күптән төшөнгән кешеләр. Шулай булмаһа, балаларҙың талантын балҡытыуға күп көс һалған, ысын илһөйәрлек, телһөйәрлек мәктәбенә әйләнгән "Тамыр" телеканалын иң яҡынылай күреп баһаламаç, бала-сағаһын етәкләп, ул ойошторған, туған телдә яңғыраған тамашаларға йөрөмәç ине бит.

Йылдағыса, сағыу биҙәлгән сәхнә, етди ҡараш, күңел йылыһын һалып әҙерләнгән концерт программаһы кескәй тамашасыларҙы ысын яу ҡырына, батыр һалдаттар араһына, танктар һәм самолеттар донъяһына сәйәхәт ҡылдырҙы. Был ҡыçҡа ғына ваҡыт эсендә кескәй артистар 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү яуларға ярҙам иткән һәр звено тураһында мәғлүмәт еткерҙе, уларға арнап сығарылған йырҙарҙы башҡарҙы, бейеүҙәрҙе бейене. Сәхнә хужаларының күҙ уңынан яуҙа ҡатнашҡан батыр аттар ҙа, иң шәп танктар, самолеттар, яу ҡоралдары ла ситтә ҡалманы. Һалдаттар, почтальондар, ашнаҡсылар, табиптар - һәр кемдең дөйөм эшкә индергән өлөшө тейешенсә сағылдырылды. "Тамыр" балалар телеканалының байрамына килеүсе кескәйҙәр Башҡортостандан 280 яугирҙың Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булыуын, Таһир Кусимов, генерал Шайморатов



Игорь Киняпин фотолары.

кеүек батыр йөрәкле шәхестәребеҙ барлығын да белде, Әхмәт Лотфуллин, Рәшит Нурмөхәмәтов кеүек билдәле рәссамдарҙың һүрәттәрен дә күрҙе, тағы әллә күпме файҙалы мәғлүмәттәр тупланы. Иң мөһиме, "Тамыр" балалары тиçтерҙәренә оло быуын кешеләренә, һуғыш ветерандарына ҡарата хөрмәт һәм ихтирам күрһәтеүҙең мөһимлеген аңғарта алды. Ҡунаҡҡа саҡырылған ветеран олатайҙарға иçтәлекле бүләктәр тапшырғандан һуң залда ултырыусы бар балалар ҙа бөтәһе бергә дәррәү ҡысҡырып, уларға Бөйөк Еңеү өсөн башҡортса рәхмәт һүҙҙәре әйтте.

"Тамыр" балалар телеканалы ойошторған тамашала йыл да кескәйҙәр менән булған ҡыҙыҡлы хәлдәргә шаһит булырға тура килә. Ғәҙәттә, бындай ваҡиғалар балаларҙың башҡорт телендә һөйләшә белеү-белмәүенә ҡайтып ҡала. Быйыл да Бауырһаҡ апай шиғыр һөйләтеп, йыр йырлатып бүләктәр тараҡан арала әллә күпме ҡыҙыҡлы күренештәрҙе күҙәтергә тура килде. "Башҡортостан" концерт залының фойеһында ҡуйылған бәләкәй сәхнәгә сығып шиғыр һөйләгәндә, ҡыҙғанысҡа күрә, балаларыбыҙҙың Ватан, һалдаттар, яу темаларына арналған патриотик шиғырҙарҙы әҙерәк белеүе асыҡланды. Әммә "русса аңламаған" Бауырһаҡ апай ярыш аҙағында бик тә ҡәнәғәт күренде. Шулай булмай, уның бүләген эләктерергә теләп, сәхнәгә менеп баçырға йөрьәт иткән кескәйҙәр барыһы ла тиерлек башҡортса шиғыр һөйләп ишеттерҙе, хатта бер-икәүһе йыр ҙа башҡарҙы бит. Әйткәндәй, ошо "Тамыр" балалар студияһы үткәргән байрамдарҙа ғына баш ҡалабыҙҙа башҡорт балаларының күплегенә, йәш ата-әсәләрҙең сабыйҙары менән башҡортса аралашыуына шаһит булына.

"Оло Еңеү кескәй йөрәктәрҙә" тип исемләнгән байрамдың тәүге өлөшө батыр яугирҙарға, һуғыш йылдарына арналһа, икенсеһендә тыныс тормош, хеҙмәткә дан йырланды. Һәр сығышында кескәй артистар тиçтерҙәренә фәһем бирергә, яҡшы өлгө күрһәтергә тырышты. Тамаша һуңында коридорҙа ата-әсәләре кейендереп бөтөүен көтөп тороусы бәләкәстәрҙең осҡонло күҙҙәренән, дәртле итеп атлап барыштарынан уҡ ойоштороусылар үҙ моратына ирешеүенә төшөнөргә була ине. "Мин һәр ваҡыт ололарға ярҙам итәм. Башҡортса ла һөйләшәм, шиғырҙар ҙа беләм. Бөгөн дә бик күңелле булды, мин был байрамды яраттым", - тине ошо уйҙарҙы хуплағандай кескәй Гөлзифа Ҡолһарина. Ә Луиза Рәхимова сәхнәгә "бутҡа ашап уйнарға" сығып, бүләк отоуы тураһында һөйләне. Ҡыҙыҡай бында йыл да килә икән, "Бутҡа ашап алам да, мин дә шулай матур итеп бейергә өйрәнәм", - тип киләсәккә матур хыялы менән уртаҡлашты ул. "Тамыр" балалар телеканалы үткәргән байрам кескәй йөрәктәрҙе илһамландырып, осондороп, хыялдарына ҡанат ҡуйып ебәрҙе шулай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илһөйәрлек ғаиләнән башлана, балаға үҙ асылын табырға тик ата-әсәһе генә ярҙам итә ала шул. Был йәһәттән "Оло Еңеү кескәй йөрәктәрҙә" тип аталған байрамға балаларын етәкләп килтереүсе өфөләр тәүге аҙымды яһаны, тип иçәпләргә лә була. Рухлы, иленең бөйөк шәхесе булырҙай балалар ошондай сараларҙы күреп үçергә тейеш.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ҠАЛА СҮП-САРҘАН ТАҘАРТЫЛДЫ

**Уҙған аҙнала Өфөлә территорияны санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү айлығы сиктәрендә дөйөм ҡала экологик өмәһе үтте.**

Унда барлығы 69,5 мең кеше, шул иçәптән урамдарҙы таҙартыуға 5 мең кеше йәлеп ителде. Шулай уҡ мендән ашыу техника эшләне. Барлығы 13 миллион 800 мең квадрат метр урам юлдары, 11 миллион 26 мең квадрат метр кварталдар һәм йорт алды территориялары, 3 миллион 174 мең квадрат метр парк һәм скверҙар майҙаны таҙартылды. Өмә ваҡытында 1550 квадрат метр юл ремонтланды. Был көндә барлығы 5 мең 255 кубометр сүп-сар сығарылды.

Өмәлә Өфө ҡала округы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре лә әүҙем ҡатнашты. Улар хакимиәт эргәһен генә таҙартып ҡалманы, М. Ғафури һәм Ҡашҡаҙан парктарында, Өфө ҡала циркы артындағы урман зонаһында, Мосоломан зыяраты территорияһында, Ибраһимов бульварында һәм яңы төҙөлгән ҡунаҡханалар эргәһен таҙартыуҙа эшләне. Санитар айлыҡта Сергиев зыяратын төҙөкләндереүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Әлеге ваҡытта бында таҙартыу, ремонт эштәре алып барыла, шулай уҡ юлдар төҙөкләндерелә.

## ХАҠТАР ТӨШӘМЕ ӘЛЛӘ?

**Республиканың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты һуңғы дүрт аҙна дауамында хаҡтарҙың кәмей башлауын билдәләй.**

Ғинуарҙа аҙыҡ-түлеккә ҡулланыусылар хаҡтары индексы 104,5 процент булһа, март йомғаҡтары буйынса алдағы айға ҡарата 101,7 процент тәшкил иткән. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, үткән айҙа ҡыярға хаҡтар 20 процентҡа, томаттарға ете процентҡа төшкән, татлы борос - өс, картуф бер процентҡа арзанайған. Һумдың нығыныуы еләк-емештәргә хаҡтарҙың кәмеүенә лә йоғонто яһаны. Мартта банан, виноград һәм әфлисунға хаҡтар өс процентҡа, алмаға ике процентҡа төштө. Һуңғы айҙа шәкәргә хаҡтың 1,6 процентҡа кәмеүе билдәләнә.

Йыл башынан һөт аҙыҡтарына хаҡтың артыуы күҙәтелә, айырыуса ҡаты сыр ҡиммәтләнгән. Әммә һуңғы айҙа хаҡтар ике процентҡа арзаная башлаған. Эремсек хаҡы 6,7 процентҡа, һөт - 5, кефир - 1,6, аҡ май 1 процентҡа артҡан.

Дәүләт комитеты белгестәре билдәләүенсә, ҡарабойҙайға бәйле хәл тотороҡланды. 13 апрелгә ҡарата ҡарабойҙай ярмаһына ҡулланыусылар хаҡтары буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округының 14 төбәге араһында 13-сө урынды биләй (иң ҡиммәтлеһенән иң арзанына тәртибендә).

Шуның менән бергә һыйыр итенә хаҡтарҙың күтәрелеүе күҙәтелә. Беренсе кварталда ул туғыҙ процентҡа артҡан. Сусҡа ите - өс, йылҡы ите - 19, һарыҡ ите 12 процентҡа ҡиммәтләнгән. Тауыҡ итенең - 1,5, йомортҡаның өс процентҡа арзанайыуы билдәләнә.

Йыл башынан балыҡҡа хаҡтар артты. Туңдырылған балыҡ - 12, ыçланғаны 3 процентҡа, тоҙло балыҡ 12,5 процентҡа ҡыйбатланған.

Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баçылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеккте онотмағыҙ.**

### Вена тамырҙары ауырыуҙары

❖ Аҡ сәскә майы веналарға йыйылып торған ҡанды тарата.

❖ Кирказон үләне вена тамырҙары ауырыуҙарынан яҡшы дауа. 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм 4 өлөшкә бүлеп, көн дауамында эсергә.

❖ 200 грамм кипкәр (сушеница болотная) үләнен 1 биҙрә ҡайнар һыуға һалырға, 30 минут төнәтергә һәм эçе төнәтмәгә аяҡтарҙы 30 минутҡа тығып ултырырға.

❖ 1 ҡалаҡ ҡомалаҡ тубырсығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнап ултырған һыулы һауытта 15 минут торорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр стакан эсергә. Вена тамырҙары ҡалҡып торған урындарға компресс эшләргә.

❖ 2 ҡалаҡ сәтләүек ағасы (лещина обыкновенная) ҡайырыһына 500 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашар алдынан яртышар стакан эсергә.

❖ Яңы ғына йыйылған 100 грамм әрем үләнен һәм сәскәләрен иҙеп, 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға ошо уҡ күләмдә әсегән һөт өçтәгеҙ. Ауыртҡан урындарға йоҡа ғына итеп һалып, бинт менән нығытырға. 4-5 көн дауалағандан һуң, 5 көн ял итергә лә, тағы ҡабатларға.

❖ "Антоновка" сортлы уртаса ҙурлыҡтағы 3 алманы һалҡын һыуҙа йыуырға һәм эмаль һауытҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Яҡшы итеп баçырып, йылы урында 3 сәғәт төнәтергә. Һуңынан алмаларҙы иҙергә һәм һөҙөлгән һыуҙы өçтәргә. Иртән һәм кисен 100 грамм ашарға.

❖ Ярты литрлы шешәнең өстән бер өлөшөнә ҡайын бөрөһө тултырырға һәм шешә тулғансы араҡы ҡойорға. 10 көн дауамында төнәтергә, көн һайын болғатып торорға. Аяҡтар һыҙлаған мәлдә һөртөргә һәм 10-15 минут ял итеп ултырып торорға. Һуңынан тағы төнәтмәне һөртөргә. Физик эштәрҙе күп эшләмәçкә. Был төнәтмә оҙаҡ бөтәшмәгән яраларҙы ла дауалай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Бала ғына булһам да, ололар эшен дә башҡарырға тура килде. Ғаиләбеҙ менән кирбес һуҡтыҡ, быйма баҫтыҡ, һарыҡ тиреһе эшкәрттек. Ярты ауыл халҡы беҙҙең кирбестән мейес сығарҙы, быймаларыбыҙҙы, тундарыбыҙҙы кейеп йөрөнө.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАРҒАТУЙҒА БАР, БАР...

**"Ҡарғатуй" - май айында үткәрелә торған байрам. Башҡортостандың көньяҡ һәм көнбайыш районларында, Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районында был байрамды "Ҡарға бутҡаһы" тип йөрөтәләр.**

С. И. Руденко билдәләүенсә, "Ҡарғатуй" байрамы "ҡар иреп, үлән сыҡҡас" үткәрелгән. Был турала халыҡ йырында ла әйтелә:

*Күгәрсен күҙ сәскә атҡан саҡта*
*Ашай инек ҡарға бутҡаһын...*

Байрамда ҡатын-ҡыҙҙар һәм 13 йәштән өлкән булмаған малайҙар ғына ҡатнашҡан. Ҡайһы бер райондарҙа күрше ауылдарҙан ҡунаҡтар саҡырылған. Байрам була торған көндә бала-саға бер-ике ҡатын оҙатыуында өйҙән-өйгә йөрөп, аҙыҡ-түлек йыйған, ҡарға булып ҡарҡылдап, ҡарға исеменән байрамға саҡырған:

*Ҡарға әйтә: "Ҡар, ҡар!"*
*Ҡарғатуйға бар, бар!..*
*Ҡарғатуйға бармағандың*
*Күҙеле булыр тар, тар!"*

Йыйылған ризыҡты ҡатындар байрам урынына алып барған. Ғәҙәттә, йә йылға яры, йә тау башында йыйылғандар. Байрам урынында оҙон ағастар булырға тейеш булған. Йоланың рәт-тәртибен белгән өлкән йәштәге ҡатын өйрәтеп торған, ул үҙенең махсус кейеме менән айырылып торған. Был ҡатынды "юлбарсы" тип йөрөткәндәр. Костюм ҡорамалар менән биҙәлгән оҙон күлдәктән, камзулдан, түшелдеректән торған. Башына яулыҡ өҫтөнән ҡайын туҙынан тегелгән ҡалпаҡ кейгән, ҡалпаҡ сәйлән, ҡабырсаҡ, көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән. Салауат, Ҡыйғы, Күгәрсен районларында юлбарсы менән уның ярҙамсылары ҡунаҡтарҙы ҡаршыларға тал сыбыҡҡа "атланып" сыҡҡан.

Юлбарсы ҡушыуы буйынса йәш-еленсәк утын йыйған, бутҡа бешереү өсөн таған эшләгән, сәй ҡайнатҡан, ағастарҙы төҫлө яулыҡтар, муйынсаҡтар, таҫмалар менән биҙәгән; малайҙар ағасҡа менеп, ҡарға булып ҡысҡырған. Бутҡаны өлкән ҡатын-ҡыҙҙар ғына бешергән, был мәлдә ҡарғаларға түбәндәгесә һамаҡлап өрөйҙәр:

*Бутҡаларҙы бешерәбеҙ*
*Ҡаҙандарҙы тулғансы.*
*Ер бәрәкәте - ҡошҡайҙарҙың*
*Күңелдәре булғансы.*

Йәш ҡатын-ҡыҙҙар, балалар өлкән ҡатын-ҡыҙҙарҙың етәкселеге аҫтында уйындар уйнаған, йырҙар йырлаған, уларҙы ла мотлаҡ ҡарғаларға мөрәжәғәт булған:

*Эй, ҡошҡайҙар, ҡошҡайҙар,*
*Ҡәҙерле һеҙ, дуҫҡайҙар!*
*Ер-һыуҙарҙың матурлығын,*
*Һаҡлаусы һеҙ, ҡошҡайҙар!*

Йәки:

*Ҡарҡылдашып килегеҙ,*
*Һеҙгә бутҡа бирербеҙ.*
*Йомошобоҙ күп түгел -*
*Илгә уңыш бирегеҙ.*

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫ БАЛАЛАРЫ

# ТЫЛДА ЛА ЕҢЕЛ БУЛМАНЫ



**Һуғыш яфаларын кисермәгән ғаилә булмағандыр инде ул йылдарҙа. Минең дүрт ағайым китте илде һаҡларға, иң олоһо Әхмәҙулла ағайым 1942 йылда Сталинград янында һәләк булды. Ҡайғы яңғыҙ килмәй, тиҙәр. Шул йылдарҙа ағайым Салауат, ҡустым Әнүәр, һеңлем Үлмәсбикә төрлө ауырыуҙарҙан вафат булып ҡалды.**

Фронт менән тыл араһында айырма бик аҙ ине. Унда бомба шартлауы, пулялар һыҙғырыуы, ҡан ҡойолоуы булһа, тылда ауыр эш, аслыҡ һәм яланғаслыҡ хөкөм һөрҙө. Ул осорҙағы ваҡиғалар ҡайһы саҡта берәм-берәм иҫкә төшә. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен бәйән итәйем әле.

Көҙ көнө бер нисә малай менән бағаҡ йыйырға сыҡҡайныҡ. Баҫыуҙа беҙҙең ауылдан бер ауырлы ҡатындың ҡанға батып ятҡанына шаһит булдыҡ. Мин ауылдан атайымды алып килдем, арбаға тейәнек, тәүҙә инғыраштың, һуңынан тынды. Атайым уның йән биргәнен әйткәс, беҙ илап ебәрҙек. Унан алда ире һуғышта һәләк булды, кәйнәһе аслыҡтан үлгәйне...

Егеттәр һуғышҡа китте, ауылда ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар ғына тороп ҡалдыҡ - бөтә эш беҙҙең өҫкә өйөлдө. Бала ғына булһам да, ололар эшен дә башҡарырға тура килде. Ғаиләбеҙ менән кирбес һуҡтыҡ, быйма баҫтыҡ, һарыҡ тиреһе эшкәрттек. Ярты ауыл халҡы беҙҙең кирбестән мейес сығарҙы, быймаларыбыҙҙы, тундарыбыҙҙы кейеп йөрөнө. Өйөбөҙ янындағы тимерлеккә йөрөп өйрәнеп, тәүҙә әсәйем биргән һауыт-һабаларҙы яманым, һуңынан минә апай-инәйҙәр ҙә ҡаралтыларын алып килә башланы. Хеҙмәтем өсөн минә май, ҡаймаҡ, ҡорот, эремсек биргеләйҙәр ине...

Беҙ алты малай Түбә мәктәбендә уҡый башланыҡ. Зиннур Ҡыҙрасов менән бер апайҙа фатирҙа йәшәнек. Рус белен белмәй инек әле. Бер көндө фатир хужаһынан: "Әгәр дәрескә һуңлаһаҡ, нисек итеп русса рөхсәт һорап инергә?" - тип һорашабыҙ. "Можно зайти?" тип һорағыҙ", - тине апай. Мин был һүҙҙәрҙе яҙып алдым, ә Зиннур яҙманы. Бер көндө ул рус теле дәресенә һуңланы, ләкин класҡа инергә ҡыймай, бүлмәнең ишеген аса ла яба, аса ла яба - "Можно зайти?" тигән һүҙҙе оноткан икән. Был хәл ике, өс тапҡыр ҡабатланғас, балалар көлә башланы, шунан уҡытыусыбыҙ Клавдия Ивановна уны үҙе саҡырып индерергә мәжбүр булды...

Бер көндө класта Зиннурҙың аҡсаһын урланылар. Минең икмәк менән генә туҡландыҡ та, тамаҡ асыҡҡас, урамға сығып, ҡысҡырып иланыҡ, шунан ауылға ҡайтып киттек. Ошо хәлдән һуң беҙ көн дә 15 саҡрым араны йәйәүләп үтеп, йөрөп уҡый башланыҡ. Бер көндө ауылға ҡайтып барғанда бер тоҡ табып алдым, асып ҡараһам, унда ике түтәрәм икмәк, бер нисә кило шәкәр, кәнфит һәм сәй бар ине. Аҙыҡтарҙы туйғанса ашаным да, күлдән ятып һыу эстем һәм ҡалған ризыҡтарҙы әсәйемә алып ҡайтып бирҙем. "Улым, һин был әйберҙәрҙе урламанһыңмы?" - тип ҡурҡып һораны әсәйем. Ошо ваҡиға күпме ваҡыт үтте. Ләкин шул аҙыҡтарҙы ғүмеремдәге иң тәмлеһе тип һаман иҫкә алам...

Атайҙары һуғышта үлгән балаларға кейем таратҡан көн дә хәтерҙә ҡалған. Морат Ишбирҙинға таҙа, бөтөн бушлат эләкте, ә Фуаттың бушлаты тишек, етмәһә, эсенә ҡарайып ҡан ҡатҡан. Һабын булмағас, Фуаттың уны Талҡаҫ күле ҡомо менән оҙаҡ ҡына ышҡып йыуғаны күҙ алдымда...

Химия уҡытыусыһы Шакир ағай класҡа ингәс тә сумкаһын өҫтәлгә ташлай һәм протезлы ҡулы менән уҡыусыны таҡтаға саҡыра торғайны. Был юлы уның протез ҡулы минә төҙәлде. Һорауына яуап биреп, химия тигеҙләмәләрен таҡтаға яҙғас, аҡбурым ҡулдан төшөп китте. Уны алырға тип иңкәйгәндә, кеҫәмдән һөт тултырған шешә төшөп, иҙән буйлап тәгәрәне һәм уҡытыусының аяҡтары янына барып ятты. Класс тын ҡалды. Ә мин уңайһыҙланып ҡына баҫып торам. Уҡытыусы йомшаҡ ҡына итеп: "Һөтөндө ал", - тине һәм минә "4" билдәһе ҡуйҙы. Шунда мин быға саҡлы уҫал кеүек күренгән уҡытыусымдың бик кешелекле икәнен аңлағайным...

7-се синыфта уҡығанда Зиннур менән уҡытыусыбыҙ Фәризә Ғәриф ҡыҙы Бикбулатоваға йомош менән индек. Ул беҙҙә күрҙе лә, аптырап, һүҙһеҙ ҡалды: икебеҙ ҙә яланбаш, иҫке күлдәктән һәм салбарҙан, Зиннур яланаяҡ, мин ҙур ғына галошымды аяғыма бәйләп ҡуйғанмын. Уҡытыусыбыҙ бүлмәнән сығып китеп, оҙаҡ ҡына юғалып торҙо һәм ҡулына иҫке бер пар ботинка, ике пар носки тотоп инде һәм беҙҙә кейендереп ҡайтарып ебәрҙе...

Тормош ауыр булыу сәбәпле, Зиннур 8-се класты уҡыманы, ауыл малын көтөргә ялланды, ләкин көҙ көнө мәктәп директоры Б.М. Мәмбәтҡолов ағай уны саҡыртып алып, имтихандарын тапшырттырҙы һәм 9-сы синыфҡа күсерҙе...

Мәктәптә уҡыу тамамланды һәм мәктәп директоры Мәмбәтҡолов ағай мине саҡырып алып: "Сығарылыш кисәһенә килеүсе ҡунаҡтар күп, ашамлыҡтар аҙ, һин балыҡ тота алаһыңмы?"- тип һораны. "Уҡытыусылар һәм ҡунаҡтар өсөн барыһын да эшләйем", -тинем мин. Икенсе көн ат егеп, биш уҡыусыны ултыртып, беҙҙең класс етәксеһе Александр Иванович Антонов ауылға килде. Бәхеткә ҡаршы, балыҡ бик күп тотолдо, әсәйем бешергән бер ҡунаҡ балыҡты туйғансы ашаныҡ. Ошо ваҡиғанан һуң директорыбыҙ Мәмбәтҡолов ағай минә: "Балыҡсы икәнлегенде иҫбатланың, хатта уҡытыусыларға ла таратып бирҙек, бының өсөн һиңә ҙур рәхмәт", - тип әйтте.

Сығарылыш кисәһе бик яҡшы үтте, атайымды президиумға ултырттылар, мәктәп директоры һәм уҡытыусылар беҙгә матур теләктәр әйтте. Оҙон, ҡатмарлы тормош юлы үткәндә беҙ уларҙың теләктәрен һәр саҡ иҫтә тоттоҡ. Улар бөгөн дә беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа, хәтеребеҙҙә.

**Исмәғил МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**
**Баймаҡ ҡалаһының һәм районының Почетлы гражданины.**

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# "ҠЫҪҠАҺЫ" ТИП ЙЫШ ӘЙТЕҮСЕЛӘР...

## ҡыҙыу ҡанлылар

**"Паразит" һүҙҙәр хаҡында барыһы ла белә. Улай ғына ла түгел, күптәр үҙ телмәрендә уларҙы йыш ҡуллана. Бәктиһәң, ундай тәү ҡарамаҡҡа зыянһыҙ һүҙҙәр кешенең холоҡ-фиғеле хаҡында мәғлүмәт бирә, имеш. Түбәндә айырыуса йыш ҡулланылған бер-нисә "паразит" һүҙ хаҡында бәйән итмәксебеҙ.**

**"Теге ни..."** ("Это самое") - бындай һүҙбәйләнеште ялҡау кешеләр йыш ҡабатлай. Ундайҙар беренсе мөмкинлек килеп тыуғас та, үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты икенсе кеше елкәһенә ауҙара. Шулай уҡ ауыр хәлдәргә тарыған осраҡта ла яуаплылыҡты башҡалар иненә япһарыуҙан тартынмай.

**"Әйткәндәй"** (кемдер уны урыҫ телендә "кстати" тип әйтә) - үҙҙәрен ҙур компанияларҙа яйһыҙ тойған кешеләрҙең яратҡан һүҙе. Ошо "паразит" һүҙҙе йыш ҡабатлап, улар үҙҙәренә һәм телмәрҙәренә иғтибар йәлеп итергә тырыша.

**"Ғөмүмән"** ("Вообще-то") - ҡыйыуһыҙҙар һүҙе. Ундай кешеләрҙең үҙенсәлеге - ниндәй ҙә булһа сәбәп табып, низағ ойоштороу һәләте.

**"Ҡыҫҡаһы"** ("Короче") - ҡыҙыу ҡанлы, һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашығыусан кешеләрҙең һүҙе. Бындай һүҙҙе күберәк тиҙ ҡыҙыусан холериктар телмәрендә ишетергә була.

**"На самом деле"** - үҙ фекерен беренсе урынға ҡуйыусылар йыш әйтә. Улар үҙҙәренең хаҡлы булыуын аҙыуҙарынан күбек сәсрәтеп раҫларға әҙер. Өгөтнәсихәт уҡырға бик әүәҫтәр, үҙҙәренең эске донъяһын сағыу һәм ҡабатланмаҫ, ә башҡаларҙыҡын һоро һәм әһәмиәтһеҙ итеп һанайҙар.

**"Тимәк"** ("Значит", "типа") - агрессив әҙәмдәр телмәрендә йыш осрай. Шулай уҡ иҫке ҡарашлы кешеләрҙең яратҡан һүҙе.

**"Тик"** ("Просто") - башҡаларҙың фекеренән бойондороҡлолар ҡуллана. Ундай кешеләр буш урында төрлө проблема уйлап сығара, яуаплылыҡтан ҡурҡа, бик йыш аҡлана.

**"Как бы"** - үҫмерҙәр һәм ижад кешеләре яратып ҡуллана. Был һүҙ ярҙамында улар аңһыҙ рәүештә билдәһеҙлектә йәшәүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә ала.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БӨЙӨК КҮСЕНЕҮ,

## йәғни һуғыш йылдарында республикаға эвакуацияланыусылар тураһында



**Тарих фәндәре кандидаты Илфат Зәки ул СӘМСИТДИНОВ республиканың бәләкәй ҡалаларында эвакуацияланғандарҙы ҡабул итеү нисек ойошторолоуы тураһында һөйләүҙе дауам итә.**

Бәләкәй ҡалаларҙан иң күп ҡасаҡтарҙы Стәрлетамаҡ һәм Ишембай ҡалалары ҡабул итә. Эвакуацияланғандар иҫәбенә Стәрлетамаҡта 1942 йылдың 16 ғинуарына ҡала халҡы 58028 кешегә етә (1941 йылдың ғинуарында унда ни бары 35731 кеше йәшәгән була). Шулай уҡ эвакуацияланған кешеләр иҫәбенә Ишембай ҡалаһы халҡы арта. 1942 йылдың аҙағына бында 43526 кеше йәшәй. Был ҡалаларҙың ҡасаҡтарҙы ҡабул итеү үҙәгенә әйләнеүе, тап бында эвакуацияланған предприятиелар урынлаштырылыуы, социаль инфраструктура үҫтерелеүе менән аңлатыла. Уны тәьмин итеү өсөн бик күп кеше потенциалы кәрәк була.

Ләкин барыһы ла ыңғай ғына бармай. Ул ваҡыттағы документтарҙан күренеүенсә, Стәрлетамаҡта урындағы властар тарафынан һуғыш райондарынан күсерелгәндәрҙе урынлаштырыуға тейешле иғтибар күрһәтелмәй. Мәҫәлән, ҡалаға эвакуацияланған 3493 эшкә яраҡлы кешенең 1317-е эшкә урынлаштырылмай. Улар араһында педагогтар, инженер-химиктар, бик кәрәкле һөнәргә эйә булған башҡа күп белгестәр ҙә була. Эвакуацияланыусылар шәхси өйҙәрҙә йорт хужалары менән бергә йәшәргә мәжбүр була. Уларға бүлмәнең бер мөйөшө, йәки аш бүлмәһе бирелә, һирәк осраҡта, айырым бүлмәлә йәшәйҙәр. Күп эшселәрҙең ғаиләләре йорттарҙың подвалында, йәки дымлы биналарҙа йәшәргә мәжбүр була. Утын менән тәьмин итеү тейешле кимәлдә ҡуйылмау арҡаһында күптәр ҡышты өшөп үткәрә.

Бакуҙан Ишембайға күсерелгән Ленин исемендәге машиналар төҙөү заводы эшселәренең йәшәү шарттары Стәрлетамаҡҡа эвакуацияланғандарға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ була. Был заводтың 271 эшсеһе "Ишембайнефть", "Башнефтегазстрой", "Башнефтестрой" трестарының йорттарында йәшәй. Был завод эшселәре хатта заводтың дирекцияһынан коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙе талап итә. Был һорау нефть сәнәғәте наркоматы алдында ла ҡуйыла. Бакуҙан күсерелгән икенсе ойошма - "Азнефтеразведка" эшселәренең бер өлөшө Стәрлетамаҡҡа йүнәлтелә. Йәшәү шарттарының ауыр икәнен күреп, улар ризаһыҙлыҡ белдерә, ҡабаттан Бакуға ҡайтыу хаҡында һүҙҙәр йөрөй башлай. Хатта был хәл партияла тормаған эшселәр араһында ғына түгел, айырым партия ағзаларында ла күҙәтелә. Оҡшаш хәлдәр "Ҡыҙыл пролетарий" заводында ла була. Был заводта эшләгән 25 кеше эвакуацияланған урынды ҡалдырып, тыуған яҡтарына ҡайтып китә. Ғөмүмән, Бакуҙан Стәрлетамаҡҡа килгән 1172 кешенең 221-е 1942 йылдың мартына дезертирлыҡ яһап ҡайтып китә. Ҡасып ҡайтыусылар араһында 14 коммунист та була.

Был хәл дөйөм таралыу алмаһа ла, уның аңлайышлы нигеҙе була. Эвакуацияланған ойошмаларҙың партия һәм хужалыҡ етәкселәре, Совнаркомдың ҡарарҙарын формаль рәүештә генә еткереү менән шөғөлләнә. Уларҙың күптәре эшсе һәм хеҙмәтсәндәрҙең торлаҡ, көнкүреш хәле тураһында ҡыҙыҡһынмай, тимәк, уларҙың теләктәрен дә ишетмәйҙәр, шуға ла килеп тыуған проблемаларҙы хәл итеү буйынса бер ни эшләмәйҙәр.

Эвакуацияланғандарҙың күсерелгән ерҙә ҡалырға теләмәүе йәшәргә урын булмауҙан, аҙыҡ-түлек менән насар тәьминәт арҡаһында килеп тыуа. Аҙыҡ-түлек етмәгәнгә күрә, бәләкәй ҡалаларҙың Советтары халыҡты туҡландырыу өсөн өҫтәмә ресурстар эҙләргә мәжбүр була. Шәхси баҡсасылыҡтарҙы һәм хужалыҡтарҙы үҫтереү буйынса ҡала башҡарма комитеттарында ер бүлектәре төҙөлә. Халыҡты туҡландырыу маҡсатында Баймаҡ, Бәләбәй, Бөрө, Благовещен, Стәрлетамаҡ, Ишембай ҡалалалары эсендә булған буш урындарға, уларҙан ситтәге ерҙәрҙә картуф, башҡа йәшелсә-емеш сәселә.

Командалыҡ составында булған хәрбиҙәрҙең, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының ғаиләләрен тәьмин итеү ҡала Советтары эшенең айырым йүнәлеше була. 1942 йылдың 1 сентябренә ҡарата республикала Ҡыҙыл Армияның етәкселек составына ҡараған 18 мең хәрбиҙең ғаиләләре йәшәй. Улар аҙыҡ-түлек һәм башҡа тормош кәрәк-ярақтары менән военторгтарҙың сауҙа селтәре аша тәьмин ителә. Ҡайһы бер хәрбиҙәрҙең ғаиләләре военторгтарҙың ашханаларына беркетелә.

1942 йылда эвакуацияланыусылар килеүен дауам итә. Улар башлыса Стәрлетамаҡ, Благовещен, Белорет, Ишембай ҡалаларында урынлаштырыла. 1942 йылдың 16 сентябренә Стәрлетамаҡ - 12337, Белорет - 3464, Ишембай - 3181, Благовещен 1890 кешене ҡабул итә. Ҡала властары тарафынан эвакуацияланған кешеләргә 1000 һум аҡса бүленә, ә Стәрлетамаҡта был сумма 3000 мең һумға еткерелә.

**Советтар Союзының көнбайыш, үҙәк, көньяҡ райондарынан граждандарҙы күсергән саҡта ҙур ҡыйынлыҡтар килеп сығыуға ҡарамаҫтан, 1941-1942-се йылдарҙаға эвакуация кампанияһы ойошҡан рәүештә үтә. Уның барышында ҙур юғалтыуҙар булмай. Эйе, эвакуацияланған кешеләрҙе ҡабул иткән төбәктәрҙә урындағы властарға, халыҡҡа өҫтәмә көс төшә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар килгән ҡасаҡтарҙы урынлаштырыу өсөн минималь шарттар тыуҙырырға тырыша. Эвакуацияланған халыҡ араһында юғары квалификациялы эшселәр, инженер-техник кадрҙар була, уларҙың күп өлөшө һуғыштан һуң Башҡортостанда ҡала. Шулай уҡ һуғыштан һуңғы йылдарҙа төбәктең иҡтисади үҫешен тәьмин итәсәк эвакуацияланған сәнәғәт ойошмалары ла республикала ҡала.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 16-сы һанда).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ 1220 йыл - Урыҫ һуғышсылары Вычегданан Камаға үтеп инеп, уның буйлап Волгаға тиклем төшә. Урыҫ йылъяҙмаларында тәүләп Кама йылғаһы телгә алына.

➔ 1236 йыл - 14 йыл ҡаршы көрәшкәндән һуң башҡорттар татар-монгол баҫҡынсылығында ҡала. 1243 йылдан алып Батый хан нигеҙ һалған Алтын урҙа ханлығына ҡарай.

➔ 1245-1252 йылдар - Италия сәйәхәтсеһе Вильгелм Рубруктың Көнсығыш илдәрҙә, шул иҫәптә Алтын урҙала булыуы хаҡындағы юлъяҙмаларында Башҡортостан һәм башҡорттар хаҡында мәғлүмәттәр бар.

➔ 1310 йыл - Ҡыҙыл урҙала Ислам рәсми дин булараҡ иғлан ителә.

➔ 1351 йыл - Мәмлүк булараҡ Мысырға килеп, унан һуң шағир һәм әмир булып киткән башҡорт Насретдин әл-Насыри вафат була.

➔ XIV быуат - суфый шағиры Әхмәт Йәсәүиҙең Урта Азиялағы эйәрмәндәренең береһе Хөсәйен-бек ислам динен нығытыу маҡсатында башҡорттарға килә. Башҡортостанда вафат була. Уға һалынған таш мавзолей Шишмә районында, Дим буйында урынлашҡан.

➔ XIV б. ахыры- XУ б. баштары - Алтын Урҙа ханлығының бөлөүе менән билдәләнә. Башҡортостан Ҡаҙан, Себер ханлыҡтары һәм Нуғай урҙаһы хакимлығында ҡала.

➔ 1471 йыл - Урыҫтар Пермь ерҙәрен баҫып ала.

➔ XV быуат - Нуғай урҙаһы осоронда башҡорттарҙың героик эпостары һәм ҡобайыр жанры камиллаша. "Нуғай батыр"эпосы циклының башҡорт версиялары: "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Мамай хан", "Сура батыр","Ғайса улы Амай", "Тарғын ир", "Ҡорбан батыр", "Ҡарасай батыр менән Ҡаҙы батыр" һәм башҡа әҫәрҙәр ижад ителә.

➔ 1491 йыл - Иван III Уралға көмөш ҡаҙылмаһы эҙләү маҡсатында урыҫ мәғдәнселәрен ебәрә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Шештәргә уҫаҡ япрағын бешекләп япҡандар. Һыҙлағанда быуынды һарыҡ тиреһенә урағандар. Ултырыш һөйәге нервыһы невралгияһында ауыртҡан урынды айыу көпшәһе менән ышҡығандар. Бала тапҡандан һуң ҡан ағыуын туҡтатыу өсөн таҙа аҡ кейеҙгә күп итеп май һөртөп, уны ут өҫтөндә йылытып, ҡатынды шуның өҫтөнә ултыртҡандыр. Уның енси ағзаларының эске өлөшөнә эҫе бәреп торорға тейеш булған. Ҡайһы бер ваҡыт шул мәлдә иретелгән һарыҡ майы ашатҡандар. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары ваҡытында (аналыҡтың хроник елһенеүе) аҡ сәскә төнәтмәһен эсәләр. Күкрәк биҙҙәре ауырыуҙары ваҡытында шешкә һыуыҡ һыуҙа ебетелгән һәм сепрәккә төрөлгән һары балсыҡ һалалар. Зәңге (цинга) ваҡытында торма ашайҙар һәм аяҡты бешкән картуф менән урайҙар. Ҡайһы бер урындарҙа ошо сир менән сирләүселәр бер нисә көн баҫыуға сығып, йәшел ужым ашай. Баҫыуға барғансы һәм кире ҡайтҡансы ауырыу дүрт тағанлап барырға, ә ужымды теше һәм ирендәре менән өҙөргә тейеш. Былар барыһы ла иртән, ҡояш сыҡҡанға тиклем, шаһиттар булмағанда эшләнә. Айыу үте эс йомшартыу маҡсатында ҡулланылған. Һөйәк тайған йәки һынған саҡта быуын ултыртыусылар саҡырылған, улар зарарланған урындарҙы йыуып, һылап, бәйләп ҡуйған. Тирләү өсөн мәтрүшкә, ҡанүлән файҙаланылған һ.б.

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Башҡортостандың неолит дәүере халҡының этник сығышы беҙгә билдәле түгел. Бары тик антропология буйынса уның европеоид булыуын ғына беләбеҙ. Бронза һәм иртә тимер эпоһаһында, йәғни беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡтың уртаһында Башҡортостан территорияһы, ананьинск мәҙәниәте һәйкәлдәренең күплегенән сығып фекер йөрөткәндә, төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә Геродот яҙып ҡалдырғанса, тормош өсөн кәрәк-яраҡты һунарсылыҡ, ә археология мәғлүмәттәре буйынса, шулай уҡ малсылыҡ һәм өлөшләтә ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән тиссагеттар йәшәгән. Уларҙың физик тибы, нигеҙҙә европеоид булып, монголоид компонент менән ҡушылған.

Мәҙәни йәһәттән, ҡоралланыу һәм сәнғәт предметтары буйынса, тиссагеттар хәҙерге Көнсығыш, Себер, Көнбайыш Европа далаларында йәшәүсе ҡәбиләләр менән тығыҙ бәйләнештә булған. Тиссагеттарҙың физик тибындағы монголоид элемент көнсығыш сығышлы, йәғни азаит. Геродот тиссагетарҙы скифтарҙан айырмалы, төньяҡ иран төркөмөнөң бер телендә һөйләшеүсе тип атай икән, күрәһең, уларҙың бер өлөшө боронғо төрки телендә һөйләшкән, тигән күҙаллау ҙа нигеҙһеҙ түгел.

Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш өлөшөнә был ваҡытта Геродот әйтеүенсә, шулай уҡ һунар менән шөғөлләнеүсе скиф ҡәбиләләре - иирктар ултырған. Улар һунарға һыбай, эттәр менән сыҡҡан. Тимәк, һунар менән генә түгел, ә малсылыҡ менән дә шөғөлләнгән. Иирктарҙан ҡалған ҡурғандар тейешенсә өйрәнелмәгән, әммә, Геродоттың мәғлүмәттәре буйынса, иирктарҙан көнсығыштараҡ йәшәгән аргиппейҙар монголоид типта булған, шуға күрә иирктарға ла бер ни тиклем монголоид компоненты ҡушылған тип әйтергә була.

**14 апрелдә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышы уҙғарылды. Ул быуаттар буйына көнүҙәк булып торған ер мәсьәләһенә арналды. Сараға урындағы ҡоролтайҙарҙың башҡарма комитеттары рәйестәре генә түгел, ауыл хужалығына, ер мәсьәләһенә бәйле министрлыҡтар һәм учреждениелар вәкилдәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары ла килгәйне. Ултырышҡа тиклем Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты йылдан ашыу эҙмә-эҙлекле эш алып барҙы, махсус рәүештә ҡыҙыҡһыныусы ведомстволар вәкилдәре лә индерелгән эш төркөмө төҙөп, республика райондары буйлап күсмә ултырыштар уҙғарҙы, уңышлы эшләгән предприятиелар эше менән таныштыҡ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай үткәргән ерҙең ундырышлылығын күтәреү буйынса парламент тыңлауҙарында, республиканың Фермер һәм крәҫтиән хужалыҡтары ассоциацияһының йыллыҡ йыйылышында, Ауыл хужалығы министрлығының эш башлаусы фермерҙарға субсидиялар бүлеү буйынса ике ултырышында ҡатнашты. Был эштәр барыһы ла бер маҡсаттан - нисек итеп ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙең һөҙөмтәлелеген күтәреү, хужалыҡ итеүҙең алдыңғы ысулдарын һәм формаларын таратыу, иҡтисад нигеҙен тәшкил итергә тейешле фермерҙарҙың проблемаларын бергәләп хәл итеү юлдарын эҙләү маҡсатынан сығып башҡарылды. Был йәһәттән сығыш яһаусыларҙың фекерҙәре иғтибарға лайыҡ һәм уларҙың иң әһәмиәтле мәлдәрен гәзит уҡыусыларға ла тәҡдим итәбеҙ.**

# ҮҘ ЕРЕБЕҘГӘ ҮҘЕБЕҘ

## Шарттар тыуҙырмай тороп...

**Румил АҘНАБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:** Санкциялар индерелгәнгә тиклем Рәсәй сит илдән йыл һайын 10 миллиард долларлыҡ аҙыҡ-түлек һатып ала ине. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙә йөҙҙәрсә миллион гектар экологик таҙа ер эшкәртелмәй ята. Һуңғы ваҡытта уларҙы ҡыуаҡтар һәм йәш ағастар баҫып бара. Әммә, икенсе яҡтан, ошо битарафлығыбыҙ һөҙөмтәһендә беҙҙә Ер шарындағы иң таҙа ерҙәр һаҡланып ҡалды, уларға пестицидтар, ГМО индерелмәне. Әлеге ваҡытта экологик таҙа аҙыҡ-түлек - донъяла иң ҡиммәтлеләрҙән һанала һәм уға һорау йылдан-йыл арта. Беҙ үҙебеҙҙең ер ресурстары менән 1,5 миллиард кешене туйындырып, йыл һайын 500 миллард һумлыҡ килем ала алабыҙ. Әгәр ошо мөмкинлекте тормошҡа ашырһаҡ, иҡтисад 2020 йылға 2-3 тапҡырға артып китәсәк. Әбыл инде илдең ҡеүәте һәм социаль тотороҡлоғо билдәһе. Юҡҡа ғына Евросоюз ил бюджетының 42 процентын ауыл хужалығы сәйәсәтенә йүнәлтмәй, ә беҙ иң яҡшы осраҡта ла ни бары 2 процент менән мөрхәтһенәбеҙ.

Бындай хәл-торош нимәнән килеп сыҡты һуң? Уҙған быуаттың 30-сы йылдарынан башлап ауыл хужалығы ерҙәре төрлө формалағы ауыл хужалығы предприятиеларыныҡы булып иҫәпләнһә лә, ғәмәлдә, улар дәүләттеке ине. 2006 йылдан халыҡҡа ер пайҙарын бүлеп биреү башланды. Бөгөн нимә күрәбеҙ: ерҙәр бар, әммә хужалары юҡ. Закон буйынса, ер пайына эйә кешеләр уны һөҙөмтәле файҙаланыу өсөн яуаплылыҡ тойорға тейеш. 2015 йылдың 1 апреленә республикала 307 мең граждан ергә хоҡуҡын закон менән нығытып ҡуйған. Был 1,9 миллион гектар тәшкил итә. Шуларҙың 1,6 миллион гектары ауыл хужалығы предприятиеларына оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға бирелгән. Әммә ҡуртымға алыусылар ер хужаларына аренда хаҡын түләмәй, сөнки улар араһында килешеү рәсми рәүештә теркәлмәгән. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: әлеге ваҡытта 60 мең кеше үҙенең пайына документ алмаған һәм улар ер хужаһы булып иҫәпләнмәй. Закон буйынса, әгәр кеше өс йыл буйы ерен файҙаланмай икән, улар суд ҡарары менән муниципалитетҡа - ауыл биләмәһе хакимиәте ҡарамағына күсерелә. Әлеге ваҡытта муниципалитеттарҙа бындай ерҙәр барлыҡ дөйөм пай ерҙәренең 4 процентын (14329 пай ере, 101 мең гектар) ғына тәшкил итә.

Үҙ еребеҙҙә үҙебеҙ хужа булмаһаҡ, ситтәрҙең хужа булыуы ихтимал. Ҡайһы бер ауылдарҙа буш торған йорттарҙы, пай ерҙәрен ситтән килгән кешеләрҙең һатып алыу процесы башланды. Был бигерәк тә Ырымбур, Силәбе менән сиктәш булған райондарҙа күҙәтелә. Ерҙе файҙаланыуҙың әле ике генә варианты бар. Беренсеһе - үҙең эшкәртеү, икенсеһе төрлө формалағы ауыл хужалығы предприятиеларына ҡуртымға биреп, файҙа күреү, дивидендтар алыу. Республикала бындай хужалыҡтар бар һәм улар уңышлы эшләп килә, йыллыҡ килемдәре 16-30 миллион һумға етә. Шулай уҡ һөҙөмтәле эшләгән фермер хужалыҡтары ла юҡ түгел. Ауыл хужалығы министрлығының эш башлаусы фермерҙар үҙҙәренең бизнес-проекттарын яҡлаған ултырышында ҡатнашыу шуны асыҡланы - уларҙың ҡайһы берҙәре бөтөнләй фермер хужалығының иҡтисадын төшөнмәй, һандар ҡайҙан барлыҡҡа килгәнен дәлилләй алмай, фермер хужалығы тураһында саҡ ҡына ла белеме юҡ. Ундайҙар бары тик дәүләт ярҙамын алыу тураһында ғына хыялланa. Шуға күрә фермер булырға теләүселәр өсөн даими рәүештә семинарҙар үткәреү, ауылдарҙа шәхси хужалыҡтарында күпләп мал аҫрарыусылар өсөн уҡыу ойоштороу көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Юғиһә, законларҙы сығарҙыҡ та, ҡасан ауыл ерләп эшләй башлар икән, тип көтөп ултырабыҙ. Эйе, ауыл кешеһенең бөгөн төп байлығы - ер. Ә унан килем алыу тураһында төрлө ҡараш йәшәй. Беҙ әлегәсә илде кем туйындырыуын асыҡлай алмайбыҙ: фермерҙы, дәүләт ҡатнашлығы булған кооперативтармы, шәхси хужалыҡтармы йәки барыһы бергәме? Уларҙың эшмәкәрлегендә дәүләттең ҡатнашлығы ниндәй кимәлдә? Был һорауҙар һаман да асыҡ ҡала. Ә улар әһәмиәтһеҙ һорауҙар түгел. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ районында дүрт йыл һуҙымында халыҡтың пайын төрлө һылтауҙар табып рәсмиләштереүҙе һуҙып киләләр. Һөҙөмтәлә фермерҙар дәүләт теркәүе булмаған ерҙәрҙә эшләргә мәжбүр. Әммә улар дәүләт ярҙамынан мәхрүм: субсидия, банктан кредит ала, төрлө конкурстарҙа ҡатнаша алмайҙар. Ә бында ике фермер ике ауылдың 182 кешеһен һалам, иген, мал аҙығы һ.б. менән тәьмин итә, әммә уларҙың эшмәкәрлеге закондан тыш тип һанала, хатта уларға ҡарата штраф санкциялары ҡулланылыуы ла мөмкин.

Ауыл хужалығы етештереүен яңы шарттарҙа алып барыу өсөн ҡануниәт базаһы ла, шарттар ҙа бар. Әммә, күп осраҡта, барлыҡ башланғыстар урындағы бюрократик мөнәсәбәткә барып төртөлә. Муниципаль милеккә ерҙәрҙе бүлеү өсөн төрлө кимәлдәге советтарға намыҫлы, грамоталы, илһөйәр депутаттарҙы һайларға кәрәк. Юҡһа, айырым кешеләр ошо күсеү осоронда бары тик үҙ кеҫәләрен генә ҡайғырта. Барлыҡ кимәлдәге депутаттарға ла, ниһайәт, ауыл хужалығының төпһөҙ түгеллеген, уның илдең киләсәге, уның уңышы, именлеге, үҙаллылығы икәнен аңларға ваҡыт. Ауыл хужалығы етештереүсеһенә эшләү өсөн шарттар тыуҙырмай, ауыл халҡының тормош-көнкүрешен яйға һалмай тороп, беҙ бер ваҡытта ла етерлек күләмдә аҙыҡ-түлеккә эйә булмаясаҡбыҙ. Үҙендә етерлек продукт булмаһа, илде һәр саҡ көрсөк ҡаҡшатасаҡ, башҡаларҙан бәйле буласаҡбыҙ.

## Илде ерҙә эшләгәндәр туйындыра

**Николай КОВАЛЕНКО, БР ауыл хужалығы министры:** Пай ерҙәренә килгәндә, улар ҡуртымға ҡыҫҡа ваҡытҡа бирелә. Бының төп сәбәбе булып халыҡтың ҡуртым түләүен алыу-алмау мәсьәләһе тора. Шул уҡ ваҡытта ҡыҫҡа мөҙҙәткә ҡуртымға алыусы ерҙе тейешенсә эшкәртә алмай һәм уны ҡыҫҡа ваҡыт ҡәнәғәтләндермәй. Ул агротехник сараларҙы тулыһынса үткәрә алмай, иң мөһиме - дәүләттән субсидия алыуҙан мәхрүм ҡала. Республика буйынса һәрбөнтө ерҙәрҙең 570 мең гектары (17 процент) рәсми теркәлмәгән. Шул күләмдән ҡыҫҡа килешеү нигеҙендә файҙаланылған ерҙәр 80 процентты тәшкил итә. Баймаҡ (61 процент), Хәйбулла (51 процент), Көйөргәҙе (32 процент), Баҡалы (19,5 процент) һ.б. райондарҙа килешеүһеҙ файҙаланылған пай ерҙәренең майҙаны ҙур. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк, марттан башлап теркәлмәгән ерҙәрҙе файҙаланған өсөн штраф күләме артып, хәҙер ул ер участкаларының кадастр хаҡынан сығып баһалана һәм 100 меңдән 200 мең һумға тиклем булыуы ихтимал. Ауыл хужалығы ерҙәрен теркәү һәм уларҙы файҙаланыу район хакимиәттәре өсөн дә ҙур әһәмиәткә

**унда ситтәр**

эйә, сөнки ҡуртым килешеүе булмаһа, урындағы бюджетка килем инмәй.

Шуға күрә ер хужалары араһында ауыл хужалығы продукцияһын етештереүсе менән оҙайлы ваҡытҡа килешеү зурарлығын аңлатыу эше алып барырға кәрәк. Быйыл шундай шарт ҡуйҙыҡ: компенсацияны бары тик ҡуртым килешеүен 3 йылдан да кәм булмаған ваҡытҡа төҙөгән, яҡшы орлоҡ сәскән хужалыҡтарға ғына бирәсәкбеҙ. Әгәр сәсеү әйләнешен, ашлама индереү, башҡа технологияларҙы үтәһәк, һөҙөмтә лә буласаҡ. Беҙҙе сәселгән ҙур майҙандар ҡыҙыҡһындырмай, ерҙе һөҙөмтәле файҙаланыу һәм ер хужалары алған продукт ҡыҙыҡһындыра. Сөнки илде ергә ваҡытлыса ғына түгел, оҙаҡҡа килгән уның ысын хужалары ғына туйҙырасаҡ, ерҙе киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡаласаҡ.

Пай ерҙәрен нисегерәк файҙаланырға була, тигән һорау менән мөрәжәғәт итеүселәргә төрлө йүнәлештәр тәҡдим итәбеҙ. Мәҫәлән, Рәсәй һәм Башҡортостан кимәлендә йәшелсәләрҙе ерҙә үҫтереү, теплицалар төҙөү һәм уларҙы модернизациялау, йәшелсә һәм картуф һаҡлағыстар төҙөү, логистик үҙәктәр булдырыу ҙа өҫтөнлөклө йүнәлеш булып тора. Был да көнүҙәк мәсьәлә, сөнки республикаға 2 миллиард һумлыҡ йәшелсә индерелә. Халыҡ үҙебеҙҙең етештереүсегә түләргә тейешле суммаһы ситкә ебәрәбеҙ. Былтыр ошо программаны тормошҡа ашырыуға 160 миллион һум аҡса бүленеп, республика буйынса 12 гектар теплица модернизацияланып, реконструкцияланып, төҙөлдө. Быйыл кәм тигәндә 25 гектарҙа төҙөү планлаштырыла. Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы тарафынан теплица төҙөүгә тотонолған сығымдарҙың 20 проценты компенсацияланһа, республика бюджетынан тағы ла 5 процент өҫтәләсәк. Был бик ҡыҙыҡтырырлыҡ һәм ылыҡтырырлыҡ тәҡдим. Картуф һәм йәшелсә һаҡлағыстар төҙөүҙе дәртләндереү маҡсатынан шулай уҡ 25 процент сығым компенсацияланасаҡ. Яңыны төҙөп йәки иҫке бинаны модернизациялап, конкурсҡа документтар тапшырырға мөмкин. Сөнки халыҡ картуфты, йәшелсәне күп үҫтерә, әммә уларҙы оҙайлы ваҡыт ҡайҙа һаҡларға белмәй.

Фермер хужалыҡтарына ярҙам күрһәтеүсе "Эш башлаусы фермер", "Ғаилә малсылыҡ фермаларына ярҙам" программалары бар. Уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн Рәсәй һәм республика бюджеттарынан 180 миллион һумдан ашыу аҡса бүлеү планлаштырыла. Бөгөнгә 361 ғариза бирелгән. Уларҙың һәр ҡайһыһына барып, тикшереп, ай һуңында гранттар бүлә башларбыҙ, тип уйлайым. Быйыл фермерҙар етештергән ауыл хужалығы продукцияһы күләмен арттырыу бурысын ғына ҡуймайбыҙ, ә уларҙы кооперативтар аша һатыуҙы ла күҙаллайбыҙ. Сөнки бөгөн фермер алдында торған иң ҙур проблемаларҙың береһе - аҙ күләмдәге тауар партияһын һатыу. Шуға күрә РФ Ауыл хужалығы министрлығының "Кооперацияны үҫтереү" программаһына инергә ғариза бирҙек, мәсьәлә ошо айҙарҙа хәл ителер тибеҙ, уны тормошҡа ашырыу өсөн проектыбыҙ әҙер. Тәү сиратта ул һөт йыйыу һәм һыуытыу пункттарына ҡағыла. Шулай уҡ картуф, йәшелсә йыйыу, эшкәртеү һәм һауыттарға тултырыу, уларҙы һаҡлау буйынса ла проекттар бар. Ваҡ хужалыҡтарға продукцияһын сауҙа талаптарына тап килтереү һәм уларҙы һатыу буйынса ярҙам күрһәтелергә тейеш.

✓ *Күптәрҙең был тәңгәлдәге наҙанлығы һәм ватансыл булмауы эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә кәртә ҡора. Хәлдәр шулай дауам итһә, әрһеҙ сит-яттар килеп, ергә хужа булып, милләттәштәребеҙ уларға ялсы булып ҡына ла ҡалмаҫ, тимә.*



## Аҙыҡ-түлек етештереүсенең үҙен дә хәстәрлә!

**Зифҡәт СӘЙЕТҒӘЛИЕВ, Фермер һәм крәҫтиән хужалыҡтары ассоциацияһы рәйесе:** Бөгөнгә республикала 5800 фермер иҫәптә тора. Шуларҙың 4200-ө ауыл хужалығы продукцияһы етештерә. Беҙ уларҙың барыһына ла етештереүселәр тип ҡарайбыҙ. Баҫыуҙарҙың 20 процентын фермерҙар сәсә. Улар менән эшләүе лә енел, сөнки техникалары ла, орлоҡтары ла сәсеүгә әҙер. Йәғни улар үҙ эшен белә. Әммә башҡа проблемалары ла бар. Ауылда улар айырым социаль ҡатлам булып иҫәпләнә. Күпселек ауылдарҙа фермерҙан башҡа халыҡҡа ярҙам итерлек бөрәү ҙә юҡ һәм булмаясаҡ та. Йәғни ул ҙур социаль әһәмиәтле эш башҡара. Бынан тыш, ул дәүләттең иҡтисадын нығытыуға ла өлөш индерә. Әгәр дәүләт үҙ алдына шунса ит, шунса һөт һ.б етештереп, халыҡты туйҙырыу бурысын ғына ҡуйһа, ул дәүләт булмаясаҡ. Дәүләт иң тәүҙә аҙыҡ-түлек етештереүсенең үҙен хәстәрләргә тейеш. Мәҫәлән, миңә килгән фермерҙарҙан һәр саҡ "Район хакимиәте башлығы һиндә булғаны бармы?" тип һорайым. Ун кешенең икеһе генә һында уйлай. Был проблеманы хәл итеүҙе кем уйларға тейеш? Әлбиттә, дәүләт. Беҙ ярҙамһыҙ эшләй алмайбыҙ. Әммә фермерҙар тураһында хәстәрлек етерлек түгел. Шуға ла ҡайһы бер районда эре фермерҙар юҡ. Бынан ары райондарҙың ауыл хужалығы идаралығы етәкселәрен, хатта район хакимиәте башлығын тәғәйенләүҙә лә беҙҙең менән ассоциацияға йөкмәтеүҙе, йәки кәңәшләшеп эшләүҙе һораясаҡмын. Бөгөнгө хәл-торошта шулай итмәйенсә мөмкин түгел.

Кооперация мәсьәләһенә килгәндә, дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙең бер генә төбәгендә лә Европала булған классик кооперация юҡ. Сөнки әйтеп үтеүемсә, эшкәртеү предприятиелары икенсе хужа ҡулында. Ә продукция етештереүсе фермер сеймалын нисек эшкәртергә тейеш? Фермер ярты тонна һөт етештерҙе икән, ти. Һөт заводы директоры унан һөттөң литрын 13 һум менән һатып аласаҡ. Икенсе фермер бер тонна килтерһә, уныҡы 15 һум буласаҡ. Өсөнсөһө 20 тонна килтерә икән, хаҡы 20 һумға күтәрелә. Ә Европала мал һаны күп түгел. Германияла бер фермала 120 баш һыйырҙан артыҡты тотмайҙар. Шулай ҙа фермерҙары 100 миллион халҡы булған илен, тағы ла шул сама сит ил халҡын Ырымбур трассаһында көньяҡ ҡапҡа булып торабыҙ. Һөрөнтө еребеҙ 17500 гектар. Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙең дөйөм майҙаны 23 мең 421 гектар. 2500 баш эре малыбыҙ, 5 һөт-тауар фермаһы бар. Элек беҙҙең районда 12 ҙур хужалыҡ эшләй ине, хәҙер икәү генә ҡалды. Барлыҡ һөрөнтө ерҙәрҙең өстән бер өлөшөнә эйә булып, ошо ике хужалыҡ ауыл хужалығы продукцияһының өстән ике өлөшөн етештерәбеҙ, районыбыҙ республикала иң яҡшы 10 хужалыҡ иҫәбенә инә. Мораптал ауыл советы хакимиәте биләмәһендә бер генә фермер хужалығы ла юҡ. Ҡайһы берәүҙәр шәхси хужалығында эшләй, умартасылыҡ менән шөғөлләнеүселәр, шәхси сауҙа нөктәләре асыусы эшҡыуарҙар бар. Беҙ кешеләргә шәхси хужалығын алып барыуҙа мал аҙығы менән ярҙам итәбеҙ, транспорт бүләбеҙ, йорт һалыусыларға ярҙамлашабыҙ. Урамдарҙы тәртиптә тотоу, һыу скважиналарын ҡарау, төрлө саралар үткәреү, социаль-мәҙәни объекттарға бағыусылыҡ ярҙамы күрһәтеү һ.б. беҙҙең иңдә ята. Былар төп эштән - ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙән тыш эшләнә. Шуға күрә халыҡ хужалыҡтың шундай коллектив формаһын ҡулай күрә.

**Урал арьяғы филиалы доценты, Сибай ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Советтар Союзы тарҡалғандан алып сирек быуат буйы реформа дауам итә, һаман да осо-ҡырыйы юҡ, һаман да эшкәртелгән ерҙәр ҡыҫҡара, баҫыуҙарҙы әрем, ҡарағура баҫа. Ерҙең төп хужаһы була тороп, ауыл ер мәсьәләләренән ситләтелгән. Халыҡ ҡағыҙҙағы ер пайҙарының файҙаһын күрмәй, уларҙы һалым түләү өсөн генә тип һанай. Күптәрҙең был тәңгәлдәге наҙанлығы, вайымһыҙлығы һәм ватансыл булмауы эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә кәртә ҡора. Хәлдәр шулай дауам итһә, әрһеҙ сит-яттар килеп, ергә хужа булып, милләттәштәребеҙ уларға ялсы булып ҡына ла ҡалмаҫ, тимә. Миненсә, эште ыңғай яҡҡа бороуҙа түбәндәге саралар күрергә кәрәк: беренсенән, урындағы халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға. Сөнки ергә бәйле дәүләт ҡарарҙары һәм ҡанундар шул тиклем ҡатмарлы, ябай кешеләргә аңлайышһыҙ. Хәҙер Көнбайыш илдәренең санкциялары һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә ауыл хужалығын үҫтереүгә йүнәлтелгән саралар ҡабул ителә башланы, ярҙам күрһәтеү буйынса эшләнгән программалар бар. Үкенескә ойошторорға кәрәк. Һәм алдынғы илдәр миҫалына таянып, артыҡ ит, һөт һәм башҡа продукцияны халыҡтан махсус йыйыуҙы кооперациялар аша ойоштороп, логистик үҙәктәр булдырып, уларға таянып, үҙебеҙҙең ерҙә етештергән аҙыҡ-түлекте ваҡ һәм эре сауҙа селтәрҙәре аша ла һатыуға сығарырға кәрәк. Тап үҙебеҙҙең фермер, үҙебеҙҙең крәҫтиән етештергән продукция ятырға тейеш сауҙа кәштәләрендә.

Ҡасандыр ерҙә нефть тә, газ да бөтәсәк, тик Ер-әсә генә мәңгелек. Ауыл хужалығының ҡабаттан тергеҙелеүенә минең шигем юҡ. Ләкин ерҙә эшләү өсөн белгестәр ҙә кәрәк бит. Былтыр бер хужалыҡҡа агроном эҙләп таба алманыҡ. Быйыл зоотехник кәрәк - табып булмай, сөнки белгестәр юҡ, ә ҙур ҡалаларҙа студенттар уҡып бөтә лә, кибеттәрҙә һатыу итеп торһа тора, тик ауылға ҡайтмай. Шуға күрә лә БДАУ-ҙың Урал арьяғы филиалын ябыу тураһында ҡарар ҡабул итеү һис тә аңлашылмай. Беҙгә уҡырға килгән абитуриенттарҙың БДИ күрһәткестәренең түбәнлеге менән аңлаталар быны. Шуға күрә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты исеменән Хөкүмәттән, башҡа юғары уҡыу йорттарынан айыр-

# ХУЖА БУЛМАҺАҠ...

## хужа булыр бит

ыңғай яуап биреүе мөмкин. Йәғни етәкселек үҙенең районындағы фермерҙарҙы белмәй ҙә, күрмәй ҙә.

Күптән түгел Мәскәүҙә Президент Советы ултырышы үтте, унда илдең, субъекттарҙың барлыҡ етәкселәре ҡатнашты. В. Путин "Ни өсөн фермерлыҡ, микро, урта, бәләкәй хужалыҡтар үҫешмәй?" тигән һорау ҡуйҙы. Улар ил буйынса уртаса 11 процентты тәшкил итә. Ә Германияла был һан 60-65 процент. Ни өсөн беҙҙә аҙ? Сөнки фермерҙарҙың йоҡоһоҙ төндәрен, ауырыуҙарын, тырышлығын һөҙөмтә аҡламай. Ә бөгөн иҡтисадта иң мөһим кеше, иң мөһим звено - етештереүсе. Үҙенең статусы, килеме буйынса етештереүсе иң юғары урында булырға, башҡалар уны хеҙмәтләндерергә тейеш. Беҙҙә киреһенсә килеп сыға. Шуға ла һуңғы дүрт йыл эсендә фермерҙар һаны артмай.

Рәсәй һәм Башҡортостан иҡтисадының көсһөҙлөгө нимәгә бәйле? Мәҫәлән, 1961 йылда Японияла барлыҡ эшкәртеүсе предприятиеларҙы дәүләт һатып алып, уларҙы фермерҙарға бирҙе. Американала, Скандинавияла, Европа илдәрендә лә шундай уҡ хәл. Ә беҙҙә етештереүсе үҙенең продукцияһын, мәҫәлән, һөтөн эшкәртеүсегә алып барып, уны һатып алыусы ҡуйған хаҡҡа тапшырырға тейеш. Шулай итмәҫ ине, һөт әсей, боҙола, һаҡлар урын юҡ. Ә эшкәртеүсе фермерҙы түгел, үҙенә килем алыу тура- ашата. Ә беҙ ниндәйҙер районда 10 мең баш һыйырға иҫәпләнгән комплекс төҙөнөк, тип яр һалабыҙ.

Нигеҙҙә, республика фермерҙары картуф, бал, йөшелсә (90 процент), нарыҡ ите (80 процент) етештерә. Әммә фермерҙар аҙ. Башҡортостан өсөн 4 мең түгел, 40 мең фермер кәрәк. Сөнки был - йәшәү рәүеше. Әллә ҡайҙан килгән инвестор, әгәр ауыл халҡы уға бушҡа йәки аҙ эш хаҡына эшләргә теләмәһә, тота ла гастарбайтерҙарҙы саҡыра. Ә беҙҙең халыҡ нисек йәшәргә тейеш? Шуға күрә, ҡайҙандыр килеп һатып алған түгел, бары тик ошо ерҙә тыуған, ошонда эшләгән кеше генә ысын мәғәнәһендә инвестор була ала.

Фермерҙар өсөн страховка мәсьәләһе лә бик ауыр проблема булып ҡала. Дәүләт страховкаһы булырға тейеш. Сөнки фермер страховка өсөн түләй, әммә бәләҡаза килгәндә, аҡса юлап ала алмай. Шулай уҡ фермерҙар һалым органдарына шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлә. Әгәр бурысын түләргә аҡсаһы етмәй икән, ул өйөн, машинаһын һ.б. һатырға тейеш була. Был мәсьәләне хәл итеүҙе Башҡортостан Башлығына еткерергә кәрәк.

### Мөмкинлектән сығып…

**Рәмил ТУҠАЕВ, Көйөргәҙе районының Киров исемендәге ауыл хужалығы производствоһы кооперативы директоры:** Беҙ Өфө-

Пайсыларға дивидендтар түләүгә килгәндә, был бәхәсле мәсьәлә. Барыһы ла аҡыллы, барыһы ла ерҙән файҙаланған өсөн түләгеҙ, тип талап итергә генә белә. Әммә Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәй буйынса ҡанундар менән билдәләнгән берҙәм ҡағиҙә, ул ғына ла түгел, түләүҙе нисек башҡарырға, уны нисек иҫәпләргә өйрәткән бер генә күрһәтмә юҡ. Һәр кем үҙенең мөмкинлектәренән сығып, үҙенең тәртибен булдыра. Ауыл хужалығы производствоһы юғары килеме тармаҡ булып тормай һәм беҙ юғары дивидендтарға иҫәп тота алмайбыҙ. Пайҙарыбыҙҙы хужалыҡтарға ышанып тапшырғанбыҙ һәм дивидендтар аша финанс проблемаларыбыҙҙы хәл итеү реаль түгеллеген беләбеҙ. Халыҡтың күпселеге быны аңлай һәм артыҡ талаптар ҡуймай. Кемде бындай алым ҡәнәғәтләндермәй, улар үҙҙәренең ерен алып, үҙҙәре эшләргә ала. Ә мыжыусылар һәр ваҡытта ла буласаҡ, уларға ҙур хужалыҡтарҙың аныҡ производство менән шөғөлләнеүен аңлатырға кәрәк. Производствоға күп иғтибар бүлгәндә, уңыш та күберәк буласаҡ. Шул ваҡытта дивидендтарҙың күләме лә артасаҡ. Барыһы ла асыҡ булһын өсөн беҙ үҙебеҙҙә Пайсыларҙың вәкәләтле советын ойоштороҡ. Унда һәр ауылдан бер ағза бар. Был совет бәхәсле мәлдәрҙе тикшерә, уңышты иҫәпләү һәм дивидендтарҙы бүлеү эшендә ҡатнаша.

### Ер пайы һалым өсөн генәме?

**Ирек БИКМӘТОВ, Башҡорт дәүләт аграр университетының**

күрә, уларҙы халыҡ белеп етмәй. Үҙ эштәрен асырға маташыусылар урындағы чиновниктарға ҡат-ҡат, йылдар буйы йөрөп, ниәтенән һүрелә.

Беҙ Сибай ҡала башҡорттары башҡарма комитеты ҡарамағында Сибайҙағы төбәк тикшеренеүҙәр институты, БДУ-ның Сибай институты, БДАУ-ҙың Урал арьяғы филиалы, Урал арьяғының бизнес үҙәге, Сибайҙағы Бөтә Рәсәй юристар ассоциацияһы филиалы берләшеп эш төркөмө төҙөнөк, мәсьәләне аныкланды. Һәм ҙур ауылдарға сығып, аңлатыу эштәре алып барырға уйлайбыҙ. Икенсенән, беҙҙең Урал арьяғында күпселек ауылдарҙа мал, бигерәк тә йылҡы һаны арта. Был, әлбиттә, ыңғай күренеш. Башҡа йәшәр сығанағы булмаған халыҡ мал аҫырап көн күрә. Шул мал арҡаһында йәшәй, торлаҡ төҙөй, балалар уҡыта. Әммә үҫентеләрҙе малдан тапатыу шундай киң ҡолас алды, хатта күп урында ерҙәргә бер нәмә лә сәселмәй. Сөнки йыл да тигәндәй ҡоролоҡ йонсота, икенсе яҡтан, көтөүһеҙ йөрөгән мал-тыуар аптырата.

Тоҡомсолоҡ эше лә хәл итерлек тейешле мәсьәлә. Халыҡ бит юҡҡа ғына, һигеҙ һыйыр аҫырағансы, һимеҙ һыйыр аҫыра, тимәгән. Шуға күрә һәр ауылда малдарҙың тоҡомлолоғо һәм продуктлылығы кәмемәһен өсөн яңы торонкторроу пункттары асыу проблемаһы ла бар. Республика Башлығы Р. Хәмитов әйтеүенсә, уңышлы эшләгән шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙы фермер хужалыҡтарына тиклем үҫтереп, киләсәктә уларҙан эре коллективтар

малы, ауыл хужалығы вуздарына ҡабул ителеүселәрҙең БДИ нормативын 60-тан 50-гә тиклем кәметеүҙе һорарға кәрәк. Сөнки ауыл мәктәбен тамамлаған уҡыусыларҙың белем кимәле ҡалаҡылыҡтарға ҡарағанда барыбер ҙә түбәнерәк, ә ҡала мәктәбен тамамлаған абитуриент бер ҡасан да аграр вузға бармаясаҡ. Беҙҙең район Өфөнән 500-600 саҡырым алыҫлыҡта урынлашҡан. Шунда уҡығандарҙың күбеһе үҙ райондарына әйләнеп ҡайтып, эшләп йөрөй. Улар араһында үҙ эшен асып, Хөкүмәт грантын алыусылар ҙа бар. Әйткәндәй, Рособрнадзор беҙҙең Сибайҙағы филиалдың лицензия талаптарына яраҡлығын тикшереп, юғары баһа бирҙе китте. Тимәк, уҡыу йортон Мәскәү түгел, үҙебеҙ ябабыҙ. Ошо хаҡта ла уйланһаҡ ине.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡорҙа ҡатнашыусыларҙың фекеренән сығып ҡына ҡарағанда ла, ер, тәү сиратта, ил иҡтисадын аяҡҡа быҫтырыр ҡеүәткә эйә. Әгәр бөгөн Татарстан Республикаһында ер һалымы миллиард һумлап, ә беҙҙә миллионлап ҡына йыйыла икән, тимәк, уйланырға, эшләп еткерелмәгән урындарҙы төҙәтергә, ергә хужа булырлыҡ фермерҙарҙы үҫтерергә, уларға нығынып киткәнсе ярҙам итеү хаҡында формаль рәүештә түгел, ә ғәмәлдә уйларға кәрәктәр. Һәм ошо ҡорҙа күтәрелгән мәсьәләләр, әгәр күңелдәрендә илһөйәрлек бар икән, районлар, республика етәкселегенең иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ, моғайын.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

***✓ Ҡәҙер кисе тип аталған изге бер төндә тамағын ҡырып ята торғас, нисәмә йыл өнһөҙ йәшәгәндән һуң ҡапыл тауышы сығып китте. Ҡыуанысынан әбейен саҡырҙы, янына килеүсе булмағас, тағы, тағы ҡысҡырҙы.***






Лена АБДРАХМАНОВА

# ӨҘӨЛГӘН ТИҪБЕ

Әбейенең тартып ултырған тиҫбеһе өҙөлөп, төймәләре тырым-тырағай һирпелеп таралғас та, бының тиктәҫкә түгеллеген аңланы Ғәзим. Күңелен үҙәк өҙгөс ауыр тойғо биләне.

Мәрхүмә апаһының хаж бүләге ине ул. "Әнем, тик ултырып арып китәһеңдер, тиҫбе тартып, теләк теләп ултыр. Һинең кеүек саф күңелле кеше ни теләһә лә ҡабул була ул", - тип ҡулына тотторғайны. Изге урындан ҡайтҡангамы, Нәфисәһе был тәсбихкә айырым мәғәнә һалды шикелле, бүләкте үҙенә алды ла, ҡартының ҡулына икенсене һалды. Фалиждан һуң бармаҡтары ғына түгел, хәрәкәттәре лә ҡатып ҡалған Ғәзимгә ни ҡайһыныһы булһа ла барыбер, әлбиттә. Шулай ҙа әбейе ҡулындағыһына һәр ваҡыт апаһының төҫө итеп, яратып, ҡәҙерләп ҡараны. Хәйер, тиҫбе тәүҙә оҙаҡ йылдар стенала сөйҙә эленеп торҙо. Әбейе уны һуңғы осорҙа ғына ҡулына алды. Яулығын килештереп ябынған була ла, аяғын өҫкә күтәреп, тиҫбе тартып ултыра башланы. Ғүмер буйы бөтә эшен бисмиллаһыҙ башлап, үҙенә - баш, үҙенә - түш булып өйрәнгән, Аллаһ исемен теленә лә алмаған әбейе ауыҙ эсенән нимә мығырҙағанын бик белгеһе килә Ғәзимдең. Башҡа эше булмағас, урта ишек быяlаһы аша булһа ла Нәфисәнең һәр хәрәкәтен шулай күреп-күҙәтеп ултырырға ғәҙәтләнгән ул. Тик хуплап та, шелтәләп тә бер нәмә лә әйтмәй, дөрөҫөрәге, әйтә алмай: ҡаты ауырыу уны телдән дә яҙҙырғайны. Бына хәҙер ике тиҫтә йыл инде: ултыртһалар - ултыра, ятҡырһалар - ята. Шуға ла әбейенең күп ҡылығы менән күңеленән ризалашмаһа ла, үҙен ҡараған өсөн уға рәхмәтле булып, Аллаһынан уның бөтә гонаһтары өсөн ғәфү үтенеп, ҡиәмәт көнөндә ҡатынын кисереүен һорап, доға уҡыны, теләктәр теләне.

Бына бөгөн дә Нәфисә ҡашығаяҡ тирәһендә эшен бөтөрҙө лә, еүеш ҡулын алъяпҡысына ышҡып һөртә-һөртә телевизор алдындағы йомшаҡ креслоға ултырҙы, телевизорҙы ҡабыҙҙы һәм ҡулына тиҫбеһен алды. Үҙе тиҫбе тартҡан була, ә ике күҙе - экранда. Исмаһам, Ғәзим яғына бер әйләнеп ҡараһасы. Әйтерһең дә, карауатта балаларының атаһы түгел, ә күҙле бүкән ултыра. Иртән торғас, һөйәктә тиренән ҡалған ҡартын елтерәтеп ултыртып, янына ризыҡ ҡуйҙы. Саҡ-саҡ ҡыбырлаған ҡулы менән нимә генә ашап өлгөрһөн инде, тиҙҙән әбейе йәһәтләп йыйыштырып та алды. Һөйләшмәгәс тә, ишетмәй ҙә тип уйлай, ахырыһы, ҡартын, бер ауыҙ һүҙ әйтмәй. Йылы һүҙгә ғүмер буйы һаран булды, әлбиттә, Нәфисәһе. Йәштән уға бер нәмә лә оҡшаманы, һәр ваҡыт йөҙөнә ҡәнәғәтһеҙлек билдәһе сығарып, бөтәһе менән тартмырт һөйләште. Ғәзим яҡшы һүҙгә өмөт тә итмәй инде, һис юғында, ризаһыҙлыҡ белдерһен ине, юғиһә, күңеленә бигерәк ауыр, тик ултырғас та, хисе-тойғоһо юҡ тип уйлай, күрәһең.

Ике йәшлек ейәнсәре генә ҡабат-ҡабат килеп, ишек быяlаһын шаҡый, үҙ телендә олатаһына низер һөйләп китә. Ошо ваҡытта Ғәзимдән дә бәхетлерәк кеше булмай, ҡыҙсыҡ нимә әйтһә лә, уны хуплап, башын һелкеп, йылмайып ултыра. Ейәнсәре лә тигеҙ тешен күрһәтеп, ауыҙын йыра. Тик был күңелдәрҙе күккә олғаштырған илаһи мәл оҙаҡҡа һуҙылмай уларҙың - Нәфисә әбей күргәнгә тиклем генә дауам итә. Бына әле лә шат йылмайған Ғәзимдең йөҙөн күреү менән ишек быяlаһына терәлеп торған ейәнсәрен тартып тигәндәй алып, үҙе янына ултыртты һәм тиҫбе төймәләрен тарта башланы, күҙе менән телевизорға төбәлде. Тик ейәнсәренәме, әллә ҡартынамы ныҡ асыуы килде шикелле - тиҫбеһен кинәт өҙә тартты ла ебәрҙе. Мәрйендәр төрлө тарафҡа һибелеүен күргәс, һағайып, күҙе ҡырыйы менән генә бабайы яғына ҡараны, әйтеп аңлатмаһа ла, Нәфисә күҙ ҡарашынан белеп тора: Ғәзиме апаһының был бүләгенә изге ҡомартҡы һымаҡ ҡарай. Шуға ла йәтешләп ултырған урынынан етеҙ генә тороп, һибелгән бөртөктәрҙе йыйырға керешә. Тик артыҡ тулҡынланыуҙанмы, ҡулына гәрәбә төймәләр эләкмәй аптыратты, тотҡандары ла терегөмөш кеүек, килбәтһеҙ тулыҡҡан бармаҡ араһынан тәгәрәшеп төшөп маҙаһыҙланы. Эргәһендә уйынсыҡтары менән мәш килеп уйнаған ейәнсәренән башҡа бүлмәлә бер кем дә булмаһа ла, үҙен ғәм халыҡ алдында эш боҙған кешеләй тотто. Алан-йолан ҡарана-ҡарана, ауыр көүҙәһен көс-хәл менән боргослап йыйып алды ул. Йыйылғанын һанағайны - берәүһе етмәй. "Иҙән йыуғанда табылыр әле. Табылмаһа ла, ҡурҡыныс түгел, тиҫбегә ҡытлыҡ юҡ хәҙер, теләгәнен һайлап алырға була", - тип йыуатты үҙен. Бәләкәй генә мәрйен бөртөгө ҙур ҡайғы килтереүен күҙ алдына ла килтермәй ине ул, әлбиттә...

Тиҫбе өҙөлөп, күп тә үтмәй, яны ғына бер ҡайғы белмәй уйнап ултырған ейәнсәре бер ҡасан да булмағанса тынғыһыҙлана башланы. Ярап та, алдаштырып та, һиккертеп тә, ашатып та ҡараны.

Тик йәмәғәте яғына ғына ҡарарға башы етмәне, унан ни файҙа, тинеме, ғәҙәтенсә, күҙ ҡырыйы менән генә булһа ла ҡараһа, әлбиттә, бәләне кисектерә алыр ине. Улай-былай иткәнсе сабыйҙың тын алыуы ауырлашты. Нәфисә ни эшләргә белмәй, баланы күкрәгенә ҡыҫып ҡосаҡлаған көйө урамға йүгереп сыҡты: "Зинһар, ярҙам итегеҙ!" - тип асырғанып ҡысҡырҙы. Зыянынан башҡа бер ни күрһәтмәһә лә, күршеләре тауышҡа йүгереп сыҡты. Береһе бала күтәргән Нәфисә янында ҡалды, икенсеһе ашығыс ярҙам саҡырырға ашыҡты...

"Бөтә кеше сит илдә ял иткәндә һеҙ кемдән кәм, барығыҙ, юлығыҙға аҡсаны үҙем бирәм, ҡыҙығыҙҙы үҙем ҡарайым", тип көсләп тигәндәй ебәрҙе ҡатын диңгеҙ буйына төпсөк ҡыҙы менән кейәүен. Өйҙән хәбәр алғанда яны барып етеп, сумаҙандарын бушатып та өлгөрмәгәйнеләр, кире юлға сыҡтылар. Юл ғазабы - гүр ғазабы, тип боронғолар белмәй әйтмәгән икән. Илле-алла менән ҡайтып етеүҙәренә сабыйҙың йәне йәннәттә ине инде - тиҫбе төймәһе тын юлына киткән ҡыҙҙы, ни тиклем тырышһалар ҙа, врачтар ҡотҡара алманы.

Ғәзим иһә баштан уҡ ейәнсәренең мәрйен бөртөгөн ҡулына алыуын да, ауыҙына ҡабыуын да күрҙе, тик өнө сыҡмағас, ҡатынына нисек белдерһен инде. Асырғанып ҡысҡырҙы, әлбиттә, ҡулын да мөмкин булғанса күтәреп, болғаны, һелкте, карауатҡа һуҡты. Әбейе генә уның яғына күҙ һалманы, ҡараһа, нисек тә аңлата алыр ине...

Ғәзимдең ғаиләһен һағалап торған ҡара ҡайғы бының менән генә бөтмәне. Боронғолар бәлә яңғыҙ йөрөмәй тиғән бит - бәләкәсте ерләшергә ҡайтып килгәндә, аварияға осрап, Нәфисә менән Ғәзимдең оло ҡыҙҙары ла гүр эйәһе булды. Был ҡайғыларҙан әсе күҙ йәштәре кибеп тә өлгөрмәне, уртансы ҡыҙының берҙән-бер егерме йәшлек улы үҙенә ҡул һалды. Әсәһенең өряны машинаһы менән ауғас, ғәрлегенәнме, әллә яҡындарының шелтәләүенән ҡурҡыпмы, үҙ теләге менән яҡты донъя менән хушлашты.

Мал-тыуарҙары ла йыл әйләнәһенә ҡазаланып торҙо. Ғәзим ғаиләһендә нимә барғанын аңлап, ишетеп, күҙәтеп, йөрәге аша үткәреп ултырҙы. Инеп сыҡҡан арала ла быға тиклем бер һүҙ әйтмәгән Нәфисә һуңғы осорҙа йыш ҡына: "Һинең һымаҡ һаңғырау, һуҡыр, телһеҙ, аҡылһыҙ кешегә ҡайһылай рәхәт, балаларыңдың үлемен дә белмәйһең бит, бәхетле йән...- тип һамаҡланы, - ғүмер буйы бер ҡайғы белмәнең, башыңды ахмаҡлыҡҡа һалып тик ултырҙың". Әбейенең ошо хәленә көнләшеп ҡарауынан, асыуынан, ғәрлегенән Ғәзимдең йөрәге ярылырҙай була, күҙенән субырлап йәш тама. Тик Нәфисә генә уның күҙенә ҡарамай, дөрөҫөрәге, ҡарарға тырышмай.

Ҡатынының хәлен аңлай, әлбиттә, Ғәзим. Өс ҡыҙын аяҡҡа баҫтырырға, уларҙы кеше араһында кәм-хур итмәҫкә тырышып, низәр генә эшләмәне. Төндә тыуғанды төндә алалар бит, төн йоҡоһон йоҡламай, көмөшкәһен дә һатты. Эскән ирҙәрҙең ҡатындарынан туҡмалып, түбә сәсһеҙ ҙә ҡалды, ауыл йыйылыштарында иң түбән һүҙҙәрҙе лә ишетте, әммә магазин кәштәһендә араҡы һатыла башлағансы эшен туҡтатманы. Һәр ваҡыт ҡыҙмаса йөрөгән ҡатынынан бөтөнләйгә китергә йөрәгәнендә, быға тиклем бер ҡасан да һаулығына зарланмаған Ғәзим, ҡаты ауырып, түшәккә йығылды.

Ауылдаштарының ҡарғышы, эскеселәр балаларының күҙ йәше, әсәләренең ҡаты рәнйеше төшмәй ҡалмағандыр, көмөшкәнән килгән килеме ҙур булһа ла, Нәфисәнең тормошо барыбер алға барманы. Өс ҡыҙы ла тыумыштан бер туҡтауһыҙ ауырыны. Әммә сир-сырхау тиҙ тейеп барған балаларын дауаханаға түгел, ә им эҙләп, төрлө бағымсыларға йөрөттө. Ысынлап та, им-том ярҙам иттеме, әллә ауырыуҙың үҙенең ваҡыты үттеме, үҫеп буй еткергәндә ҡыҙҙарының өсөһө лә сихәтләнде. Өшкөрөүсе-әмләүселәргә күп йөрөп, үҙе лә ноҡот һалырға, фал асырға, имләргә, күрәҙәлек итергә өйрәнеп алды. Әмәлгә ҡалғандай, китап магазины кәштәләрендә сихырсылыҡ серҙәре тураһында төрлө китаптар барлыҡҡа килде. Ниндәйҙәрен генә алып уҡыманы Нәфисә уларҙың. Тиҙҙән аҡ көстәрҙең, ҡара магияның серенә ныҡлап төшөндө һәм яҡшы килем килтергән яңы шөғөл тапты: йәш сағында эсергә яратыусылар сират торһа, хәҙер инде уның ишеген ике юл сатында юғалып ҡалғандар, икеләнгәндәр, яуапһыҙ мөхәббәт утында янғандар, бәхетһеҙҙәр, бәхетлеләр, парлылар, яңғыҙҙар, өлөшлөләр һәм өлөшһөҙҙәр ҡаҡты. Ярҙам һорағандарға ярҙам иттеме, уныһын Ғәзим белмәй, әлбиттә. Әммә шуны яҡшы аңлай: Нәфисә бик күптәрҙең тормошона инде. Бәхетлеләргә бәхетһеҙлек юраны, кеше яҙмыштарын сыуалтты, сейәлтте, өмөтһөҙлөккә бирелдерҙе, илатты, илертте. Ауырыуы сәбәпле, әбейенең гонаһлы эштәренә ҡаршы төшә алмағас, кеше бәхетһеҙлеген файҙаланып, алдап-йөлдап тапҡан малының ҡасан да булһа әжере төшәсәген яҡшы аңлаған Ғәзим уның өсөн тәүбәгә килеп, ярлыҡауҙар һорап, Аллаһы Тәғәләгә ялбарҙы. Тик ниңәлер ул, бөтә гонаһтары өсөн Нәфисә үҙе яуап бирер, тип уйлай ине. Ә бөтәһе лә киреһенсә булып сыҡты, уның ҡылғандарына балаларына яуап бирергә тура килде.

Им-том, әмәлләү эшенән изге рамаҙан айында ла туҡталып тормаған әбейенә булған ризаһыҙлығы, асыуы, әрнеүе, бер йылда бер түгел, өс балаһын юғалтыу ҡайғыһы бына нисә көн инде тамағына төйөр булып тығылды ла, үтмәй аптыратты Ғәзимде. Ҡәҙер кисе тип аталған изге бер төндә тамағын ҡырып ята торғас, нисәмә йыл өнһөҙ йәшәгәндән һуң ҡапыл тауышы сығып китте. Ҡыуанысынан әбейен саҡырҙы, янына килеүсе булмағас, тағы, тағы ҡысҡырҙы. Йоҡлап китһәм, тауышым юғалып ҡуйыр, тип, төнө буйы көйләп доғалар, Юғары көскә рәхмәт уҡыны. Шулай таң аттырҙы. Ә Ҡәҙер төнө әбейенең һуңғы төнө булғанын көн төшкә ауышҡас ҡына белде ул. Изге көндә гүр эйәһе була, тиҙәр. Был тормошта бер яҡшылыҡ ҡылмаһа ла, күңеле саф, таҙа булдымы икән Нәфисәнең, тип уйлап ҡуйҙы.

Ҡатынын һуңғы юлға оҙатырға килгән ауылдаштары хәләленең гонаһтарын һөйләргә баҙнат итмәһәләр ҙә, күңелдәренән генә уның яманлыҡтарын барлағанын аңлай Ғәзим. Ауырып йығылғас, үҙен егерме йыл ҡараған әбейе тураһында яман уйлағандарын теләмәне һәм бөтәһен дә ғәжәпкә һалып, талғын ғына һүҙ башланы:

- Динебеҙҙә яҡшы һәм яман ғәмәл ҡылғандарҙың артабанғы яҙмышы Ҡиәмәт көнө хөкөмө менән аңлатыла. Яҡшылыҡ ҡылған кешенең изге ғәмәлдәре лә, яманлыҡ эшләгән гонаһлыларҙың да эше онотолмай. Улар әҙәм балаһына үҙенә ниндәй юлдар менән булһа ла кире әйләнеп ҡайта. Кешеләр бер-береһен хөкөм итергә тейеш түгел, беҙ бөтәбеҙ ҙә - Аллаһы тәғәлә хөкөмөндә...

✓ ***Мәғлүмәтте 5-8 йәшлек саҡта балаға төшөндөрһәң, ул белем ғүмерлеккә һалына. Мәктәптә үткән күп белем онотолған. Ә бына өләсәйем 5 йәшемдә өйрәткән доғалар бер ваҡытта ла онотолмай. Ҡурай моңон да шулай һеңдереп була.***



ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

# ЫСЫН ҠУРАЙСЫЛАР...

## бармаҡ менән һанарлыҡ

**Ишмулла Дилмөхәмәтовтың "Һайра, әйҙә, һары һандуғасым", "Йылайыр буйы" һәм башҡа көйҙәре халҡыбыҙ күңелендә ҡабырсаҡ эсендәге мәрйендәй һаҡланған һымаҡ, ҡасандыр ул эшләгән, уйнаған ҡурайҙарҙы ла варистары күҙ ҡараһылай ҡәҙерләй. Хәйбулла районы Подольск ҡасабаһында йәшәүсе ҡурай яһау оҫтаһы Риф Дилмөхәмәтов - Ишмулла Дилмөхәмәтовтың бер туған ҡустыһының улы - беҙгә олатаһынан һәм атаһынан ҡалған үлән ҡурайҙарҙы үҙе яһаған семәрле һауыттарҙа ғына тотоуы тураһында бәйән итте. Риф Сәйфулла улы ҡурайҙы матур итеп яһай ҙа белә, был илаһи музыка ҡоралында оҫта һыҙҙыра ла икән. "Ҡурай эшләүе ауыр ул. Бының өсөн ҡул оҫталығы ғына етмәй - күңелеңдә моң булыуы ла шарт", - тине ул беҙҙең менән һөйләшкәндә. Уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**



➔ **Һеҙ ҡурай эшләргә, ҡурайҙа уйнарға кемдән өйрәндегеҙ?**

- Ҡурай уйнарға 6 йәшемдә өйрәндем. Олатайым Ишмулла, ҡартатайым Ишҡәле, атайым Сәйфулла - барыһы ла ҡурайсы булды. Халыҡта "Ишмулла ҡурай тартһа, ҡайһы бер үлән ҡурай сатнап киткән", тигән һүҙ бушҡа ғына йөрөмәй. Ысын ул. Ишҡәле ҡартатайым да, 2 метрҙан ашыу кәүҙәле бәhлеүән, шундай көслө ҡурайсы булған. Ошондай ҡурайсылар менән аралашып үҫкән бала инде мин һәм ҡурай тартырға ла бик иртә өйрәндем. Гәрсә, 4-5 йәшлек сағымда уҡ әбейҙәрҙе бейетеүем хәтеремдә. Ҡурай моңо бер тапҡыр ҙа тынмаған төбәктә тыуғанғамылыр, дәрт итеп, селек һындырып, уны ҡурай һымаҡ итеп ауыҙға терәп, бейеү көйҙәрен быжғылдатып көйләп, үҙемсә ҡурай "тарта" инем, оло-оло инәйҙәр, минең көйгә баҫып, бейеп китә торғайны. Ҡурай эшләү һөнәренә атайымдан өйрәндем. Атай мәрхүм нык оҫта кеше булды: ҡулынан килмәгән эше юҡ ине. Ул үлән ҡурайҙар эшләне. Уның янында ярҙамлашып йөрөп, балта оҫтаһы эштәренә, ҡурай эшләргә һәм башҡа һөнәрҙәргә өйрәндем. Әле ике йәшлек улыма ла, ҡурай бирһән, дәртләнеп, үҙенсә "уйнап" ебәргән була. Ҙурайғас, ул да ҡурай уйнар, минә ярҙамсы булыр, Алла бирһә. Тағы өс йондоҙом - өс ҡыҙым бар.

➔ **Күреүебеҙсә, һеҙ ҡурайҙы үләндән дә, фанеранан да эшләйһегеҙ. Ауыл ерендә өй шарттарында шпон ҡурайҙарҙы эшләү бик ауырға төшмәйме?**

- Шпон ҡурайҙы эшләү өсөн оҫтаханаң булыуы шарт. Өйҙә генә эшләү зарарлы: елеме, саңы тын юлдарына зыян килтерә. Минең оҫтаханам бар, эш ҡоралдарым да етерлек. Ҡурайҙы төрлө ағастарҙың шпондарын тәрәү ысулы менән яһайҙар. Үҙемә йыла, сит илдәрҙә үҫкән сапеле, бук, макоре тигән ағастар менән дә эш итергә тура килә. Был ағастарҙы Өфөгә - Мәскәүҙән, Мәскәүгә башҡа ҡалаларҙан алып киләләр. Өфөгә шылтыратһам, улар кәрәкле ағасты минә ебәрә. Һәйбәт ҡурай эшләү өсөн кәмендә 3-4 көн кәрәк. Ҡабаланып эшләнһә, тиҙерәк тә эшләргә була, әммә ул сағында ҡурай сифатлы булмай. Тағы, ҡурай моңло булһын өсөн күңелеңдә моңоң булыуы шарт.

➔ **Моң тигәндәй, ҡурайҙы дөрөҫ уйнау традицияһын ныҡлы һаҡлаған ғаиләнән сыҡҡан кеше булараҡ, әйтегеҙ әле: бөгөнгө ҡурайсылар уйнаған сақта халыҡсан стилде һаҡлаймы?**

- Ҡайһы бер ҡурайсыларҙың ҡурайҙы флейтаға әйләндереп ебәреүен иҫәпкә алмағанда, ысын ҡурайсы тип атарлыҡтары бар. Шулай ҙа ҡурайсылар күккәккә, аңҡауға һалып уйнауҙы онотоп бара һымаҡ. Быны бөтөрһәк, ҡурай тигән исем дә бөтәсәк икәнен уларҙың хәтеренә төшөрөргә ине. Ҡурайсымын, тип кем генә әйтмәй бөгөн. Минә ҡалһа, ысын ҡурайсы кәмендә 200 башҡорт халыҡ көйөн, уның тарихын яттан белергә бурыслы. Ысын ҡурайсылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Иң беренсе - Юлай Ғәйнетдинов. Уның алдына билет рәүешендә бер-нисә йөҙ йыр һал - барыһын да уйнаясаҡ, тарихын да һөйләйәсәк. Азат Айыҫҡолоевты, Аҡъярҙан Илдар Юнысовты, Рәйес Низаметдиновты, Роберт Юлдашевты һәм Мөхәмәт Түләбаевты ысын ҡурайсы, тип әйтә алам. Был ҡурайсылар эшен дауам итеүсе бер төркөм йәштәр барлығы ла күңелде йылыта. Форсаттан файҙаланып, Юлай ағайҙың ҡурайсылар конкурстарында билет ярҙамында һынау ысулы индереүен хуплайым. Ҡалған конкурстарға ла нигеҙ итеп алынһын ине ул. Юғиһә, 5-6 көйҙә генә ятлап, шул көйҙәрҙә генә уйнап, ҡурайсы булып иҫәпләнгән кешеләр ҙә осрай бит. Үрҙә әйтелгән конкурстарға әҙерләнгән саҡта йәшерәк, тәжрибәне яңы туплай ғына башлаған ҡурайсылар көйҙәрҙе, уларҙың тарихын белеүгә етдиерәк ҡарай башлар, тигән ышаныс барлыҡҡа килде хәҙер. Беҙҙең тоҡомда бик етди әҙерлек үткәс, ғүмер буйы белем, моң туплағас, 45-50 йәштәрҙә генә ҡурайға киләләр. Минә быйыл 45 йәш тулды, күкрәгемдең асылыуын, сәхнәгә сығырға әҙер икәнлегемде яңыраҡ ҡына тойҙом. Ваҡыт үтеү менән халҡыбыҙ моңо онотолмаһын тиһәк, балаларыбыҙҙы моң мөхитендә тәрбиәләргә тейешбеҙ. Кәрәкле мәғлүмәтте 5-8 йәшлек саҡта балаға төшөндөрһәң, ул белем ғүмерлеккә һалына. Мәктәптә үткән күп белем онотолған. Ә бына өләсәйем 5 йәшемдә өйрәткән доғалар бер ваҡытта ла онотолмай. Ҡурай моңон да шулай һеңдереп була балаға.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Моң - ул Хаҡ Тәғәлә тауышы түгелме ни? Халҡыбыҙ моңо яңғырап торһа, йәмғиәтебеҙҙә һәйбәт кешеләр ҙә күберәк булыр. Башҡорттар араһында диндә бар тулылығында тоткан кешеләр һирәк булыуына аптырарға кәрәкмәйҙер - халҡыбыҙ үҙенең моңо ярҙамында илаһи йән менән аралашалыр, бәлки. Һәр хәлдә, Риф ағай менән әңгәмә беҙҙе ошондай уйҙарға алып килде.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
әңгәмәләште.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

*Гүзәл СИТДИҠОВА*

## МИЛЛӘТТӘШТЕҢ ҠӘҘЕРҘӘРЕН БЕЛГӘНЛЕКТӘ...

Милләт тиеп һүҙ һөйләүҙән арымайбыҙ,
Шуны һөйләп ни хәлдәргә тарымайбыҙ,
Тик нимәне аңлата һуң милләт тигән,
Инде быны аңларға ла мөлләт* тиһәң?
Бер тупраҡта йәшәгәндәр туғаныңмы,
Кеме яҡын - үҙ ереңдән ҡыуғанымы?
Туғаныңдыр - шул тупраҡты һаҡлашҡандар,
Дошман килһә, арҡалашып яҡлашҡандар.
Кем генә юҡ хәҙер беҙҙең тыуған ерҙә,
Һанай китһән, ҡәүемдәре мең дә бер ҙә.
Әммә былар башҡорт түгел, бары яҡташ,
Еребеҙҙә тороп яткан бер тупраҡташ.
Бәлки, милләт һаналалыр ҡандаштарың,
Ҡаны бер тип уйланылған һандаштарың?
Тик фән таный: ҡаны берҙәр донъя тулы,
Мәгәр күбе башҡортомдоң түгел улы.
Тел, тел тибеҙ, мөһимлеген беҙ беләбеҙ,
Тел белмәй тип ҡай сағында тибеләбеҙ,
Тик милләт ул телдә генә аңлатамы,
Башҡортсаны белгән урыҫ - үҙ атаңмы?
Мосолмандар һәммәһе бер өммәт тиҙәр,
Ни ҡан булһын, бер-беренә ҡиммәт, тиҙәр,
Өммәтебеҙ бер булһа ла милләт башҡа,
Тамырыбыҙ береккән бит Урал ташҡа.
Берәм-берәм теҙеп сыҡтым кем тип башҡорт,
Дурт тераккә нигеҙләнгән беҙҙең баш йорт,
Милләт бит ул тәү сиратта - ер берлеге,
Ҡанбабаның быуат-быуат ҡәберлеге.
Икенсеһе - ошо ерҙә ҡандаш булыу,
Күп ырыуҙы бергә ҡушҡан хан баш булыу.
Быуат-быуат бер һандалда сүкелгәнлек,
Арҡалашып һынауҙарҙы үтелгәнлек.
Өсөнсөһө, һис шөбһәһеҙ, әсә теле,
Бер күс итеп ойошторған йәшәү теле,
Күҙәнәккә инеп биргән аң-зиһендә,
Телең менән танытаһың һин илеңдә.
Дуртенсеһе - булыуың бер инаныста,
Бер ҡиблалыҡ - милләт өсөн ҡыуанысҡа,
Унырбыҙ тик төрлө дингә ҡатышмаһаҡ,
Аҡкош, суртан, ҡыҫалалай тартышмаһаҡ.
Булыр, шикһеҙ, төрлө яҡҡа ҡайырғандар,
Һин ҡара тип, һин һары тип айырғандар,
Онотмайыҡ - ҡөҙрәт бары берҙәмлектә,
Милләттәштең ҡәҙерҙәрен белгәнлектә.

**Мөлләт - мөҙҙәт, ваҡыт.*

*Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ*

## УҢАЛЫРМЫ СЕБЕР ЯРАҺЫ?

*...Минең яфа сиккән Себерҙәрҙән*
*Ҡайтарығыҙ анау уландарҙы...*
*(Әхмәр Үтәбай "Мин - Буранбай" поэмаһынан)*

"...Әйҙә, теттер, уйна ла көл,
Заман - үҙебеҙҙеке!
Ебәрһәләр - Себер булыр,
Себер - үҙебеҙҙеке!"

Шулай йырлашалар ине
Элегерәк ағайҙар.
Улар йырлағанын тыңлап,
Ғәжәпләндек малайҙар:
Ниңә улар Себер ерен
"Беҙҙеке" тип һанайҙар?

Бер аҙ йәшәп, донъя йөгөн
Индә татып ҡарағас;
Донъя гиҙеп, йөрөй-йөрөй,
Сит яҡтарҙан арығас;
Тормош тәжрибәһе йыйып,
Мең бәләгә тарығас...

Сынлағандай булды шул саҡ
Буранбайҙың быуауы.
Аталары Себер киткәс,
Балаларҙың илауы.
Йырҙа яткан кинәйәнең
Мәғәнәһен аңланым.

Үҙ итергә Себер ерен
"Өйрәткәндәр" халҡымды.
"Беҙҙеке" тип "яратырға"
Йән тундырғыс һалҡынды.
Себер генә тундырамы
Йөрәктәге ялҡынды?

Сабыр халҡым Себерҙәрҙең
Ыҙаһына сыҙаған.
(Сөнки белгән, Хоҙай уны
Шул рәүешле һынаған).
Үҙен-үҙе йыуатырға
Шундай йырҙар сығарған...

Әле лә бит көн итмәккә
Китә замандаштарым.
Улар китә һыуыҡ яҡҡа,
Йылы яҡҡа - ҡоштарым.
Ҡайҙа ғына олаҡмайҙар:
Нижневартовск, Когалым...

Үкенесе: илен ташлап
Китә фәҡәт уңғандар.
Уңған, сибәр ҡыҙҙар китә,
Донъя көтәр уғландар.
Улар менән Себерҙәрҙең
Ҡалалары тулғандыр...

Бөгөләре ғүмерлеккә
Тороп ҡала Себерҙә.
Улар китә шунда ҡалып,
Шунда ятып серергә.
Киләсәктә кемдәр йәшәр
Уралтауҙа, был ерҙә?

Себер - халҡым йөрәгендә
Мәңге һыҙлар яралыр...
Яраларҙы уңалтырлыҡ
Табылырмы сараһы?
Йырың менән кәртә ҡуйсы,
Эй, Буранбай бабабыҙ!

✓ *Совет осороноң яҡшы яғы бөтөнләй булманымы ни? Мин гел яҡшы булды, тимәйем - тормош булғас, хаталар ҙа, ауыр ваҡыттар ҙа булды. Артығын шаштырыуҙар ҙа. Һәр хәлдә, халыҡҡа эш бар ине. Был - иң мөһиме.*



ИНТЕРНЕТТАН



## КӘРӘКЛЕ МИКРОЭЛЕМЕНТ

■ Medical News Today порталы белгестәре белдереүенсә, көн һайын әфлисун ашау тиренең торошон яҡшыртып ҡына ҡалмай, артериаль ҡан баҫымын, нервы системаһы эшмәкәрлеген яйлай. Әфлисун С витаминының көндәлек нормаһын тулыландыра. С витамины коллаген синтезы, тимәк, тире һәм ҡан тамырҙары сәләмәтлеге өсөн кәрәк. Әфлисун составындағы төрлө антиоксиданттар менән бергә С витамины тирене ҡояштың зыянлы тәьҫиренән, тирелә һырҙар барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. Бынан тыш, әфлисундағы холин йәки В4 витамины нервы күҙәнәктәренә файҙалы, ул организмдағы май әйләнешен яйға һала. Калий, В6 витамины, рибофлавин, ниацин, фолаттар, пантотен кислотаһы, фосфор, магний, баҡыр, селен әфлисундың файҙаһын тағы арттыра. Диетологтар иҫәпләүенсә, даими ҡулланғанда, был емеш инфаркт, инсульт һәм яман шеш ауырыуҙары хәүефен түбәнәйтә. Шуға ла аллергия булмаһа, һәр көн иртәнге ашҡа мотлаҡ әфлисун өҫтәгеҙ.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профилактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йогонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәнә, медитация былдай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә. Ғөмүмән, медитация барыһы өсөн дә файҙалы, даими шөғөлләнгәндә, кәйефегеҙ ҙә гел күтәренке буласаҡ, ихтыяр көсөн нығытасаҡһығыҙ, хатта хәтерегеҙ яҡшырасаҡ. Иртән 15-20 минут ҡына тынлыҡта, бер нәмә лә уйламай ғына ултырып тороу яңы көнгә әҙерләй, ә кисен бар кире энергиянан азат итә.

■ Күңел һалып эшләнгән эш иң негатив факторҙы - хроник стресты булдырмай икән. Быны 2600 кеше ҡатнашлығында үткән тикшеренеүҙәр күрһәткән. Техас штаты ғалимдары фекеренсә, етмәһә, ижади ҡарашлы кешеләр, ҡағыҙа булараҡ, яҡшыраҡ йоҡлай һәм дөрөҫөрәк туҡлана. Аҡыл талап ителгән, ҡатмарлы мәсьәләләр хәл итергә тура килгән һөнәр эйәләре ауыр физик йөкһә уйлау талап ителмәгән ерҙә эшләүселәргә ҡарағанда үҙҙәрен йәшерәк тоя икән, уларҙың һаулығы ла нығыраҡ була.

■ Әгәр ҙә һеҙ оҙаҡ йәшәргә һәм үҙегеҙҙең йәшегеҙҙән йәшерәк күренергә теләһәгеҙ, селенға бай ризыҡтар менән туҡланығыҙ. Немец ғалимдағы иҫбатлауынса, тап ошо микроэлементтың аҙ булыуы яман шеш үсеше хәүефен барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ организмда ҡартайыу процестарын тиҙләтә. Берлин клиникаһының эксперименталь эндокринология институты ғалимдары менән Брауншвейгтағы Техник университет белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡандағы селенопротеин аҡһымы башҡа аҡһымдар буленеүҙә ҙур роль уйнай. Һуңғылары организмды ирекле радикалдарҙан һаҡлай, шуға ла селенопротеиндың түбәнәйеүе шулта уҡ насар эҙемтәләргә килтерә. Шулай уҡ ирекле радикалдарҙан һаҡланмаған организм тиҙ ҡартая. Бөгөнгә көнгә селен сығанағы булып аҙыҡ-түлек тора, уларға йомортҡа һарыһы, спаржа, бәшмәк, кукуруз, бразиль сәтләүектәре инә.

ЕҢЕҮСЕЛӘР ХӘТИРӘҺЕ

# ЮҒАЛЫП ҠАЛМАЙЫҠ БЕРҮК...

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн "Ҡыҙыл Байраҡ", "Ҡыҙыл йондоҙ" ордендары менән наградланған Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Дәрүиш ауылының данлыҡлы аҡһаҡалы, күп йылдар етәксе урындарҙа эшләүсе ауыл хужалығы алдынғыһы, әле Ҡоншаҡ ауылында йәшәүсе Сөнәғәт Ҡунаҡкилде улы Яҡупов.**



Валерий Ҡаһармановтың туғыҙынсы тиҫтәһен ваҡлаған ошо ветеран тураһында яҙған китабында һуғыш хәлдәре лә, тыныс тормош хәлдәре лә сағыу һүрәтләнә (В. Кагарманов. "Солдат. Хлебороб. Руководитель"). Шуларҙың береһе бәҙҙе айырыуса тетрәтте. Германияның Фюрстенвальде ҡалаһында Сөнәғәт Яҡупов дошман танкыһына бер үҙе тиерлек ҡаршы тороп, еңеп сыға. Был турала бына нимә яҙа автор: "Һуғыш аҙағына яҡынлаша, барыһының да кәйефе күтәренке. Асфальт юлдар өҫтөнән күтәртеп һалынған тимер юл үткәргесе - күпер аҫтында нимәлер шәйләнгәнен күреп, командирына был турала әйткәс, взвод командиры орудие расчеты командиры Яҡуповҡа: "Һиңә генә шулай тойола ул", - тип, ҡул һелтәй. Күпмелер ваҡыттан һуң теге күпер аҫтынан фашист танкылары килеп сығып, ата-ата, тар ҡала урамдарында торған совет һалдаттары яғына килә башлай. Улар артынан пехота ла килгәне күренә. Фашист танкыһы атҡан бер снаряд взводтың икенсе орудиеһына килеп тейеп, уны селпәрәмә килтерә. Расчет та һәләк була. Шул ваҡыт сержант Яҡупов үҙенең орудиеһын дошман килгән яҡҡа ҡаратып бороп, ярсыҡлы снаряд менән бер юлы һигеҙ дошман яугирын ҡырып һала. Артабан фугаслы снаряд менән бер тимер "аждаһа"ны туҡтата. Был яу ҡала урамында барғанға күрә, немецтар ҙа, совет һалдаттары ла "ус төбөндә" генә күренә. Ике яҡ та бер ниндәй "маневр" эшләй алмай: урын тар. Был дуэлде биноклдән күреп, беҙҙең яҡ командирҙары һалдаттарына ярҙамға танкылар, үҙйөрөшлө артиллерия ҡоролмаларын сығара. Ә быға тиклем Яҡуповҡа бер пехота лейтенанты үҙенең бер-нисә һалдаты менән ярҙамға килеп, снарядтар ташыша. Яҡупов төҙәй ҙә ата, төҙәй ҙә ата. Һөҙөмтәлә, беҙҙең машиналар килгәнсе, фашистар бер урында тапана - алға бара алмай. Шулай ҙа бер танк атҡан снаряд Яҡуповтың янына килеп төшөп, шартлап өлгөрә. Ауыр яраланып, һушын юғалтыуы арҡаһында Сөнәғәт Яҡупов был яуҙың аҙағын хәтерләмәй. Ҡыйыу артиллеристың батырлығын штаб офицерҙары баштан аҙағынаса күреп тора. Һөҙөмтәлә, егетте Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлау тураһында указ килә..."

Былтыр ноябрь тирәһендә Сөнәғәт олатайҙы Өфөнөң 42-се урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләүсе ейәнсәре Әлиә Урал ҡыҙы ҡунаҡҡа - Яҡуповтарҙың шәжәрә байрамына саҡырған икән. Данлыҡлы ветеран менән шунда осраштыҡ һәм теремек зиһенле олатай менән бер аҙ әңгәмәләшеп алыу бәхетенә өлгәштек.

➔ **Сөнәғәт олатай, беҙ һеҙҙе, һеҙҙең быуын кешеләрен геройҙар, батырҙар быуыны, тип беләбеҙ. Һеҙҙең индәргә замандың иң ауыр йөгө төшкәнен дә аңлайбыҙ. Ә Бөйөк Ватан һуғышында, һуғыштан ҡайтҡас, үҙегеҙҙе герой тип һананығыҙмы?**

- Юҡ, улым, беҙ, һәр хәлдә, мин үҙемде геройман, тип йөрөмәнем, әле лә ундайҙар рәтенә ҡуймайым. Ни өсөн тигәндә, беҙ барыбыҙ ҙа Ватаныбыҙҙа ҡурҡыныс янағанда үҙ бурысыбыҙҙы ғына үтәнек - уны фашист илбаҫарҙарынан азат иттек. Был - минең өсөн ҡәҙимге хәл. Һәр егет өсөн ҡәҙимге бурыс ул - Ватанды һаҡлау.

➔ **Тик бөгөн күптәр әрмегә бармауҙы хуп күрә. Һаулыҡтары насар булыуы арҡаһында бара алмағандар тураһында әйтмәйем, ә сәләмәтлеге яҡшы булып та, аңлы рәүештә әрме хеҙмәтенән "ҡасҡан" ҡайһы бер иптәштәр тураһында әйтәм. Ундайҙарға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек? Белеүебеҙсә, элегерәк ҡайһы хеҙмәткә мөнәсәбәт икенсе булған, егеттәр мөҡәддәс бурысын атҡарырға атлығып торған, тиҙәр. Ә бөгөн ниңә хәлдәр ҡырҡа үҙгәреп китте икән?**

- Был турала уйлаһам, иҫем китә. Башҡортостанда нисектер, ә беҙҙең Силәбелә, айырым Ҡоншаҡта - хәлдәр мөшкөл. Әле быны Ҡоншаҡта көҙгө саҡырылыш ваҡытында әрмегә китергә тейешле 45 кешенән 6 егет кенә килгән, тинеләр. Беҙҙең заманда әрмелә хеҙмәт итеү үҙе батырлыҡ һаналды, балалар үҙҙәре көсләшеп, әрмегә китә ине... Минә ҡалһа, гәйептең тос өлөшө дәүләттең үҙендә. Үткән тормошто, беҙҙең "башлыҡты" - Сталинды артығыраҡ яманлап, илдең саҡ нығынып килгән билен биртендерҙек. Сталин үлгәндән һуң үткән 1953 йылғы данлыҡлы сентябрь пленумында Хрущевтың сығышы менән һалында был күренештең нигеҙе. Сталиндың бөтөн эшмәкәрлегенә ҡара яғылды, фәһем алырлыҡ, өйрәнерлек тәжрибәләр иҫәпкә алынманы. Ҡытайҙар үҙҙәренең Мао Цзэдунын бер аҙ тәнҡитләнелә, уның башлаған эштәрен дауам итте. Сөнки улар тарихтан ғибрәтен дә, фәһемен дә, тәжрибәһен дә ала белде. Совет осороноң яҡшы яғы бөтөнләй булманымы ни? Мин гел яҡшы булды, тимәйем - тормош булғас, хаталар ҙа, ауыр ваҡыттар ҙа булды. Артығын шаштырыуҙар ҙа. Һәр хәлдә, халыҡҡа эш бар ине. Был - иң мөһиме.

Тағы бер мәсьәләне күтәрмәй булдыра алмайым. Башҡортостанда нисектер, белмәйем, әммә беҙҙең районда мәктәптәрҙе ҡыҫҡартҡан, япҡан, балаларҙы икенсе ҙурыраҡ мәктәпкә ташыған булалар. Элек мин бала саҡта беҙҙең бәләкәй генә ауылда мәктәп асылар. Ә хәҙер, киреһенсә, мәктәптәрҙе ҡыҫҡартабыҙ, белемде күберәк итеп бирәбеҙ, имеш. Был фекер менән һис кенә лә килешеп булмай.

➔ **Ватансылыҡ тойғоһо ниҙән ғибрәт? Нимә ул патриотлыҡ?**

- Патриотлыҡ - ул үҙ иленә ыңғай ҡарашың булыуы. Иленә хеҙмәт иткән кеше генә үҙен патриот тип атай алалыр. Мин Ҡарабашта ФЗО-ла забойсы һөнәрен үҙләштерҙем. Уны тамамлағас, беҙҙең курс егеттәрен тотошлай йүнәлтмә буйынса Алыҫ Көнсығышҡа эшкә ебәрҙеләр. Һуғыш башланыуын поезда ишеттек. Читаға килеп төшһәк, вокзал тулы һуғышҡа алынған егеттәр. Уларҙы оҙатыу, илау-һыҡтау күренешенә шаһит булдыҡ. Эш урыныбыҙға килеп етеп, шахтала эш башланыу менән кистәрен беҙҙе лә хәрби күнекмәләргә йөрөтә башланылар. Фронтҡа 1943 йылда ғына барып индек. Ә уға тиклем ентекле хәрби әҙерлек үттек. Бер ниндәй шарттар ҙа булманы. Иркутскиға алып барҙылар, дүрт рәтле оҙон землянка. Оҙонлоғо 40-50 метр булғандыр. Иҙән юҡ. Ике ҡатлы, дүрт рәт булып теҙелеп китҡән ҡаҡ һикеләрҙә йоҡланыҡ. Һикенең өҫтөнә ҡамыш, күрән йәйеп, өҫтөнә палатка ябып, ҡағып ҡуйҙыҡ. Бына шундай "унайлыҡтар" ине ул саҡта. Ҡалғаны - үҙеңдең шинелең дә, үҙеңдең бушлатың. Сылғауҙы үҙебеҙҙең аҫтыбыҙға һалып киптерә торғайныҡ. Ошондай шарттарҙа сыныҡтыҡ, үттек. Бирешмәнек, еңелмәнек. Ә хәҙер йәштәр хөкүмәттән ниндәй генә унайлыҡтар талап итмәй! Шуныһына иманым камил - илде ниндәй генә шарттарҙа ла һаҡлау зарур. Һәр ваҡыт еңел дә, һәр ваҡыт ауыр ҙа булмай ул.

➔ **Бөгөн һуғыш ветерандарына күрһәтелгән хәстәрлектән ҡәнәғәтһегеҙме? Ғөмүмән, һеҙҙе ниҙәр борсой?**

- Шәхсән үҙем тормош яғынан мохтажлыҡ кисермәйем. Пенсия етерлек, балаларға ярҙам итеү мөмкинлеге лә бар. Тик быны был эскелек, быны был эшһеҙлек күренештәре, әлбиттә, мине нык борсой. Элек эш хаҡы аҙыраҡ булһа ла, беҙ барыбыҙ ҙа эшле инек. Әйтәйек, совхоз директоры ла, иҙән йыуыусы ла - бер исемлектән эш хаҡы ала инек. Кешеләр бер-береһенә иттибарлы, ярҙамсыл ине. Хәҙер ундай мөнәсәбәт юҡ. Ветеран булараҡ, ҡасандыр илгә ошондай тормош килерен көтмәгәйнем. Ә шулай ҙа юғалып ҡалырға ярамай инде. Үҙебеҙҙе милләт булараҡ юғалтмайыҡ, туған телде, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, мәҙәниәтте һаҡлайыҡ.

**Иҙел РӘХИМОВ**
**әңгәмәләште.**

✓ *Әңгәмә барышында бәхәс тә тыуырға мөмкин. Үҙегеҙҙең хаҡһыҙ булыуығыҙҙы аңлаған осраҡта, үҙ хатағыҙҙы таныу һеҙҙе башҡалар алдында бермә-бер күтәрәсәк һәм ситуацияның конфликтҡа тиклем барып етмәүенә юл асасаҡ.*



ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

# МЕЙЕС

**Күптән инде мейес яҡмайбыҙ. Бөтәһе лә зәңгәр яғыулыҡҡа күсеп бөткәс, өйҙөң ҡото, йылыһы булған аҡ мейестәр берәм-берәм емерелде. Ҡалһа ла, йә усаҡлыҡта, йә мунсала ғына ҡалды мейестәр. Ҡышҡы һыуыҡ кистәрҙә мейес яғып тороп, ут эргәһендә йылыныуҙар йылдар үтә килә һағындырып та ҡуя әле ул.**



Шартлап янған утҡа, ял-ҡойроҡһоҙ ялҡынға ҡарап ултырһаң да, тынысландыра, борсолоуҙарҙы тарата (замана психологтары тауыш ярҙамында дауалауҙа ут тауышын да файҙалана, яман төштө лә "утҡа һөйләп" баҫырға кәңәш итә бит). Шуға ла аҡ мейестәрҙең юҡҡа сығыуы хәүефләндерә барыбер. Усаҡтың кешеләрҙе берләштереүсе көсө лә бар бит. Ғаилә усағы, күңел усағы, өй ҡото тигән төшөнсәләр шул хаҡта һөйләйҙер, тип уйлайым.

Мейес сығарыуҙың да үҙ тәртибе, үҙ ҡағиҙәләре булған. Уны теләһә кемдән сығартмағандар. Кешенең кемдән мейес сығартыуына ҡарап, киләсәге нисек булырын да күҙаллағандар. Унан һуң, ир-егет әҙерләгән утын сифатына ҡарап, өй хужаһы хаҡында фекер йөрөткәндәр. Хәйер, был әле лә шулай. "Утыны ла юҡ", "Утыны эре ярған", "Утыны сей" тигән һүҙҙәр, "Утынды эре ярма, кәләшең йәмһеҙ булға", "Дөрләтерлек утыны юҡ", "Ерек утын яҡма, еңгә ҡатын алма: ерек утындың йылыһы юҡ, еңгә ҡатындың ҡыҙыуы юҡ", "Ҡатынды мыжыҡ ир, илаҡ бала һәм сей утын ҡартайта" кеүек тапҡыр һүҙҙәр, хөрәфәт-тыйыуҙар халыҡ телендә әле булһа йөрөй.

Мейес - өйҙө йылытыусы (бөтә мәғәнәһендә) сығанаҡ икәненә иманым камил. Бала саҡта атай ут яға ла, мейесте ҡарап торорға алайыма ҡушыр ине. Аратирә беҙгә лә тәтей ут ҡарау бәхете. Мейес ҡапҡасын сепрәк менән тотоп асып, тәртешкә менән болғатып ебәреү, ут янып бөткәс, йүшкәне тығыу ололоҡ билдәһе кеүек тойола ине. Мин ҡарайым да мин ҡарайым, тип йүгерешеп, ҡушҡан бер эште еренә еткереп эшләп, тыңлаусан, ауаплы булырға тырыша торғайныҡ...

Мейесле бала саҡ һағындыра шулай ҙа. Мейес тирәләй теҙелешеп ултырып йылынаһың, бергәләшеп шартлатып тороп ҡурмас ҡураһың, ут һүрелгәс, әсәй һөткә генә ҡамыр баҫып, сөсө икмәк ултырта, беҙ ҙә ус аяһындай ғына ҡамыр киҫәктәре һорап алып, түрләндереп, эсенә ит йә картуф һалып, йә өҫтөнә шәкәр һибеп, ҡалай ҡапҡасҡа бәләкәс кенә икмәк ҡуябыҙ, бешеп сыҡҡас, өйгә унын тәмле еҫе тарала. Ҡалған көлгә картуф күмәһең, суйын сүлмәккә итен, картуфын, кәбеҫтәһен турап һалып, мейес төбөнә быҡтырырға ултыртаһың. Ҡайҙалыр үткәндә ҡалды ла ҡуйҙы ошо күңелле күренештәр...

Был уйланыуҙар ҡайҙан килеп тыуҙы әле? Бер көндө иремә бер дуҫы килеп, байтаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Үҙ эшем менән булһам да, һөйләшеүҙәре ҡолаҡҡа салынып ҡуя: "Усаҡлыҡ эшләп, матур итеп тороп ҙууур мейес сығарып, өҫтөнә ҙуур ҡаҙан ҡуйырға хыялланам, - тип тәмләп һөйләй ҡунаҡ. - Көн дә булмаһа ла, ял ваҡытында рәхәтләндереп ут яғып ебәрәһең, ҡаҙан тултырып ит һалаһың, аш бешерәһең, шунан ашты ҡаҙаны менән өҫтәлгә ҡуйып тороп, һыйланаһың... Хәтәр бит!"

Хәтәр шул! Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ҡына түгел, аҡ мейестәр ҙә һаҡланыуы тағы ла яҡшыраҡ...

**Айгөл АРЫҪЛАНБӘКОВА.**

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни телмәр мәҙәниәте тураһында

**Телмәр этикаһы - кешенең дөйөм мәҙәниәтен билдәләүсе төп күрһәткестәрҙең береһе. Шуға күрә уңышҡа ынтылған һәр кем үҙ телмәре өҫтөндә әүҙем эшләй. Телмәр мәҙәниәте һөйләшеүҙә хаталар ебәреүҙән ҡасыу осталығына ғына ҡайтып ҡалмай, ә һүҙлек запасын даими байыҡтырыуҙы, әңгәмәләшеңде тыңлай һәм ишетә белеүҙе, уның фекерен ихтирам итеүҙе, һәр осраҡта ла урынлы һәм кәрәкле һүҙҙәр таба белеүҙе үҙ эсенә ала.**

● Телмәр мәҙәниәтенә ярашлы, әңгәмәләшкә баҫым яһау ҡәтғи тыйыла. Үҙ фекереңде көсләп тағырға тырышыу йәмһеҙ генә түгел, ә йөғөнтөһөҙ ҙа. Бындай аралашыу алымы икенсе кешелә баҫымдан һаҡланыу реакцияһын тыуҙырасаҡ һәм, иң яҡшы осраҡта, әңгәмә туҡтаясаҡ. Ә иң насар осраҡта ниндәйҙер етди ҡапма-ҡаршылыҡҡа тиклем барып етеүе бар.

● Әңгәмә барышында икенсе кешене тыңламау, уның һүҙен бүлдереү кешелә телмәр мәҙәниәтенең юҡлығын ғына күрһәтмәй, ә башҡаларға ҡарата ихтирам булмауын да сағылдыра. Шуға күрә, әңгәмәләшенең фекерҙәренә һәм һүҙҙәренә иғтибарлы булған кеше йәмғиәт тарафынан һәйбәт ҡабул ителәсәк һәм төрлө донъяуи хәлдәрҙә уңышҡа өлгәшәсәк.

● Әңгәмә барышында бәхәс тә тыуырға мөмкин. Үҙегеҙҙең хаҡһыҙ булыуығыҙҙы аңлаған осраҡта, үҙ хатағыҙҙы таныу һеҙҙе башҡалар алдында бермә-бер күтәрәсәк һәм ситуацияның конфликтҡа тиклем барып етмәүенә юл асасаҡ. Аралашыуҙа күпнүҙлелектән ҡасығыҙ. Һәр саҡ ҡыҫҡа, аңлайышлы һәм теүәл итеп һөйләшергә тырышығыҙ.

● Телмәр төрләлөгәнә ынтылығыҙ. Һәр аныҡ әңгәмәлә шул өлкәгә ҡағылышлы һүҙҙәрҙе генә ҡуллана белеү, теманан ситкә китмәү, иғтибарҙы башҡа төрлө мәсьәләгә йүнәлтергә тырышыуҙан ҡасыу телмәр мәҙәниәте тураһында һөйләй - ошоға ынтылығыҙ.

● Төрлө кешеләр менән дә уртаҡ тел табырға өйрәнегеҙ. Әңгәмәләшегеҙҙең үҙен нисек тотоуына ҡарамаҫтан, үҙегеҙҙең телмәр мәҙәниәте тураһында онотмағыҙ һәм әҙәпле булығыҙ.

● Бер ҡасан да тупаҫлыҡҡа тупаҫлыҡ менән яуап ҡайтармағыҙ - үҙегеҙҙе тәрбиәһеҙ кеше кимәленә төшөрмәгеҙ.

● Әңгәмәләшегеҙгә һәр саҡ иғтибарлы булығыҙ, уның фекерен тыңларға һәм уйҙарының йүнәлешенә ярашлы "барырға" өйрәнегеҙ. Уның һорауын бер ҡасан да яуапһыҙ ҡалдырмағыҙ.

● Әңгәмә барышында хис-тойғоларығыҙҙың зиһенегеҙҙән өҫтөн сығыуына юл ҡуймағыҙ. Һәр ваҡыт үҙегеҙҙе контролдә тоторға өйрәнегеҙ.

● Телмәрегеҙҙә әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе ҡулланыу кеүек түбәнселеккә төшмәгеҙ. Бындай телмәр бер кемде лә биҙәмәй, киреһенсә, кешене ситләштерә.

● Бер йәки ике әңгәмәләш менән ҡорған әңгәмәнән айырмалы рәүештә, ҙур аудитория алдында сығыш яһау күпкә ауырыраҡ. Әйтер һүҙегеҙҙең күп халыҡ тарафынан ҡабул итеп алыныуына өлгәшеү өсөн бер-нисә ябай ғына телмәр мәҙәниәте ҡағиҙәләрен онотмау ярҙам итәсәк:

● Ҙур аудитория алдында сығыш яһау өсөн алдан ентекле план төҙөгөҙ, телмәрегеҙҙең иң мөһим өлөштәрен айырым тезистарға бүлеп сығығыҙ

● Сығыш яһағанда өгөтләү тоны ҡулланыуҙан ҡасырға тырышығыҙ

● Телмәрегеҙгә тере хистәр һалығыҙ. Ҡаралған мәсьәләгә ҡарата вайымһыҙ булмауығыҙҙы күрһәтеү өсөн дөрөҫ интонация һайлау мөһим. Бар күңелегеҙҙе һалып, ләкин шул уҡ ваҡытта ябай һәм мәғлүмәтле итеп һөйләүегеҙ тыңлаусыларҙа яҡшы тәьҫир ҡалдырасаҡ һәм телмәргә ҡарата иғтибарҙы арттырасаҡ

● Бик йыш ҡулланылған һәм барлыһын да арыу ғына ялҡытҡан тапалған һүҙҙәрҙе ҡулланыу аудиторияның "йоҡлауына" килтерәсәк, шуға күрә телмәрегеҙҙә ундай һүҙҙәр булмаһын

● Сығышығыҙҙың аҙағында телмәрегеҙҙең башына ҡайтып бер-ике һүҙ әйтеү мәсьәләгә иғтибарҙы тағы ла көсәйтәсәк.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың Йыһан ҡанундары

**4. Идеялар ҡануны.** Уңышлы булыу - уй көсө менән тормошҡа ашырып булған эфир субстанция. Әгәр һеҙҙә ниндәйҙер идея тыуҙы икән, тимәк, уны тормошҡа ашырып була, юҡһа Ғаләм үҙенең иң мөһим функцияларын үтәй алмаҫ ине. Муллыҡ ерҙең теләһә ҡайһы мөйөшөндә йәшәй, ул ҡайҙандыр "тегенән" килмәй. Уны эҙләргә һәм күберәк алып ҡалырға тырышырға кәрәкмәй. Ул һеҙҙең эргәгеҙҙә һәм ҡасан саҡырғанығыҙҙы ғына көтә. Ошо субстанцияны ерҙәге уңышҡа әйләндерәһегеҙ икән, ул Юғары Көс шулай теләгән өсөн түгел, ә уны һеҙ шулай күҙ алдына килтергән, шуға лайыҡ икәнегеҙгә ышанған һәм төпкә аңығыҙға уны нисек тормошҡа ашырыу юлын табырға ҡушҡан өсөн барлыҡҡа килгән. Шулай уйҙар, идеялар тыуа, ә идеялар нескә планда уңыш ҡаҙаныуға әйләнә.

Бөтөн нәмә анда барлыҡҡа килә; идея - аңнигеҙе. Сәләмәтлегегеҙ, мөнәсәбәттәрегеҙ, интеллектуаль үҫешегеҙ һәм финанс хәлегеҙ ниндәй идеяларға иғтибар бүләһегеҙ, шулар менән билдәләнә. Кем булып өлгәшәһегеҙ - был ошо идеяларҙы тормошҡа ашырыу өсөн сарыф ителгән тырышлығығыҙ һөҙөмтәһе. Ғаләм - аңы менән уға эйә булырға өйрәнгәндәргә һәр саҡ буй етерлек субстанция. Шуны аңлаһағыҙ, һеҙ ошо аңды эшкә егергә һәләтле буласаҡһығыҙ, уңышығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн бары тик файҙалы идеялар ғына кәрәк буласаҡ.

**6. Әжер ҡануны.** Моғайын да, барлыҡ ете ҡанундың да бер-береһе менән үҙ-ара бәйләнгәнен тойғанһығыҙҙыр. Үҙ-ара алмашыу ҡануны барлыҡ ҡанундарҙан өҫтөн тора, сөнки Ғаләмдең фундаменталь принциптарын иғлан итә. Уңышҡа бәйле бөтөн нәмә бер ҡиммәттең икенсеһенә алмашыу принцибына буйһона; әммә был процеста иң әһәмиәтлеһе шул - биргән нәмә икеләтә артып ҡайта. Бында һеҙ бер ваҡытта ла Йыһандан артығыра алмаясаҡһығыҙ - ни тиклем күберәк бирәһегеҙ, шул тиклем күберәк алаһығыҙ. Был ҡанундың "Ни сәсһәң - шуны урырһың", тигән әйтелеше һеҙгә таныштыр. Нимә генә алһағыҙ ҙа, ихлас ҡабул итергә һәм уларҙы тыуҙырыуҙа ҡатнашырға кәрәк. Әгәр ниндәйҙер һәләтегеҙ бар икән, уны үҫтермәһегеҙ, асылығыҙға хыянат итәһегеҙ һәм тәбиғәтегеҙҙе алдайһығыҙ. Тыуымыштан бирелгән һәләттәрегеҙгә рәхмәтле булып, уларҙы камиллаштырһағыҙ, үҫтерһәгеҙ, тормошоғоҙға тағы ла күберәк уңыш ылыҡтырасаҡһығыҙ.

Был ҡанун ысынбарлыҡтағы барлыҡ ғәмәлдәр менән идара итә; бер нәмә лә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәй. Ысынбарлыҡта бер ниндәй уңыш та, осраҡлыҡ та юҡ, барлыҡ ваҡиғалар - үҙ-ара алмашыу ҡануны менән аңлатып булған билдәле бер сәбәптәрҙең эҙемтәһе. Нимәнеңдер ысын сәбәбен белмәйенсә, бығаш шик белдерергә мөмкин, әммә был ысынлап та шулай. Беҙ мөғжизә тип уйлаған нәмәләр - үҙебеҙ аңламаған сәбәптәрҙең эҙемтәһе. Шуға күрә, әгәр хәл-торошоғоҙҙо үҙгәртәһегеҙ килһә, Йыһанға ебәргән ғәмәлдәрегеҙҙе үҙгәртегеҙ: изгелек ебәрһәгеҙ - изгелек алырһығыҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ**



## 27 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "У вас будет ребенок..." 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Время покажет" (16+).
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Чужая жизнь". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все сокровища мира". Мелодраматический сериал (12+).
23.55 "Как убивали Югославию. Тень Дейтона". Док. фильм (12+).
00.55 "Сухой. Выбор цели".
02.00 "Долгие версты войны".
03.40 "Иван Черняховский. Загадка полководца" (12+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (12+)
22.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
23.00 "Кис ултырып". Фирҙәт Ғәлиев. Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели.**
**12.00 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.15 "Весело живем" (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (0+).**
**18.30 "Я вернусь". Сериал (16+).**
**19.30 Новости спорта.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Народы Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт. Гора "Большая Тастуба" (12+).**
**23.00 "Девушка в парке" (16+).**

## 28 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "У вас будет ребенок..." (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "У вас будет ребенок..." 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.15 "Модный приговор" (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Чужая жизнь". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все сокровища мира". Часть 2-я (12+).
24.00 "Без свидетелей. Павел Фитин против Шелленберга" (12+).
01.00 "Операция "Анадырь". На пути к Карибскому кризису" (12+).
02.00 "Долгие версты войны".
03.25 "Горячая десятка" (12+).
04.30 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
22.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
23.00 "Кис ултырып". Марсель Ҡотоев. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Я вернусь" (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня.**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Фокусники". Худ. фильм (16+).**

## 29 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "У вас будет ребенок..." Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "У вас будет ребенок..." 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.20 "Модный приговор".
0420 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 11.00, 14.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Чужая жизнь". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все сокровища мира". Часть 3-я, заключительная (16+).
23.00 "Специальный корреспондент" (16+).
01.05 "Долгие версты войны" (16+).
02.30 "Операция "Анадырь". На пути к Карибскому кризису" (12+).
03.30 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
в.2, Баш.йыры
23.00 "Наҙға төрөнөп". Хәлимә Ғәббәсова (12+)

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шатлык йыры" (0+).**
**15.15 "Шәп арба" (0+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "История признания" (6+).**
**18.30 "Я вернусь" (16+).**
**19.30 "Телецентр" (0+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Край" (16+).**

## 30 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.35 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "У вас будет ребенок..." Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "У вас будет ребенок..." 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Люди Икс". Худ. фильм (16+).
02.20 "Братья Ньютон". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.20 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия" (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
16.00 "Чужая жизнь". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).
22.55 "Сәләми". Мелодраматический сериал. 4 серии (16+).
02.35 "Моя улица". Худ. фильм.
04.05 "Сухой. Выбор цели".
05.05 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
23.00 "Кис ултырып". "Йыл йыры-2014". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Я вернусь". Сериал (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "ФК "Уфа"-наша команда!"**
**23.30 "Мелодия для шарманки". Худ. фильм (12+).**

## 1 МАЯ
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Цирк". Худ. фильм.
08.10 "Трембита". Худ. фильм.
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Лев Лещенко. Ни минуты покоя".
11.10 "Пока все дома".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "У вас будет ребенок..." Сериал (12+).
14.15 "Королева бензоколонки". Худ. фильм.
15.45 "Солдат Иван Бровкин". Худ. фильм.
17.30 "Белые росы". Комедия (12+).
19.10 Юбилейный концерт оркестра "Фонограф" (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малахрвым (16+).
23.00 "Григорий Лепс и его друзья" (16+).
01.05 "Люди Икс-2". Приключения (16+).
03.30 "Горячие головы-2". Худ. фильм (16+).
05.05 "Контрольная закупка" (16+).

### РОССИЯ 1

05.40 Шоу-спектакль, посвященный 80-летию художественной гимнастики.
07.10 "Каждый за себя". Мелодраматический сериал. 6 серий (16+).
12.40, 14.15 "Disco дача". Весенний концерт (12+).
14.00 "Вести".
15.05 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (12+).
16.55 "Танцы со звездами". Финал.
20.00 "Вести".
20.35 "Вместо нее". Мелодрама (12+).
00.20 Юбилейный концерт Полада БюльБюль оглы.
01.55 "Бедная Liz". Комедия (12+).
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (12+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
23.00 "Наҙлы яҙ". Концерт-дискотека (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "В сердце моем дыхание весны" (12+).**
**07.50 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**08.30 "Неуловимые мстители". Худ. фильм (6+).**
**09.45 "Гора рюкзаков" (0+).**
**11.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**13.00 "Долго-долгое детство". (12+).**
**14.15 "Кукушкин чай" (0+).**
**14.45 "Наши годы" (12+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.30 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Замандаш" (6+).**
**18.45 "Мою жену зовут Морис" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 Гала-концерт Республиканского телевизионного конкурса башкирского танца "Байыҡ" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.)**

## 2 МАЯ
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Солдат Иван Бровкин". Худ. фильм.
07.55 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Полосатый рейс". Комедия.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Белые росы". Комедия (12+).
13.55 "Иван Бровкин на целине". Комедия.
15.50 Коллекция "Первого канала". "Лучшее, любимое и только для Вас!". Концерт Филиппа Киркорова (16+).
18.15 "Большая разница". Пародийное шоу (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.55 "Что? Где? Когда?"
00.10 Концерт Валерии в "Альберт-Холле" (16+).
02.20 "Люди Икс: последняя битва". Приключения (16+).
04.10 "Ночь с Бет Купер". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Неподдающиеся". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.25 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50, 03.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 Юбилей века. 100-летие Владимира Зельдина.
13.00, 14.30 "Отец поневоле". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
15.25 "Братья по обмену". Комедийный сериал (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Вместо нее". Худ. фильм (12+).
00.20 "Небо на ладони". Юбилейный концерт Сосо Павлиашвили".
01.55 "Майский дождь". Худ. фильм (12+).
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
в.2, Баш.йыры
22.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
23.00 "Кис ултырып"."Юлдаш йыры-2014". Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 "Доброе утро!"**
**08.00 "Новые приключения неуловимых". Худ. фильм (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт. Уральский хребет" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015" (12+).**
**17.00 "Хазина" (0+).**
**17.30 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.0 "Башҡорттар" (0+).**
**18.30 "Замандаш" (6+).**
**18.45 "Судьба, выбранная мной" (12+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Женское лицо Победы" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 "Мои сыновья - мои крылья" (12+).**
**По окончании: новости (на башк. яз.).**

## 3 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.25 "Иван Бровкин на целине". Комедия (16+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 Новый "Ералаш".
10.25 "Как Иван Васильевич менял профессию" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Барахолка" (12+).
14.50 Коллекция "Первого канала". "Лед и пламень".
16.50 "Афоня". Комедия.
18.30 Коллекция "Первого канала". "Голос. Лучшее".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 Бокс. Бой за титул чемпиона мира.
24.00 "Концерт Димы Билана" (16+).
02.00 "Люди Икс: начало. Росомаха". Приключения (16+).
04.00 "Обезьянья кость". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.20 "Мимино". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10, 04.05 "Россия. Гений места" (12+).
12.10, 14.25 "Лев Лещенко и Владимир Винокур приглашают..." Юбилейный концерт.
14.00 "Вести".
15.15 "Братья по обмену". Комедийный сериал (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Истина в вине". Мелодрама (16+).
00.20 "Мама, я женюсь". Мелодрама (12+).
02.15 "Домоправитель". Худ. фильм (12+).
05.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
23.00 "Кис ултырып". "Ҡурай дуҫтарын йыя". Концерт (12+) сеть.Turkvision+disko

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Корона Российской империи, или Снова неуловимые". Худ. фильм (12+).**
**09.45, 10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.00 "Физра. Спортблок спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Ал да гөл" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 Гала-программа XI Всероссийского форума боевых искусств (6+).**
**18.00 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.45 "Дурь" (12+).**
**20.30 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**20.45 "История признания" (6+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Любовь. Жизнь. Победа" (12+).**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (8) дүшәмбе | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 28 (9) шишәмбе | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 29 (10) шаршамбы | 4:14 | 5:44 | 13:30 | 19:13 | 20:43 | 22:13 |
| 30 (11) кесе йома | 4:12 | 5:42 | 13:30 | 19:15 | 20:45 | 22:15 |
| 1 (12) йома | 4:10 | 5:40 | 13:30 | 19:17 | 20:47 | 22:17 |
| 2 (13) шәмбе | 4:08 | 5:38 | 13:30 | 19:19 | 20:49 | 22:19 |
| 3 (14) йәкшәмбе | 4:06 | 5:36 | 13:30 | 19:21 | 20:51 | 22:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

АФАРИН!

# ЯҢЫ ТӨРКӨМ "САРМАТ" ТИП АТАЛА



**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында бына ярты йыл инде "Сармат" тип аталған яңы төркөм эшләй. Ул филармония составындағы башҡа төркөмдәрҙән нимәһе менән айырыла һәм ниндәй йүнәлештә ижад итәсәк? Ошо турала төркөмдөң етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы Радик ВӘЛМӨХӘМӘТОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Бөгөн эстрада менән башлыса шоу-бизнес ҡанундары идара итә икәнен күҙ уңында тотҡанда, яңы төркөм төҙөү талабы нимәнән тыуҙы? "Сармат" башҡорт эстрадаһына ниндәй үҫеш, яңылыҡ алып киләсәк?**

- Бөгөн ҡайҙа ғына сығыш яһарға барма, ойоштороусылар иң тәүҙә шундай һорау бирә: "Ә һеҙ тере тауышҡа йырлаясаҡһығыҙмы?" Шоу-бизнес дәүере нисек кенә үҙ ҡағиҙәләрен индерергә маташмаһын, тамашасы унын ялтырауығынан ялҡты хәҙер. Йырсы сәхнәлә тере тауышҡа йырлаһа ла, йыр фонограмма менән оҙатылып бара, йәки йырсының эргәһендә баянсы ғына тора хәҙер. Фонограмма булғас, уның ысынлап уйнауы ла шарт түгел хатта. Башҡорт эстрадаһы барлыҡҡа килә генә башлаған осорҙа сәхнәлә музыканттар уйнай ине. Әлбиттә, филармонияның Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, Джаз оркестры бар, әммә унда кеше лә күп. Шуға ла беҙгә гастролдәргә йөрөү өсөн 6-7 музыканттан торған ансамбль кәрәк ине. Төркөмдә музыканттарҙың тере тауышҡа уйнауы тамашасыны ныҡ ылыҡтыра. Ярты йыл гастролдәрҙә йөрөнөк, хәҙер беҙҙе яйлап таный башланылар. Төркөм ойошторғанда иң ҡыҙығы шул булды: һәләтле музыканттарҙы оҙаҡ тупланыҡ. Йырсыға кастинг иғлан итһәң, әллә күпме кеше килә, ә бына музыканттарға ҡытлыҡ. Шулай ҙа хәҙер һуҡма инструменттар, гитара, баян, саксофон, синтезатор һәм, әлбиттә, ҡурайҙан торған төркөм йыя алдыҡ. Сәнғәт академияһын тамамлаған һәр йырсы йырсы булып китә алмаған кеүек, оҫта музыканттар ҙа һирәк осрай. Һәр эште башлап киткәндә ауырлыҡтар була, беҙҙең дә әле хәл итә торған көнүҙәк мәсьәләләребеҙ бар, шулай ҙа төркөмдәге ижади хәл-торош менән ҡәнәғәтмен.

**➔ Бөтөн донъяла этник музыкаға тартылыу көслө бөгөн, йырсы булараҡ һеҙ быға ниндәй аңлатма бирер инегеҙ?**

- Этникаға, тимәк, милли тамырҙарына тартылыу бик яҡшы күренеш. Музыканттарҙың үҙ юлын, үҙ стилен эҙләүе маҡтауға ғына лайыҡ. Тик халыҡ йырҙарын тамаҡ төбө менән йырлау кеүек күренештәрҙе хупламайым. Тыва, яҡут халҡы өсөн ул традицион башҡарыу өлгөһө булһа, башҡорт халҡында тәүге урында моң тора. Сит халыҡтарҙың этник музыкаһы менән үҙ милләтеңде күтәреп булмай, шуға быны менән артыҡ мауығыу дөрөҫ түгел. Ғөмүмән, "Сармат" төркөмө этно-рок йүнәлешендә эшләмәй, ул вокаль-инструменталь төркөм. Бындай төркөмдәр филармонияла электән дә булған, Бәхти Ғайсин, Наил Ғәлиевтарҙың төркөмдәрен генә хәтергә төшөрөгөҙ. Әммә быны элекке заманға ҡайтырға ынтылыу тип тә аңларға ярамай. Беҙ халыҡ йырҙарын да, ретро йырҙарҙы ла, шулай уҡ заманса эшкәртеүҙәге халыҡ йырҙарын да башҡарабыҙ.

**➔ Халыҡ йырын заманса эшкәртеү - ул шулай уҡ заман талабымы?**

- Бөгөнгө көндә тик халыҡ йырҙарынан ғына төҙөлгән концерттарға тамашасыны йыйып булмай. Шуға, бәлки, быны заман талабы тип тә әйтеп булалыр. Оҙон көйлө халыҡ йырҙарын юғалтабыҙ, тип ҡурҡырға ярамай. Республикала "Ирәндек моңдары", "Оҙон көй", "Дуҫлыҡ йыры" кеүек бәйгеләр үтеп тора, юлдаш телевидениеһында барған "Башҡорт йыры" конкурсында ҡатнашыу өсөн дә халыҡ йырын белеү мотлаҡ, шуға ла йәш йырсыларҙың репертуарында ла халыҡ йырҙары бар. Әйткәндәй, йәштәр араһында өмөтлө йырсылар ҙа күп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заманға, тамашасының талабына ҡарап ҡорола бөгөнгө башҡорт эстрадаһы, тиһәк тә, сәнғәттең төп маҡсаты - тамашасының зауығын үҫтереүҙер, моғайын. Быға тиклем йырсылар еңелерәк юлдар эҙләһә, хәҙер, киреһенсә, сәхнәләргә тере тауыш, тере моң ҡайта башланы. "Сармат" төркөмөнөң изге башланғысы ла эстрадабыҙға яңы биҙәк өҫтәһен.**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ХАЛЫҠ БЕЙЕҮҘӘРЕ АНСАМБЛДӘРЕ...

## оҫталыҡта ярышты

**Мәләүез ҡалаһында Фәйзи Ғәскәров исемендәге призға Халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре араһында төбәк-ара фестиваль үтте. Унда республиканың ҡала һәм райондарынан 16 халыҡ бейеүҙәре ансамбле ҡатнашты.**

Һәр коллектив баһалама ағзалары хөкөмөнә 3-әр бейеү тәҡдим итте. Фестивалдең шарты буйынса, бер бейеү башҡорт хореографияһының классик өлгөләренә әүерелгән бейеүҙәр араһынан һайланырға, берәүһе - урындағы халыҡтың милли бейеү үҙенсәлектәрен дә сағылдырырға тейеш ине. Өсөнсө бейеүҙе коллективтар үҙ теләге буйынса һайланы.

Сараны ойоштороусыларҙы береһе - Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле тамашасыларға ансамблдең алтын фондынан "Өс туған" бейеүен бүләк итте.

Фестиваль һөҙөмтәләре буйынса, Мәләүез районының "Көнгәк" халыҡ бейеүҙәре ансамбле Гран-при яуланы. Беренсе урынға - Өфө ҡалаһының "Ирәндек" халыҡ бейеүҙәре ансамбле, икенсе урынға Күмертау ҡалаһының "Контраст" халыҡ бейеүҙәре ансамбле һәм Баймаҡ ҡалаһының "Ирәндек" халыҡ бейеүҙәре ансамбле лайыҡ булды. Ишембай ҡалаһының "Берғамыт" халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Солнышко" халыҡ хореографик театр-студияһы, Өфө ҡалаһының "АлАНТ" халыҡ бейеүҙәре ансамбле өсөнсө урында.



## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Ауырғазы районы** Моразым ауылынан Ғәлимйән Бәхтигәрәев, Усман ауылынан Гөлъямал Бикәнәсова, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Көнһылыу Насретдинова, **Әлшәй районы** Иҫке Сәпәш ауылынан Лидиә Маликова, **Стәрлебаш районы** Ҡуғанаҡбаш ауылынан Әлфиә Дәүләтшина, **Стәрлетамаҡ районы** Константиноградовка ауылынан Данис Урманшин, Мариинский ауылынан Йәмилә Суфиянова, Рощинский ауылынан Лилиә Кәримова, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Бүләк Ҡәйепҡолова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Зәлифә Ҡасҡынова, **Әбйәлил районы** Юлдаш ауылынан Әнүзә Шәрипова, Буранғол ауылынан Бәширә Усманова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Мәғзирә Иҫәндәүләтова, Фәйрүзә Ҡасимова, Исҡужа ауылынан Ғилмиә Усманова, Һултантимер ауылынан Зөһрә Йәнсурина, **Өфө ҡалаһынан** Вадим Ҡунафин, Нәйлә Буранғолова, Йәүһәрә Зәйниева, **Хәйбулла районы** Аҡъяр ауылынан Мәрфуға Азаматова, **Ғафури районы** Юлыҡ ауылынан Рәйлә Шакирова, **Ишембай районы** Яңы Сәйет ауылынан Айгөл Кәримова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Сәләмәт булығыҙ, ырыҫлы тормошта, байлыҡта, муллыҡта, күңел көрлөгөндә йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 апрель "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма

**26 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**27 апрель** Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисткаһы **Зинира Атнабаеваның** хәтер кисәһе

**29-30 апрель** ПРЕМЬЕРА **"Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 11.00

**29 апрель "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыу. Башлана 15.00

**29 апрель "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 апрель** Башҡортостандың халыҡ артисы **Радик Вәлмөхәмәтовтың** концерты үтә. Тамашала башҡорт халыҡ йырҙары, композиторҙар әҫәрҙәре яңғыраясаҡ. Концертта филармонияның яңы төркөмө - "Сармат" сығыш яһаясаҡ.

**КЕМ АЛЫҠ?**

Радик Вәлмөхәмәтовтың иң аҙаҡҡы аудиоальбомы нисек атала?

Телефон: 8-927-956-68-89

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 май "Беренсе май - яҙ байрамы"** театр бинаһы алдында концерт. Башлана 12.00

**7 май "Ә таңдар бында тыныс ..."** (Б. Васильев), драма. Башлана 16.00

ӘЙТЕШ

# МУЙЫН ТҮГЕЛ, БАШ БУЛЫР САҠ ЕТКӘН...

**Айытҡужа һәм Өшөрә сәсәндәрҙең шиғри әйтеше дауам итә. Әйтештең башы 14-се һанда башланғайны.**
**Хәрәмдәргә батып йөшәп - килмәҫ йәннәт,**
**Донъяла уҡ бирелә шул ут-йәһәннәм.**
**Һинән көтәм яуабыңда йәшәү планын,**
**Милләт тиеп яна икән рухлы ҡаның... - тип мөрәжәғәт иткәйне гәзитебеҙҙең үткән һанында баҫылған әйтештә Өшөрә сәсән Айытҡужа сәсәнгә.**

**Айытҡужаның Өшөрәгә әйткәне:**

Теләмәнем, һүҙем һинә төртөлдө,
Һин дә минә тәкә кеүек төкөнөң.
Аңлашылмаусылыҡ ваҡыты менән булғылай,
Һәр кеше лә юрғанды үҙенә һуҙғылай.
Кемлегеңде беләйем тип нығыштым,
Ураү юлдан яҡынларға тырыштым.
Әйткәндәреӊ сайыр кеүек һылана,
Ҡылғандың да энәһендәй ҡаҙала.
Ағиҙелдең талғын ғына ағышы,
Ҡуктән яуған һабантурғай тауышы.
Һорауына яуап бирәм, аңларһың,
Яңылышһам, төҙәтерһең, аҡларһың.
Кем тыңлаһын, беҙҙең һүҙ ул сүп кенә,
Халыҡ үргә бал йыйыусы ҡуҫ кенә.
Ябай халыҡ иле өсөн мәхлүктәр,
Ауыр саҡта йән аямаҫ мәмлүктәр.
Бөтә кеше түгел дә бер ҡалыптан,
Күп эсә тип көлмәҫ кәрәк халыҡтан.
Һәүәҫкәрҙәр эсә табып көсептән,
Профессионал эсә алып сейфтан.
Ҡыуанамын, йәштәр килә мәсеткә,
Һанайыҡсы быны изге кәсепкә.
Эсем боша бер-нисә кешегә ҡарап,
Әйтеүҙәренә, халыҡ була тип һарап.
Фетнә ҡуҙы һүнмәгән ул халыҡта,
Дөрләп яныр даулағанда хаҡлыҡты.
Тағы мине борсой әле бер әтнә,
Нимә соҡой башланы был тип әйтмә.
Ҡатын-ҡыҙҙы Ул яралтҡан таяулы,
Ир-аттарҙың сирҙәренән ҡамаулы.
Шул ҡамауҙы емерәләр үҙҙәре,
Күп нәмәлә һылтаһа ла беҙҙәрҙә.
Кәпәс кейҙе ҡатын-ҡыҙҙар иң тәүҙә,
Салбар кейҙеләр килешә тип көүҙәгә.
Рулдә улар, кабинетта ла - түрҙә,
Ынтылалар һаман һаман да үргә.
Яуап әҙер, күрәһең, һүҙ ҡуйышҡан,
Йәнтүрәнең дә ҡатыны һуғышҡан.
Һуңғы ваҡыт ҡамауҙары йыртылды,
Ирҙәр сире инфаркт, инсульт иш булды.
Ҡатын-ҡыҙҙы ғәйепләп тә әйтмәйем,
Башҡа һуғыр таяҡ үҙем әҙләйем.
Ҡарғаның да балаһы үҙенә аҡ була,
Һәр кеше лә үҙенә күрә хаҡ була.
Асыуланһаң, асыу утын яндырма,
Әйтерендә әйт, янында ҡалдырма.
Һиндә бар кѳслә боҫҡон,
Миндә бар сәмсел оҫҡон.
Күтәргәсем әләмде,
Ҡулға ҡорал-ҡәләмде,
Юҡ сигенеү әмәлем,
Майҙан ташлар ғәмәлем.
Бир һорау - яуап бирәм,
Ең һыҙғанып керешәм.

**Өшөрәнең Айытҡужаға әйткәне:**

Йә, аңлаштыҡ, инде эшкә күсәйек,
Оҙон һүҙҙе беҙ ҡыҫҡарта төшәйек,
Халыҡ һүҙе булмай ул һис сүп кенә,
Быға заман миҫалдары күп кенә.
Ишетмәһә хаҡлы һүҙҙе түрәләр,
Бер мәл килеп яҙаһын да күрәләр.
Әйтелмәгән юҡҡа ғына: "Ҡарғыш бар,
Кешеләрҙән ҡарғыш түгел, алғыш ал!"
Етеп тора һәммәһе лә һүҙҙәрҙең
Хужаһына ғаләмдәрҙең, ерҙәрҙең.
Аллаһ өсөн беҙ һәммәбеҙ - бәндәбеҙ,
Фанилыҡҡа һауыт иткән тәндәбеҙ,
Гонаһы бер - эстең ни ҙә кәсептән,
Йә булмаһа кабинетта сейфтан.
Һаҡлай алмаҫ ҡыйбат-ҡыйбат табуттар
Гонаһ өсөн билдәләнгән тамуҡтан.
Эйе, йәштәр йөрөй хәҙер мәсеткә,
Тик төшөп тә киткәндәр бар хәсеткә.
Унды-һулды айырмайса балалар
Секта тигән ғәләмәткә ҡабалар.
Бер-беренән ғәйеп эҙләп талаша -
Быны шундай бер ҡурҡыныс тамаша.
Иблистәр ҙә кейеп ала салмаһын -
Дин хәлдәре хайрандарға ҡалмалы.
Фетнә тиһәң, бына шунда ул фетнә,
Фетнә сыҡһа, һис бер яҡшылыҡ көтмә.
Яман ауыҙ яу килтерер өйөнә,
Башҡа юлды һайлап булған көйөнә.
Болғансыҡта кемдер тота балыҡты,
Хаҡлыҡ тиеп башын бутап халыҡтың.
Хаҡлыҡ тиеп илде һаттыҡ түгелме,
Сәүиттәрҙе тотоп аттыҡ түгелме,
Хурлай-хурлай олатайҙар тарихын,
Беҙ "совок"ҡа әйләндерҙек барыһын.
Йә һуң шунан бик шәбәйеп киттекме,
Рокфеллерҙай сереп байып бөттөкмө?
Беҙҙең өй ҙә булғанмы өй, тимәйек,
Хәл юҡ көйө иҫкеһенә теймәйек.
Ҡатын тиһәң, ҡатын бит ул - инә ҡорт,
Инә ҡортһоҙ һүнә күсе, һүнә йорт,
Бүлешмәйек, һин - ир, тиеп, һин - ҡатын,
Бергәләшеп уйлашайыҡ ил хаҡын...

**Шулай итеп, Айытҡужа һәм Өшөрә сәсәндәрҙең шиғри әйтешенә йәнәш тағы икәү - Көфө менән Йәнһылыу сәсәндәр майҙан тоторға әҙерләнә. Башҡалар ҙа рәхим итегеҙ. Әйтеш кеҫә телефоны аша СМС менән дә: +7-937-835-34-74, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы аша ла: kiskeufa@ufacom.ru. ҡабул ителә. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә лә күҙәтеп бара алаһығыҙ.**

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

## ҺОҒОНДОРОУ ЙОЛАҺЫ



**Үҙенсәлекле һоғондороу йолаһы Урал аръяғындағы райондарҙа бигерәк тә киң таралған, шулай уҡ ҡайһы бер төрки халыҡтарҙа, мәҫәлән, ҡаҙаҡтарҙа ла бар.**

Күгәрсен районында һоғондороу йолаһы менән Үргә Бикҡужа ауылында Шәжәрә байрамында осраштым. Ҡунаҡтарҙы ихлаҫлап һыйлаған апай менән танышып алдым. Баймаҡтан булып сыҡты. Унын килгән ҡунаҡтарҙы башҡорт халҡына ғына хас йола - һоғондороп һыйлауы үҙе бер тамаша булды.

- Был йола беҙҙең Баймаҡ яҡтарында киң таралған. Күгәрсен районына килен булып төшкәс, йоланы үҙ-ара ҡунаҡ саҡырышҡанда тоторға тырышам. Яҫы итеп туралған һимеҙ итте һалмаға урап, тоҙлоҡҡа манып, дүрт бармаҡ менән генә бөрөп тотоп, ҡәҙерле һәм абруйлы ҡунаҡтарға һоғондораһың. Артынса ҡоротло һурпа йә ҡымыҙ эсеп ебәрһәң, теленде йоторһоң, - тине Фәимә апай. Эйе, һәр йоланың, ғөрөф-ғәҙәттең үҙ тәртибе, үҙ нескәлектәре бар. Халҡыбыҙҙың гүзәл йолаларын тергеҙеү, ҡулланыу, киләсәк быуынға өйрәтеү йәһәтенән Фәимә апайҙың был эше хуплауға лайыҡ.

Ғөмүмән, аш-һыуға бик мул ҡуллы башҡорт халҡы. Хәйбуллала йәшәгән Ислам ағайым да беҙ ҡунаҡҡа ҡайтыр булһаҡ, һарығын һуя һалып ебәрә. Әнүәр ҡартатайым да шулай сумарт булған. Һунар осоро башланғас, ҡыр өйрәге, ҡаҙ атып алып ҡайтып, бер кешегә ике өйрәк-ҡаҙ иҫәбенән бешертеп, табын йыйыр булған. Хәтеремдә, аш һалһалар, итте табаҡҡа ҡутарып алалар ҙа, табында уҡ өлөшләп турап бирәләр ине. Хәҙер ошондай һыйлау кеүек аш-һыу йолалары бик һаҡланмаған. Ә бит был да беҙҙең милли асылыбыҙ, йөҙөбөҙ...

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АЛҒАНДА - БИСМИЛЛА, биргәндә - әстәғәфирулла!

Бәхет көтмәгәндә килә. Әгәр ҙә һин бәхет артынан ҡыуып йөрөһәң, уны ҡыуып етә алмауың да бар. Башҡа маҡсаттар артынан йөрө - һин, моғайын, шул маҡсаттарҙы юллап йөрөгәндә табырһың бәхетте.

**(Н.Готторн).**

Үҙенең йәшәйешен үҙенең холоҡ үҙенсәлектәренә ярашлы итеп ҡорған кеше бәхетле.

**(Г. Гегель).**

Кемдеңдер иғтибарын үҙенә йәлеп итергә кәрәк булғанда ҡатын-ҡыҙ айырыуса түҙемһеҙ була.

**(Симона де Бовуар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике кеше осрашҡан һәм уларҙың беренсеһе икенсеһенә сәләм биреп, шулай тигән:**
**- О, аҡыл эйәһе, һиңә оҙон ғүмер теләргә рөхсәт ит!**
**- Мин оҙон ғүмерҙән баш тартам! - тигән икенсеһе.**
**- Улай булғас, аҡыл эйәһенә байлыҡ теләргә рөхсәт ит!**
**- Мин байлыҡтан да баш тартам! - тигән икенсеһе.**
**- Ярай, улай булғас, мин һиңә күп улдарың булыуын теләйем!**
**- Юҡ, мин улдарҙан да баш тартам! - була яуап.**
**- Ғәжәп хәл! Күптәр теләй оҙон ғүмерле лә, бай ҙа, күп уланлы ла булырға... - тип аптырай беренсе кеше. - Ә ниңә һин быларҙан баш тартаһың?**
**- Оҙон ғүмерҙең аҙағы - туҙған һәм хәлһеҙләнгән ҡартлыҡ. Байлыҡ - ул артыҡ ығы-зығы, мәшәҡәт, тынысһыҙ йоҡо. Күп уланлы булғандар өсөн дә, тыныс көндәр бөттө, тигән һүҙ. Был өс теләкте тормошҡа ашырыуҙан ғына һин барыбер иң изге, иң аҡыллы кеше булып китмәйһең - шуға мин уларҙан баш тартам... - ти икенсе кеше.**
**- Мин һине тәүҙә аҡыл эйәһеңдер тип ҡабул иткәйнем, - ти беренсе кеше, тамам төңөлөп. - Ә хәҙер тәрән хаталанғанымды аңланым. Уйлап ҡара әле, тәбиғәт бит кешеләрҙе яралтҡан саҡта һәр береһенә ниндәйҙер шөғөл бүләк иткән. Әгәр һинең күп уландарың бар һәм уларҙың һәр береһе ниндәйҙер шөғөлгә эйә икән, улар тураһында борсолорға кәрәкме һуң? Әгәр ҙә байлығың күп икән, уны башҡалар менән бүлешергә, ниндәйҙер изге эштәр атҡарыу өсөн тотонорға була, ул саҡта байлыҡтан баш ауырымаясаҡ. Аҡыллы әҙәмде байлыҡ камиллаштыра ғына һәм иң изгелекле кешегә әйләндерә. Ул саҡта иһә бындай кеше оҙаҡ йәшәүҙән дә ҡурҡмай, туҙыу, хәлһеҙләнеү, файҙаһыҙға әйләнеү тигәнде лә белмәй. Ҡартлыҡ һинең тәнеңә бер ниндәй ҙә зыян килтерә алмай. Ҡартлыҡ рухи ҡеүәт алдында көсһөҙ...**
**Шулай ти ҙә беренсе кеше, аҡылһыҙ "аҡыл эйәһе" эргәһенән китеп бара..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 24 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 1869